ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

15-21 апрель (алағарай) 2017

№ 15 (745)

kiskeufa.ru • blog.kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуға хаҡы ирекле


БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


Үҙ өйөмдә - мин үҙем президент!





3

Һунарсылыҡ - төп кәсебебеҙ





7

Спорт донъяһы ишеген...





миңә атайым менән әсәйем асты

8-9

Димселек...





буйҙаҡлыктан ҡотҡарыр бер сара

12-13

ТВ-программа 14


***"Беҙҙең милләт өсөн иң ҡурҡынысы - маргиналлыҡ. Ул кешегә шәхес булып формалашыуҙа биологик һәм психологик планда кире йоғонто яһай. Ни өсөн тигәндә, кеше бер үк ваҡытта ике социаль төркөм һәм ике этнос вәкиле була алмай..."***

**Вадим САФИН.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Экологик белем һәм тәрбиә бирмәйенсә, йәш быуында илһөйәрлек тәрбиәләп буламы?

***Гөлсинә ЙӘҒӘФӘРОВА, БДУ-ның Сибай институты Экология кафедраһы мөдире, биология фәндәре кандидаты:*** Ысынлап та, һорау дөрөҫ ҡуйыла: минеңсә, йәш быуынға экологик белем һәм тәрбиә бирмәйенсә, уларҙа илһөйәрлек тойғоһо уятыу мөмкин дә түгелдер. Сөнки илһөйәрлек тойғоһо бит ул, асылда, тыуған йортҡа, ата-әсәңә, яҡындарыңа, тыуған төйәккә - үҙеңде уратып алған урман-ҡырҙарға, сәскәле яландарға, мәғрур тауҙарға, сылтырап аҡкан шишмәләргә булған мөнәсәбәттән ярала. Артабан ул кешенең ҡылығы, тәртибендә сағыла; тыуған илеңде, халҡыңды яратыу хисе аныҡ эштәр менән раҫлана. Тойғо ҡылыҡҡа әүерелһен өсөн белем һәм тәрбиә кешенең шәхес булып формалашыуында мөһим әһәмиәткә эйә. Экологик белем нигеҙендә кеше менән тәбиғәттең мөнәсәбәтен өйрәнеү, тәбиғәт байлыҡтарын дөрөҫ файҙаланыу, һаҡлау һәм тергеҙеү алымдары ятһа, экологик тәрбиә маҡсаты иһә тирә-яҡ мөхитте аңлы ҡабул итеүҙе формалаштырыу, тәбиғәткә һаҡсыл ҡараштың кәрәклегенә инандырыуға дөрөҫ йүнәлеш биреү тора.

Экологик тәрбиәле, белемле кеше аңлы рәүештә тәбиғәтте дөрөҫ файҙалана, ҡуллана, һаулығы хаҡында ҡайғырта, халҡын хөрмәт итә, илен, ерен, тыуған йортон, туған тәбиғәтен ярата, уны һаҡлай. Тимәк, илһөйәрлек тәрбиәһе һәм экологик белем, тәрбиә бер-береһенән айырылғыһыҙ. Тыуған ереңдә, илеңдә, тәбиғәтеңдә һаҡлау өсөн уны яратырға, яратыу өсөн уны өйрәнергә кәрәк. Әгәр һин үҙеңде уратып алған мөхитеңде яҡшы белһәң, уның бөтмәҫ-төкәнмәҫ серҙәрен аңлы рәүештә өйрәнһәң, уны ысынлап та күҙ ҡараһылай һаҡлайһың, уның киләсәген ҡайғыртаһың.

Экологик белем һәм тәрбиә биреү системаһын үҫтереү, студенттарҙа тәбиғәткә һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү, илебеҙгә, тыуған еребеҙгә, халҡыбыҙға хеҙмәт итеү, һөйөү уятыу маҡсатында Сибай институтында байтаҡ эштәр башҡарыла. Беренсенән, барлыҡ йүнәлеш студенттары ла экология предметын фән булараҡ өйрәнә; экологик өмәләр, ярыштар, фәнни-ғәмәли конференциялар, олимпиадалар үткәрелеп тора. Улар, тәбиғи, ҡыуанысла һөҙөмтәләр бирә. Мәҫәлән, үткән уҡыу йылында "Экология" йүнәлеше студенты Вәкил Ғәлиәкбәров экология буйынса Бөтөн донъя асыҡ интернет-олимпиадала ҡатнашып, бронза миҙалға лайыҡ булды. Ғөмүмән, тәбиғәткә һаҡсыл ҡараш тәрбиәләүҙе бала саҡтан уҡ башлау отошло. Беҙҙең Экология кафедраһы был йәһәттән дә әүҙемлек күрһәтә һәм Урал аръяғы мәктәптәре менән тығыҙ бәйләнештә йәшәй. Институтта йыл һайын "Тыуған еребеҙ экологияһы" тигән темаға фәнни-ғәмәли конференция үткәрелә. Унда мәктәп уҡыусылары экология һәм уның кеше сәләмәтлегенә тәьҫире хаҡында көнүҙәк мәсьәләләр күтәрә. Киләсәктә студенттарыбыҙҙың һәм беҙҙең менән бәйләнештә булған мәктәп уҡыусыларының ил-ер ҡәҙерен аңлаған төплө белгестәр, ялҡынлы илһөйәрҙәр булып үҫеүҙәрендә шигем юҡ.


**(Дауамы 2-се биттә).**


АФАРИН!

# ӨФӨЛӘ ЙӘШӘГЕ КИЛӘ...

**Был аҙнаның иң ҡыуанысла мәҙәни яңылыҡтарының береһе - режиссер Айнур Асҡаровтың "Из Уфы с любовью!" лирик комедияһының кинотеатрҙар экрандарына сығыуылыр, моғайын. Ә иң мөһиме - ул Бөтөн Рәсәй прокатына сығыусы тәүге заманса башҡорт фильмы. Мәскәү, Санкт-Петербург, Ҡаҙан һәм Рәсәйҙең башҡа төбәктәре уның менән танышыу бәхетенә эйә буласаҡ, ә Өфө тамашасыһы уны 27 апрелгә тиклем баш ҡаланың биш кинотеатрында ҡарай ала.**

Ябай ауыл егетенә бәхет өсөн нимә кәрәк? Әрменән ҡайтып килеүсе Урал үҙ йортонда яратҡан ҡатыны менән күп итеп балалар үҫтереү тураһында хыяллана. Тик уның бөтөн өмөттәре ҡапыл селпәрәмә килә - яратҡан ҡыҙы уны ҡала егетенә алыштыра, етмәһә, Урал бүләк иткән ғаилә ҡомарҡыһы - балдаҡты ла һатҡан булып сыға. Геройға Өфө буйлап уны эҙләргә тура килә...

Фильмдың тағы ла бер геройы - Өфөгә лә ҙур урын бирелә картинала. Ғәжәйеп, сағыу, ҡайһы саҡта ҡаты холоҡло булһа ла, Өфө һәр кемгә мөхәббәтен, бәхетен табыуға мөмкинлек бирә. "Был киноны ҡарағандан һуң Өфөлә йәшәге килә", - тигән яҙмалар ҙа барлыҡҡа килде социаль селтәрҙәрҙә. Сөнки Өфө Ер шарындағы бер ҡаланан да кәм түгел, киреһенсә, киноны ҡарағандан һуң, Өфө - иң яҡшы ҡала, тигән фекер уянасаҡ. Яратҡан баш ҡалабыҙға ижадсылар күҙлегенән ҡарарға, Өфөгә һөйөүегеҙҙе белдерергә һуңламағыҙ!



ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда, майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# ЕНӘЙӘТСЕ ҮҪТЕРМӘЙЕК, ТИҺӘК...

## атай тәрбиәһе бирәйек!

***Зариф БАЙҒУСҠАРОВ, РФ Дәүләт Думаһы депутаты:*** Оҙаҡ йылдар кеше алдау, талау, урлашыу, кеше үлтереү осраҡтарын тикшереү, ҡарау, хөкөм сығарыу, зыян күргәндәрҙең матди мәнфәғәттәрен яҡлау буйынса эшләргә тура килде. Һәр ваҡыт енәйәт эштәрен ҡарағанда енәйәтсенең ҡылығын, енәйәткә нимә этәргәнен белеү минең өсөн мөһим ине. Сөнки унһыҙ ғәҙел ҡарар ҡабул итеү мөмкин түгел. Шундай һығымтаға килдем: бәләкәй саҡтан дөрөҫ тәрбиә алыуҙан, ата-әсәнең балаһына донъяла нисек йәшәргә, тырышырға, иләнде, хәләл ынды яратырға, кесене яҡларға, олоно ихтирам итергә өйрәтеүенән күп нәмә тора.

Атайымдың әйткән һүҙҙәре кисәгеләй хәтеремдә: кешенекен алма, кешене илатма, оло кеше эшләгәндә ҡарап торма, өлкәндәр баҫып торғанда ултырма, беренсе булып һаулыҡ һораш, ауыҙың тулы ҡан булһа ла кеше алдында төкөрмә. Атайым мине һәр саҡ үҙе менән алып йөрөттө, ер-һыу атамаларының, халыҡтың тарихын һөйләй, аңлата торғайны. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, атайым мин студент саҡта уҡ был донъяны ҡалдырҙы. Ул минә бер ҡасан да ниндәй һөнәр алырға, ҡайҙа уҡырға өйрәтмәне. Әгәр ҙә яҡшы уҡымаһаң, тырышмаһаң, минең кеүек көтөүсе булырһың, тип кенә әйтеп ҡуя торғайны. Уның ел-ямғырҙа, ҡар-боҙлауыҡта өшөп-туңып йөрөгәнен күреп, мин уҡыясаҡмын, тырышасаҡмын, атайымды ҡыуандырасаҡмын, тип уйлай инем. Әгәр ҙә һәр бер атай үҙ балаһын шулай тәрбиәләһә, енәйәттәр ҙә шул тиклем күп булмаҫ ине.

Егерме йыл тирәһе элек балаларын ташлап, эсеп, теләһә ҡайҙа йөшөп йөрөгән бер иргә: "Ниңә эшләмәйһең, балаларыңды ҡарамайһың? Ҡатыныңа уларҙы үҫтереү ауыр бит", - тием. "Минең атай ҙа мине ҡараманы, әсәй үҫтерҙе. Ҡараһын әсәләре", - тип яуап бирҙе. Шул һөйләшеүҙе мин һаман да онота алмайым. Уның балалары ла шулай дауам итерме, тигән һорау тыуа. Ғәжәп хәл, үҙ баланды ҡараужан нисек баш тартырға мөмкин? Хайуандар ҙа балаһын ашата, үҫтерә, ә кеше аҡыллы зат әйәһе һанала бит. Атайым илен һаҡлау, ғаиләһен ҡарау ир кешенең төп бурысы, тип әйтә торғайны. Чечен Республикаһынан бер дуҫым килгәйне. Унан: "Һеҙҙә алимент түләмәүселәр күпме?"- тип һораным. "Чечендар араһында балаһын ҡараужан баш тартыусы юҡ", - тип яуап бирҙе ул. Һорауым өҫөн оят булып китте. Ниңә беҙҙә балаларын ҡараужан ситләшкән ир-егеттәр күп һуң? Тейешле ата тәрбиәһе булмағанға, ауырлыҡтан, яуаплылыҡтан ҡурҡҡанға. Ни сәсһәң, шуны урырһың, тиҙәр халыҡта. Шуға, баланы ашатып-кейендереү менән бер рәттән, уға рухи тәрбиә биреү ҙә бик мөһим. Ошоно һәр саҡ иҫендә тотһон ине беҙҙең ир-уҙамандар.

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# Экологик белем һәм тәрбиә бирмәйенсә, йәш быуында илһөйәрлек тәрбиәләп буламы?

(Башы 1-се биттә).



***Марат БӘХТИЙӘРОВ, Көньяҡ Урал ҡурсаулығы хеҙмәткәре:*** Һуңғы йылдарҙа донъя кимәлендә экологияны һаҡлауға ҙур иғтибар бирелә: экологик саммиттар, форумдар үткәрелә. 2015 йылда Рәсәй Президенты Владимир Путиндың климат мәсьәләләре буйынса Парижда булып үткән БМО саммитында, Халыҡ-ара Арктика форумында һөйләгән сығыштары асылда тирә-яҡ мөхитте һаҡлау буйынса программа положениелары үҙ эсенә алды. Шул уҡ ваҡытта, минең уйымса, был өлкәлә мәсьәләләрҙең иң мөһиме булып граждандарҙа, киләсәк быуында экологик белем һәм шуға бәйле экологик мәҙәнилек тәрбиәләү иң әһәмиәтлеһе булып ҡала.

Экологик белем ни өсөн кәрәк беҙгә? Беренсенән, әле генә әйтеп китеүемсә, кешелектең экологик мәҙәнилек кимәлен күтәреү маҡсатында. Беҙҙә әле кимәл тигән нәмә, тураһын әйткәндә, юҡ кимәлендә. Һис тартынып тормайынса, беҙ тәбиғәттең иң гүзәл, изге иҫәпләнгән урындарында ла үҙебеҙҙән һуң бысраҡ ҡалдырырға, сүпләргә, уйлап та бирмәй усаҡ тоҡандырып ебәрергә ғәҙәтләнгәнбеҙ һәм был йылдар буйына шулай дауам итә. Экологик белем биреү кешене барыбер уйланырға, анализларға, перспективаны күҙалларға ярҙам итә: балаларыбыҙға ниндәй өлгө күрһәтәбеҙ һәм үҙебеҙҙән һуң уларға ниндәй мираҫ ҡалдырабыҙ - ошо хаҡта, мәҫәлән. Экологик белем һәр кемгә кәрәк, айырыуса үҫеп килеүсе быуынға. Бер география фәне генә бындай белемде бирә алмай, әлбиттә. Мәктәптәрҙә экология дәрестәре булдырыу, уҡыу әсбаптары, ҡулланма материалдар, методик күрһәтмәләр нәшер итеү кәрәк, тип уйлайым. Был йәһәттән мәктәп уҡыусылары ҡатнашлығында уйын, ярыш, фестиваль һәм конкурстар үткәреү яҡшы һөҙөмтә бирәсәк, үҙ тәжрибәмдән сығып әйтәм быны. Беҙҙең ҡурсаулыҡ Белорет, Архангел, Силәбе өлкәһенең Ҡатау-Иван районы биләмәләрен берләштерә. Беҙ ошо районлар мәктәптәре менән балаларҙа тәбиғәткә ихтирам, һөйөү тойғолары тәрбиәләү буйынса тығыҙ бәйләнештә эшләйбеҙ. Мәҫәлән, улар йыл һайын айырым һаҡланған тәбиғәт биләмәләренә ярҙам йөҙөнән ойошторолоп килгән халыҡ-ара "Парктар маршы" акцияһында ихлас ҡатнаша. Унда 5-се кластан алып бөтөн уҡыусыларҙы йәлеп итергә тырышабыҙ: улар тәбиғәт байлыҡтарына һаҡсыл мөнәсәбәттә булырға, сүпләмәскә өйрәнәләр, пейзаж күренештәрен һүрәткә төшөрәләр, тәбиғи материалдарҙан ҡул эштәре буйынса оҫталар конкурсында ҡатнашалар. Йәйге каникулдарҙа махсус отрядтар төҙөп, турист һуҡмаҡтары буйлап сәйәхәт итеү, палаткалар ҡороп, йылға буйҙарында ял итеү тәбиғәтте яҡындан тойорға, уны аңларға булышлыҡ итәсәк.

***Айһылыу ЮНЫСБАЕВА, Баймаҡ районы Йомаш мәктәбе уҡытыусыһы:*** Билдәле булыуынса, быйылғы йыл Экология һәм айырым һаҡлауға алынған тәбиғәт биләмәләре йылы тип иғлан ителде. Был юҡҡа ғына түгел. Йәмғиәттә кеше, тыуған төйәк, тыуған ил, тәбиғәт төшөнсәләре тығыҙ бәйләнештә ҡабул ителә. Шуға күрә лә тәбиғәтте һаҡлау, тимәк, кешелекте, илде һаҡлауға бәрәбәр. Бына ошо төшөнсәләр кешегә бала саҡтан, йәгни ғаиләнән, мәктәп тарафынан аңына еткерелергә тейеш.

Был төшөнсәләр Баймаҡ районы Йомаш урта мәктәбендә уҡыусыларға нисегерәк еткерелә һуң? Тиҫтә йылдар инде мәктәптә "Мәктәп урмансылығы" түңәрәге эшләй. Уның менән биология уҡытыусыһы Роза Байегетова етәкселек итә. Уҡыусылар йыл һайын апрель-май айҙарында йәш үҫентеләр ултыртыуҙа ҡатнаша, йылға-күл буйҙарын таҙартырға сыға, республика буйынса үткәрелгән төрлө слет, ярыштарҙа ҡатнаша. Һәр йыл ағастар ултыртыуҙан килгән килемгә мәктәптә балалар һабантуйы, Яңы йыл байрамдары үткәрелә. Күптән түгел генә беҙҙең балалар БР Урман хужалығы министрлығы үткәргән мәктәп урмансылары съезында ҡатнашып, үҙҙәрен күрһәтеп, призлы урындар яулап, маҡталып ҡайттылар. Айырыуса Әлексбаева Әминә, Тойғонова Наҙгөл, Солтангәрәева Гөлназ, Барлыбаева Гөлзидә, Байсыуаҡов Дим, Вәлиева Хадижә һәр экологик башланғыстың инициаторҙары булып танылды.

Беҙҙең мәктәп уҡыусылары район, республика кимәлендәге экологик темаға фәнни тикшеренеүҙәр эштәрелә башҡаралар. Был эштәре менән республика, район кимәлендә призлы урындарға лайыҡ булалар. Ғөмүмән, беҙҙең Йомаш мәктәбендә тәбиғәтте һаҡлау буйынса бик матур йолалар бар. Яҙ етһә - ағас ултыртыу, экологик өмәләр, тематик походтар, ҡыштарын - тағараҡ, йәшел патруль операциялары үтә һәм былар барыһы ла уҡытыусылар менән берлектә башҡарыла. Ҡайһы бер сараларға ата-әсәйҙәр ҙә йәлеп ителә. Аҙналыҡтар үткәрелә. Был аҙналыҡта тыуған ил, тыуған төйәккә бағышланған йыр, шиғыр бәйгеләре үтә. "Экологик ассорти" тип аталған класс сәғәттәре үтә. Бына шулай, беҙҙең уҡытыусылар экологик тәрбиә бирмәйенсә, уҡыусыларҙа илһөйәрлек тәрбиәләү икеле булыуын яҡшы аңлап эш итә.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓**Башҡорт дәүләт университетының башҡорт филологияһы һәм журналистика факультеты быйыл өсөнсө тапҡыр башҡорт теленән региональ диктант ойоштора. Ул 22 апрелдә сәғәт 10-да Башҡорт дәүләт университетының төп корпусында (З.Вәлиди урамы, 32-се йорт, 01, 02-се аудиториялар) һәм БДУ-ның Стәрлетамаҡ, Сибай, Бөрө, Учалы, Нефтекама филиалдарында, юғары уҡыу йорттарында, колледждарҙа, мәктәптәрҙә һ.б. ойошмаларҙа үткәрелә. Акцияла теләгән һәр кем ҡатнаша ала.**

✓Башҡортостанда тәүге экологик өмәләрҙә 62 меңдән ашыу кеше ҡатнашҡан. 1,3 мең тоннаға яҡын сүпсар йыйылған, төбәктә биләмәләрҙең 4 проценты таҙартылған һәм төҙөкләндерелгән. Һауа шарттарының тотороҡһоҙ булыуы сәбәпле республиканың ҡайһы бер район һәм ҡалаларында экологик өмәләр башланмаған әле. Улар иҫәбендә - Стәрлетамаҡ, Ағиҙел, Нефтекама, Октябрьский, Салауат, Межгорье, шулай уҡ 18 район. Биләмәләрҙе таҙартыу буйынса акциялар 13 майға тиклем дауам итә.

✓15 апрелдә Өфөлә тәүге дөйөм ҡала өмәһе ойошторола. Санитар өмәләр ай аҙағына тиклем дауам итә. Ҡала хакимиәтендә хәбәр итеүҙәренсә, Непейцев дендропаркында, Якутов исемендәге паркта, Енеүҙең 50 йыллығы скверында һәм С. Юлаев исемендәге баҡсала өмәләр үткәреү күҙаллана. Ҡоро-һары, ҡарт ағастарҙы киҫеү, лапы һәм сүп-сар йыйыу бурысы тора. Дөйөм өмәләр "Кашҡаҙан" һәм Нефтехимиктар мәҙәниәт һәм ял парктарында, шулай уҡ Баландин бульварындағы, М. Рыльский урамындағы скверҙарҙа ойоштоcола.

✓Йылайыр районындағы Ш. Бабич исемендәге башҡорт гимназияһында республиканың ассоциацияланған ЮНЕСКО мәктәптәре һәм ЮНЕСКО дуҫтары клубтары ҡатнашлығында "Донъя халыҡтары эпостары" зона фестивале уҙғарылды. Сарала Урал арьяғындағы һигеҙ ҡала һәм районды мәғариф бүлектәре һәм белем биреү учреждениелары вәкилдәре ҡатнашты. Фестивалдең маҡсаты - Башҡортостанда башҡорт халҡының, Рәсәй һәм донъя халыҡтарының мәҙәни мираҫын һаҡлау өлкәләрендә ЮНЕСКО проекттарын һәм программаларын бойомға ашырыуҙа мәғариф учреждениеларының хеҙмәттәшлеген киңәйтеү.

✓ *Туған телдә һаҡлап ҡалыу һәр кемдең шәхсән шөғөлө. Ошоға тиклем бер генә президент та минең өйөмә килеп, башҡорт телендә һөйләшеүҙе тыйып, өйөмдә үҙ телеңдә һөйләшмә, тигән фарман бирмәне. Үҙ өйөмдә мин - үҙем президент.*



*КИЛЕШМӘЙЕМ!*

**Халҡыбыҙҙың үсеүенә үҙебеҙ үк тотҡарлыҡ яһап, сәбәпһеҙ бахырға әйләнәбеҙ кеүек тойолоп китә миңә бөгөн. Күреүебеҙсә, башҡа халыҡтар сит тел өйрәнеп, сит ил кимәленә сығыу менән мәшғүлдәр, ә беҙ һаман шул бер үк хәстәрлек - телебеҙҙе һаҡлап ҡалыу менән "янабыҙ". Телебеҙҙе бөтөрөргә маташыусы "дошманды" ситтән эҙләйбеҙ, ғәйеплеләрҙе уйлап сығарып әрләйбеҙ.**

# ҮҘ ӨЙӨМДӘ - МИН ҮҘЕМ ПРЕЗИДЕНТ!



Кем бөтөрә телебеҙҙе? Туған телеңә булған ихтирам һәм һөйөү ҡайҙа һәм нисек ярала? Миңә ҡалһа, яуабым берәү генә: ғаиләлә ярала һәм атай-әсәйең ҡаны менән күсә.

Бер саҡ атайымдан: "Атай, ҡояш сәғәт нисәлә сыға?" - тип һораным. Уның яуабын ғүмерҙә лә онотмаҫтаймын: "Ҡыҙым, ҡояш берәй нәмәнең эсенән килеп сыҡты тип уйлаһаң, төптө яңылышаһың. Башҡаса улай тип әйтмә, ҡояш ҡалҡа, тип һөйлә, юғиһә, ҡояш "Үҙеңдең күҙең сыҡһын!" тип әйтер", тигәйне. Бындай иҫкәртеү-миҫалдар атайым менән һөйләшкәндә бик күп булды. Тағы ла хәтерҙә ҡалдырырлыҡ итеп әйткәндәренән: "Ҡыҙым, башҡорт бер ваҡытта ла "аҡ ат" тип һөйләмәй, "күгат" тиергә кәрәк, урыҫсаһы "сизый конь" була. Ниндәй "ат ите" булһын! Башҡорт "йылҡы ите" тип һөйләшә! Урыҫсаһы - конина. Башҡорт "арба" тимәй, башҡорт "арва" ти".

Беҙ үҫкән ғаиләлә телгә ихтирам ҙур булды. Әсәйем һәр ваҡыт һүҙҙе уйлап һөйләргә өйрәтер ине: "Аллаһтан ҡурҡ, ете бөләнең алтауһы - телдән!" - тип гонаһлы хәбәр һөйләүҙән тыйып ҡына тора торғайны. Әҙәплелеккә өйрәтһә лә, эшкә өйрәтһә лә, мәҡәл һәм әйтемдәрҙе, сағыштырыуҙарҙы йыш ҡулланыуы иҫтә ныҡ ҡалған. Әсәйемдең түбәндә бәйән ителгән образлы сағыштырыуҙары, әйтемдәре үҙемдә ошо көндәргәсә оҙата килә.

- Карауатыңды Хужа Насретдиндың зыяратына оҡшатып йыйып ҡуйғанһың бит, ҡыҙым.

- Ҡулыңды көтөүсе сыбыртҡыһындай итеп һелтәмәй генә һөйлә хәбәреңде.

- Асылмаҫ ҡара томанға төшмәксеһеңме, нишләп улай ҡыландың?

- Һыбай йөрөп эҙләгәс, тапмайһың инде!

- Нишләп бай ялсыһы һымаҡ эшләп йөрөйһөң?

- Ул да һинең туғаның, ҡатнашып йәшәгеҙ, осам һаҫыҡ, тип, ҡырҡып ташлап булмай.

- Кеше хурлау менән кеше хур булмай, Аллаһ үҙе хурламаһын, юҡҡа көймә.

- Ярай инде, бала эшенең башы ҡыйыш шул!

- Бурысҡа бер тин алһаң да кире биреп өйрән, иҫәпле дуҫ - айырылмаға яҡшы.

Телгә һөйөү уятыусы тәүге уҡытыусыларым атайым менән әсәйем булһа, артабанғы остаздарым БДУ-ның филология факультетынан Ғәли Сәйетбатталов, Вәли Псәнчин, Тимерғәли Килмөхәмәтов, Роберт Байымов, Әхмәт Сөләймәнов, Мөхтәр Әхмәтов, Миҙхәт Мәмбәтов, Нәғим Ишбулатов, Марат Зәйнуллин ағайҙар булды. Уларҙың һәр береһенә оло рәхмәттәр менән иҫкә алам. Телмәр хаталарына бик уяу булды улар. Бәлки, шул ваҡыттан да ҡалғандыр был ғәҙәтем, үҙем дә ҡайһы бер хәбәрселәрҙең "һынау" һүҙе менән "һанау" һүҙен айырмағанын абайлап ҡалам. Башҡорттар һүҙҙе тамырынан "сапмай", әммә ниндәйҙер ҡағиҙәгә таянып, "Аллаһ" һүҙендә тамырҙағы һ өн-хәрефен ҡалдырып, Аллаһым урынына Аллам тиҙәр? Башҡорт телендә "мы" һорау киҫәксәһе үҙ урынында ҡулланылмаған ике ғәжәп һүҙ бар. "Һаумы" һүҙе менән һаулыҡ һорашыуыбыҙ "һаман да һау йөрөйһөңмө ни, ауырыға ваҡыт бит " тигәнде аңлата кеүек. Ә инде "иҫәнме" тигәне "һаман үлмәнеңме?" тигән һымағыраҡ яңғырай. Нилектән "Әссәләмәғәләйкүм" тип һаулыҡ һорашыу иҫкелек ҡалдығы булып иҫәпләнә һәм ошо һүҙҙәр тел белгестәре тарафынан тикшерелмәй, баһаланмай икән? "Толпар" хоккей командаһының атамаһын, урыҫ теленең баҫым үҙенсәлеген иҫәпкә алып тәржемә итмәгәнлектән, "Талпар" тип һөйләйҙәр хәҙер.

Телебеҙгә ҡарата булған проблемаларҙы бөгөнгө көндә ошондай сетерекле мәсьәләләрҙе хәл итеүҙә күрәм мин. Телебеҙҙе бөтөрәләр, тип зарланыусылар аһ-зарҙарын мәктәптә дәрестәр һанын ҡыҫҡартыуға бәйләйҙәр, бәлки. Бер класс белеме лә булмаған, әммә телен бөтә нескәлектәрендә белгән ололарҙан алған үрнәк әллә ниндәй дәреслектәрҙе лә алмаштырғыһыҙ, минеңсә. Дәрестәрҙе ҡыҫҡартһалар, тағы ла сәмләнеп, милли әҙәбиәтебеҙгә тартылыусылар артһа, халҡыбыҙ өсөн ифрат унышлы булыр ине. Талантларҙы эҙләп табыу, уларҙың артабанғы үҫешенә юл асып, дәртләндереп тороуҙы үҙ бурысы итеп һанаған инициативалы йәштәребеҙҙе күрә, һаҡлап-яҡлай белеү ҙә үҙебеҙҙең бурыс таһа. Аҡыллы йәштәребеҙ күп республикабыҙҙа, ундай һәләтлеләребеҙ барҙа халҡыбыҙҙың, телебеҙҙең киләсәге лә өмөтлө булыр, иншаллаһ. Әммә бөгөндән үк үҙенә алмаш әҙерләү - милләтенә хеҙмәт итеүҙең бер өлгөһөләр. Быны оноторға ярамай.

Һүҙ юҡ, телебеҙҙе кәмһетергә маташыусылар булманы түгел, булды. Ул ауыр замандарҙа телен һаҡлап ҡалған халыҡ беҙ түгел инекме ни? Шул халыҡ вәкилдәренең бөгөнгө көндә зарланып ултырыуы күңелгә шик һалып, шомландырып ҡуя, сөнки телебеҙ өсөн "янып йөрөүсе " бахыр ҙа үҙенең алдына батыр маҡсат ҡуйып йәшәй белә бит. Халыҡ-ара хәлдәрҙең ҡатмарлаша барған мәлендә республикабыҙҙа тәрлө низағтарға юл асыуҙы үҙмаҡсат итеп алыусылар булып ҡуймаһын, тип хәүефләнеүем минең.

Туған телдә һаҡлап ҡалыу һәр кемдең шәхсән шөғөлө. Ошоға тиклем бер генә президент та минең өйөмә килеп, башҡорт телендә һөйләшеүҙе тыйып йөрөмәне лә, бер генә етксе лә, өйөңдә үҙ телеңдә һөйләшмә, тигән фарман бирмәне. Үҙ өйөмдә мин - үҙем президент.

Рәсәйҙең ҡайһы өлөшөндә йәшәһәләр ҙә балаларым өсөн тынысмын, урыҫ мәктәбендә белем алыуҙары үҙ телен белеүгә кәртә булманы, улар үҙ телен дә, урыҫ телен дә һыу кеүек эсә. Әммә хәҙерге замандә ике тел генә белеүҙең перспективаһы сикле. Шуға күрә йәштәрҙең иғтибарын күберәк сит телдәрҙе өйрәнеүгә йүнәлтер инем. Республикабыҙға зарлы бахырҙар түгел, ә милләтебеҙ үҫешенә йогонто яһарҙай эштәрҙең байтаҡ булыуына шөкөр итеүсе ғорур батырҙар күберәк кәрәк.

Юғиһә, телебеҙҙе бөтөрөүҙә кемдәрҙелер ғәйепләйбеҙ, ә үҙебеҙ милли гәзит-журналдарыбыҙға инәлтә-инәлтә генә яҙылабыҙ. Редакция хеҙмәткәрҙәре ҡайҙан ғына бағыусылар эҙләмәй ҙә, гәзит уҡыусыларҙы нисегерәк кенә йәлеп итергә тырышмай! Китапханаларға ла юлды үҙебеҙгә үҙебеҙ яптыҡ, йәнәһе лә, компьютер заманында кемдең китап тотоп ултырғыһы килһен! Азамат Юлдашбаев әйтмешләй, арҙаҡлыларыбыҙҙың хәтер кисәләренә барырға арт һаныбыҙҙы ҡуҙғатырлыҡ көс таба алмайбыҙ, ә "быуа быуырлыҡ ғәйеплеләр" эҙләп табып, уларҙы тетеп һалабыҙ, тик үҙебеҙҙе түгел. Милли театрҙар ябылыу сигендә булыуында ла кемделер әрләйбеҙ, дошманлыҡта ғәйепләйбеҙ, тик театрҙарға йөрөмәүсе үҙебеҙҙе түгел. Ҡыҫҡаһы, бөтә хыял-теләктәрҙе үтәү үҙ көсөбөҙҙән килә, тик үҙ башыбыҙ менән уйлай һәм баһалай белергә өйрәнергә генә кәрәк. Үҙ өйөбөҙҙә үҙебеҙ хужа икәнлегебеҙҙе кире ҡаға алмаған кеүек, туған телебеҙҙе һаҡлау ҙа үҙебеҙҙән торғанлыҡты инҡар итмәҫ күңелендә башҡорт рухы булған кеше.

**Нәзиә БИКБОВА.**
**Сибай ҡалаһы.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Республиканың иҡтисади яҡтан әүҙем халыҡ һаны 1,956 миллиондан ашыу тәшкил итә. 2016 йылдың декабренән алып 2017 йылдың февраленә тиклем эшсе көстәрҙе һайланма тикшереү мәғлүмәттәре ошондай. Халыҡ-ара хеҙмәт ойошмаһы стандарттарына ярашлы, Башҡортостанда эшһеҙҙәр һаны 118,1 мең кеше тәшкил итә. Дөйөм эшһеҙлек кимәле алты процентҡа тиң. 2017 йылдың башынан төбәктә 11,7 мең кеше эшһеҙ тип танылған. Март аҙағына теркәлгән эшһеҙлек кимәле 1,21 процент тәшкил иткән.

✓Башҡорт дәүләт медицина университеты Рәсәйҙең медицина һәм фармацевтика өлкәһендәге йыллыҡ премияһына лайыҡ булды. "Белем биреү программалары уҡыу-методик ҡулланмаһының иң яҡшы тәжрибәһе өсөн" премияһының 2016 йылғы лауреаты тип БДМУ ректоры, Рәсәй Фәндәр академияһының ағза-корреспонденты, профессор Валентин Павлов етәкселегендәге авторҙар коллективы танылды.

✓Рәсүл Ғамзатов исемендәге Хасавюрт үҙәк ҡала китапханаһы "Русский мир" фонды ярҙамында "Живой Пушкин" халыҡ-ара акцияһы уҙғара. Унда Р. Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернаты уҡыусылары ла ҡатнаша. Улар интернетта үҙҙәренең конкурс проекты тураһында блог алып бара, унда үткәрелгән саралар, репортаждар, фотолар, видеосюжеттарҙы ҡарарға мөмкин. Бәйгенең бер этабында гимназистар А. Пушкин шиғырҙарын ете телдә: башҡорт, татар, төрөк, француз, немец, инглиз, испан телдәрендә һөйләне. Рус теленән шиғри тәржемәләр яһау эшмәкәрлеге Рәми Ғариповтың исеме менән тығыҙ бәйле. Ул Пушкиндың әҫәрҙәрен дә башҡорт теленә тәржемә иткән. Акция июндә "Болдино" тәбиғи музей-заповедниғында тамамланасаҡ.

✓Башҡортостанда социаль эшҡыуарлыҡ буйынса конкурс старт алды. Ул "Үҙ эшеңде башла" программаһының икенсе этабы булып тора. Конкурсҡа ҡатнашыуға ғаризалар 2017 йылдың 10 апреленән 1 майына ҡәҙәр ҡабул ителә. Жюриҙың эш йомғаҡтары буйынса социаль эшҡыуарҙар үҙ эшен асыу өсөн 200 мең һумға тиклем аҡса аласаҡ.

**"Башинформ"дан.**

КӨН ТЕМАҺЫ

# РЕСПУБЛИКА БАШЛЫҒЫ - тура бәйләнештә



**Рөстәм Хәмитов тура эфирҙа Башҡортостан халҡы һорауҙарына яуап бирҙе. Быйыл Башлыҡ менән һөйләшеү яңы форматта үтте, БСТ, "Рәсәй-Башҡортостан", "Вся Уфа", "РБК-Уфа" телеканалдары журналистары менән бер рәттән, студияға төрлө өлкәләрҙә эшләүселәр саҡырылды.**

Республика Башлығына республиканың төрлө ҡала һәм райондарында йәшәүселәрҙән 10 меңдән ашыу һорау килгәйне. Һорауҙар башлыса былтырғы темаларға ҡағылды - пенсиялар күләме, торлаҡ-коммуналь хужалыҡ, медицина хеҙмәтләндереүенең сифатһыҙ булыуы, экология, юлдар мәсьәләһе, өлөшләтә йорт төҙөлөшөндә ҡатнашыусыларҙың алданыуы, эш хаҡының түбән булыуы. Р. Хәмитов билдәләүенсә, әлеге мәлдә 2030 йылға тиклем Республика үҫеше стратегияһы өҫтөндә эш бара, был документта төп күрһәткес - эш хаҡын күтәреү. "Республиканың дөйөм Рәсәй күрһәткестәренән артта ҡалыуы - ауыл халҡының эш хаҡы түбән булыуында. Ә ауылдарҙа йәшәүселәр һаны беҙҙә - 40 процент. Шуға ла уртаса эш хаҡы күләме республика буйынса түбән килеп сыға". Республика Башлығы, тәү сиратта, ауыл хужалығында эш хаҡын күтәрергә кәрәк, тине. Әммә ауылда эш хаҡы бөгөнгө көндә улар етештергән продукцияға хактарҙың түбәнерәк булыуына бәйле. Шулай ҙа эш хаҡы үҫеше буйынса һуңғы йылдарҙа Волга буйы федераль округында республика алдынғы урында.

Республика Башлығы ҡатмарлы иҡтисади хәлдә булған төньяҡ-көнсығыш төбәкте һәм Урал аръяғын үҫтереү өсөн был иҡтисади зоналарға эшҡыуарлыҡты йәлеп итергә кәрәклеген дә һыҙыҡ өҫтөнә алды. "Беҙ бөгөн был төбәктәр өсөн инвестицион проекттар эҙләйбеҙ, шул уҡ ваҡытта булған предприятиеларҙы нығытабыҙ", - тине ул. Бәләкәй эшҡыуарлыҡ буйынса ла һорауҙар булды. Бөгөнгө көндә иҡтисадҡа уның 30 проценты йәлеп ителгән. 2016 йылда был йәһәттән үҫеш 3 процент ҡына тәшкил иткән. "Юғары һалымдар, отчет биреүҙә ҡатмарлыҡтар, административ һәм мораль баҫымдан тыш, беҙҙең төбәктә эшҡыуарлыҡ йолалары ла юҡ. Статистика күрһәтеүенсә, тағы ла 20 процент халыҡ эшҡыуарлыҡ менән шөғөлләнергә теләй. Быны улар илдең төп капиталы, шуға ла ярҙам итеү сараларын уйларға кәрәк. Тик бәләкәй эшҡыуарлыҡты ойоштороуҙың башҡа формаларына ла - кооперативтарға иғтибар итергә кәрәк". Матбуғат баҫмаларына яҙылыу хаҡтарының юғары булыуы ла борсой халыҡты. "Электрон мәғлүмәт сараларының әүҙем үҫеше баҫма матбуғатты ҡыйын хәлгә ҡуйҙы. Шуға ла урындағы гәзиттәргә дәүләт ярҙамы кәрәк, беҙ уларға ярҙам итәбеҙ ҙә. Халыҡ гәзиттәргә яҙыла алһын өсөн берәй сараһын уйлаясаҡбыҙ һәм ошо арала был турала халыҡҡа еткерәсәкбеҙ", - тине Рөстәм Зәки улы.

Өфө ҡалаһы халҡы ла төрлө һорауҙар менән мөрәжәғәт итте. "Строитель" стадионында шорт-трек өсөн махсус майҙан Башҡортостандың 100 йыллығына тәҙәләп бөтәсәк, тине Республика Башлығы. Уның икенсе сираты 2019-2020 йылдарҙа төҙөләсәк. Экология мәсьәләләре лә иғттә ҡалманы. Сүп-сар эшкәртеү, һауа бысраныуы ла борсой өфөләрҙе. Юлдарҙағы тығындарҙы булдырмау өсөн күперҙәр, үткәүелдәр төҙөү проекттары тураһында ла һүҙ булды. Ҡала пассажирҙар транспорты мәсьәләһе лә хәл ителешен көтә, тине Р. Хәмитов.

Мәҙәниәт тә республикала өҫтөнлөклө тармаҡтарҙың береһе, тине Рөстәм Зәки улы. "Беҙҙә матур саралар үтә, асыҡ һауалағы концерттар, "Байыҡ", "Башҡорт йыры" бәйгеләре, башҡа милләт йырҙары - былар барыһы ла рухи тормошобоҙ торошон күрһәтә. Кинематограф яҡшы үҫешә, концерттар өсөн махсус залдар, симфоник оркестрҙар бар. Театрҙар ҙа уңыштары менән ҡыуандыра. Спортҡа ла ярҙам итәбеҙ. Шулай ҙа мәҙәниәткә матди ярҙам әҙерәк тейә, киләсәктә был өлкәне иғтибарһыҙ ҡалдырмаясаҡбыҙ".

Республика Башлығы социаль селтәрҙәрҙә яҙылған мәғлүмәттәрҙе, шул иҫәптән, үҙенә ҡағылғандарын да уҡыуын әйтте. "Мине отставкаға китә тип тә яҙҙылар. Былар барыһы ла шаярыу. Мин эшемдә дауам итәм. Мине биш йылға һайлап ҡуйҙылар һәм был йәһәттән миңә барыһы ла асыҡ һәм аныҡ аңлашыла", - тип белдерҙе тура линия мәлендә Рөстәм Хәмитов.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

## УҠЫТЫУСЫНЫҢ ШӘБЕ - БӘЙГЕЛӘ

**Өфөләге Конгресс-холда XXVII "Йыл уҡытыусыһы-2017" республика конкурсын ябыу тантанаһы уҙҙы. Һөнәри оҫталыҡ бәйгеһендә бөтә республиканан ике йөҙгә яҡын уҡытыусы ҡатнашты.**

Конкурс йомғаҡтары буйынса "Башҡорт теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы" төбәкара бәйгеһе еңеүсеһе тип Борай ауылының 2-се гимназияһы уҡытыусыһы Ләйсән Муллағәлиева танылды. "Рус теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы-2017" исемен Стәрлетамаҡ ҡалаһының 22-се мәктәбе уҡытыусыһы Марина Тетерина алды. Иң яҡшы татар теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы - Илеш районының Базытамаҡ ауылы урта мәктәбе уҡытыусыһы Эльмира Ахунова. "Йәш уҡытыусы-2017" конкурсында Өфөнөң 158-се башҡорт гимназияһынан Мария Кәримова еңеү яуланы. Жюри ҡарары буйынса "Башҡортостандың йыл уҡытыусыһы-2017" исеменә Өфөләге 52-се мәктәптең донъя художество мәҙәниәте уҡытыусыһы Юлия Линдт лайыҡ булды. Ул шулай уҡ "Йыл уҡытыусыһы-2017" республика конкурсының абсолют еңеүсеһе тип танылды һәм Сочиҙа "Йыл уҡытыусыһы" Бөтә Рәсәй конкурсында республика намыҫын яҡлаясаҡ.

## ЙӘШ ҒАИЛӘ, ЯРҘАМ ҺИҢӘ!



**Башҡортостанда "Ғаилә-2030" стратегик башланғысы сиктәрендә "Йәш ғаилә" проекты эшләй башланы.**

Программа йәштәр һәм йәш ғаиләләр менән комплекслы эште, шул иҫәптән педагогик, юридик һәм консультация ярҙамын күҙ уңында тота.

Проектта 150 меңгә яҡын кеше ҡатнашыр тип күҙаллана. Йәштәрҙе күберәк йәлеп итеү өсөн төбәктә ведомство-ара система булдырыла. Өфөнөң Совет районында, Күмертау ҡалаһында, Учалы һәм Иглин райондарында ошо йүнәлештә эксперименталь эш башланған да инде. Киләсәктә "Йәш ғаилә" проектын бөтә республикала тормошҡа ашырыу ҡарала.

Март айында Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов йәш ғаиләләргә ярҙам итеү һәм тыуымды арттырыу маҡсатында демографик хәлде яҡшыртыу буйынса өҫтәмә саралар тураһындағы Указға ҡул ҡуйҙы.

Документҡа ярашлы, 2017 йылдың 1 ғинуарынан бала тыуғанда торлаҡ һатып алыу йәки ипотека торлаҡ кредиты буйынса төп бурыстың ҡалған өлөшөн ҡаплау өсөн 300 мең һум күләмендә бер тапҡыр бирелә торған социаль түләү билдәләнде. Йәштәрҙең икеһе лә 35 йәштән өлкән булмаҫҡа тейеш. Бынан тыш, уларҙың торлаҡҡа мохтаждар исемлегендә тороуы шарт.

## БАҠСАСЫЛАРҒА ЯРҘАМҒА



**Өфөлә ҡотҡарыусылар баҡса участкалары хужаларын Дудкин ауылына алып барыуҙы ойоштorҙо. Был ҡала хакимиәте ҡушыуы буйынса башҡарылды, тип асыҡлыҡ индерҙеләр 112-се ҡотҡарыу хеҙмәтендә.**

Эш шунда: Ҡариҙел йылғаһы буйында урынлашҡан Дудкин ауылы янындағы баҡсасылыҡ ширҡәттәренә кәмәлә йәки паромда ғына сығырға мөмкин. Шуға ярашлы кешеләргә ташҡындың үтеүен көтөргә тура килә. Быйыл яҙ ташҡындың норманан юғары булыуы көтөлә, баҡсасылар иһә участкалары һәм йорттарының торошо өсөн хәүефләнә. "Берҙәм Рәсәй"ҙең йәмғәтселекте ҡабул итеү бүлмәһендә халыҡты ҡабул иткән сакта ҡаланың баҡсасылар ассоциацияны ошо мәсьәләне күтәреп сыҡҡайны. Уны Өфө ҡала Советы рәйесе үткәрҙе. Һәҙәмтәлә уҙған ял көндәрендә 500-гә яҡын кеше баҡсаларына барып, уларҙы ташҡынға әҙерләй алды.

## ЮЛДАР, ЮЛДАР...



**Быйыл мең саҡрым самаһы төбәк, муниципаль-ара һәм урындағы юлдарҙы ремонтлау күҙаллана. Ул былтырғыға ҡарағанда 150 саҡрымға күберәк.**

Шул иҫәптән 442 саҡрым оҙонлоҡтағы төбәк, муниципаль-ара тәғәйенләнештәге һәм 468 саҡрым урындағы юл участкаларында ремонт эштәрен тамамлау билдәләнгән. Улар Башҡортостан Юл фондынан субсидиялар иҫәбенә финанслана. Бынан тыш, һәр муниципалитеттың үҙ юл фонды бар, улар иҫәбенә лә урындағы тәғәйенләнештәге автомобиль юлдарын төҙөкләндереү буйынса эштәр уҙарыла. Төҙөкләндереләсәк юлдарҙың оҙонлоғон, шул иҫәптән "кисектерелгән түләү" механизмын ҡулланып, арттырыу күҙаллана. 2016 йылда ошо яңы түләү схемаһын ҡулланып, юл хеҙмәткәрҙәренең аҡсаларын индереү иҫәбенә эштәрҙе тиҙерәк башҡарып булды. Шул схема буйынса төбәк һәм муниципаль-ара тәғәйенләнештәге 126 саҡрым мөһим автомобиль юлдары йүнәтелде.

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓"Салауат Юлаев" клубының яңы баш тренеры Эркка Вестерлунд 17 апрелдә Өфөгә килә. 60 йәшлек фин белгесе клубтың инфраструктураһы менән танышырға, шулай уҡ етәкселек менән мизгел алды әҙерлек мәсьәләләрен тикшерергә ниәтләй. Март аҙағында "Салауат Юлаев" фин тренеры менән ике йылға килешеү төҙөнө.

✓Баш ҡалала һәр кем эсәр һыуҙың сифаты тураһында мәғлүмәттәр менән таныша ала. "Өфө һыу каналы" предприятиеһының сайтында 30 марттан 5 апрелгә тиклем ошондай мәғлүмәт бирелгән, тип хәбәр итә ҡала хакимиәтенең матбуғат хеҙмәте. Таблицала эсәр һыуҙа фенол, нефть продукттары, нитраттарҙың булыубулмауы, шулай уҡ тоноҡлоғо, төҫө һәм башҡа күрһәткестәр буйынса тикшереү һөҙөмтәләре күрһәтелгән. Был Өфөләге һыу тәьминәтендә эсәр һыуҙың норматив сифатҡа тап килеүкилмәүен күҙәтергә мөмкинлек бирә.

✓Мәскәүҙә "Новая детская волна-2017" йәш башҡарыусыларҙың беренсе халыҡ-ара конкурсының милли һайлап алыу туры тамамланды. Жюри ағзалары ярымфиналға 80-дән ашыу конкурсанттан бер нисә төркөм, дуэт һәм яңғыҙ башҡарыусыларҙы һайлап алды. Улар араһында Өфөнән 12 йәшлек Марсель Сабиров та бар. Был турҙа ул Башҡортостандан берҙәнбер вәкил. Марсель 54-се булып сығыш яһаны.

✓2017 йылдың 5 апреленән 2019 йылдың 31 декабренә тиклем Өфөлә "Дуҫлыҡ монументы" туҡталышынан Ағиҙел йылғаһының Яр буйы урамына йәйәүлеләр һәм баҫҡыстан төшөү юлдары ябылды. Сәбәбе - Өфөлә Бельский урамынан алып тимер юл күперенә тиклем Ағиҙел йылғаһы ярын нығытыу буйынса эштәр алып барыу.

✓1 апрелдән 30-на ҡәҙәр Башҡортостанда ауыр йөк транспорттары өсөн ваҡытлыса сикләү индерелде. Сикләүҙәр үтә нығ дымлы осорҙа юл япмаһының техник торошон һаҡлап ҡалыу маҡсатында индерелде. "Шулай уҡ ваҡытлыса сикләү осоро 1 июндән 31-нә тиклем индереләсәк. Килеп тыуған һорауҙар буйынса рөхсәт биреү бүлегенә (347) 222-20-45, дежур хеҙмәтенә (347) 222-20-25 мөрәжәғәт итергә мөмкин", - тип хәбәр иттеләр республиканың Транспорт һәм юл хужалығы буйынса дәүләт комитетында.

✓ Ул йылға баш алған урындан, йәғни Әбйәлил районы Әхмәт ауылынан старт алып, эстафета рәүешендә Һаҡмар буйында урынлашҡан ауыл биләмәләренә тапшырыласаҡ.



ИЛ-ЙОРТ ХӘБӘРЕ

# "ТАҘА ҺАҠМАР" АКЦИЯҺЫНА ҠУШЫЛЫҒЫҘ!




**Быйыл Рәсәйҙә - "Экология йылы", ә республикабыҙҙа "Экология һәм айырым һаҡланған тәбиғәт биләмәләре йылы" иғлан ителгәс, "Атайсал" гәзитендә "Йәнтөйәкте йәмләп йәшәйек" конкурсы иғлан ителде. Унда һәр кем үҙ фекерен әйтеп, мөхитте һаҡлау йәһәтенән күрһәткән эшен сағылдыра ала.**

Баймаҡ районы Сыңғыҙ ауылында йәшәүсе Фәйзрахман Усманов Һаҡмар йылғаһы янында өмә үткәреү тәҡдиме менән сығыш яһаны. Ысынлап та, йылғабыҙ ҡурсалауға мохтаж. Ошоларҙы иҫәпкә алып, Урал арьяғы башҡорттары ҡоролтайы, "Атайсал" гәзите "Таҙа Һаҡмар" акцияһы иғлан итә. Йылғабыҙҙы таҙалау, һаҡлау идеяһы Сибай институтында уҙғарылған фәнни-ғәмәли конференцияла ла яҡлау тапты. Акцияны май айында башлау ҡаралған. Ул йылға баш алған урындан, йәғни Әбйәлил районы Әхмәт ауылынан старт алып, эстафета рәүешендә Һаҡмар буйында урынлашҡан ауыл биләмәләренә тапшырыласаҡ. Өмә барышын һәр биләмә махсус булдырылған альбом битендә яҡтыртып, башҡарылған эште ҡыҫҡаса (күпме кеше өмәгә сыҡҡан, күпме йөк ҡый түгелгән, өмәгә сығыусыларҙың иң олоһо, иң кесеһенә нисә йәш, дата һ.б.) теркәп барырға бурыслы.

Билдәле булыуынса, Һаҡмар - Көньяҡ Уралдағы йылға. Башланған урыны Әбйәлил районында, Уралтау һыртының көнсығыш битләүендә. Башҡортостандың Әбйәлил, Баймаҡ, Йылайыр, Хәйбулла райондары һәм Ырымбур ҡалаһы урынлашҡан ерҙә Яйыҡҡа ҡушыла. Оҙонлоғо 760 км, шунаң 348-е Башҡортостанға тура килә. Күренеүенсә, Һаҡмар бик оҙон, бормалы юл үтә. Шуға күрә лә уның юлында көлһыу, һоро-ҡара, һоро тупраҡлы урындар ҙа, болон-урманлы ерҙәр ҙә, сал ҡылғанлы далалар ҙа осрай. Һаҡмар ярҙарында бөҙрә талдар, зифа ҡайындар, мәғрур ҡарағайҙар үҫә. Сылтырап аҡҡан шишмәләр, тиҫтәләгән йылғалар Һаҡмарға ҡоя. Бөтә башҡорт йылғалары араһында ул үҙенсәлекле тәбиғәте, "холҡо" менән айырылып тора. Йә оло ғәйрәт менән текә ҡаяларға бәрелеп, ап-аҡ кубеккә күмелә, йә дала кинлектәренә сығып, көҙгөләй ялтырап тын ята, йә ҡылымыҡтарға буленеп, утрауҙар араһында бөтөнләй юғала.

Ләкин, үкенескә күрә, был матурлыҡ һәм ундағы тереклек йылдан-йыл юҡҡа сыға бара. Уны һаҡлап ҡалыу - беҙҙең бурыс. Урал арьяғы башҡорттары ҡоролтайы һәм "Атайсал" гәзите Һаҡмар йылғаһы янында урынлашҡан барлыҡ ауылдар халҡын "Таҙа Һаҡмар" акцияһына ҡушылырға саҡыра.

**"Атайсал" гәзите редакцияһы, Сибай ҡалаһы.**

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

## ИНТЕРНЕТТАН ЙЫРАҠ ТОР!

**"Берҙәм Рәсәй"ҙән Дәүләт Думаһы депутаты Виталий Милонов парламенттың түбәнге палатаһына "Социаль селтәрҙәрҙең эшмәкәрлеген хоҡуҡи көйләү тураһындағы"ғы закон проектын индерҙе.**

Закон проекты ҡулланыусыларҙың ҡәтғи рәүештә инеү һәм теркәлеү тәртибен күҙ уңында тота, ул тик үҙендең ысын исемең аҫтында ғына сәхифә асыуҙы талап итә. Теркәлгән саҡта үҙеңдең паспорт мәғлүмәттәренде яҙырға кәрәк буласаҡ. 14 йәшкәсә балаларға социаль селтәрҙәргә инеүҙе бөтөнләй тыясаҡтар. Закон проектының тағы бер башланғысы - бюджет өлкәһе хеҙмәткәрҙәре өсөн эш ваҡытында социаль селтәрҙәр менән ҡулланыуҙы тулыһынса тыйыу. Ошо хаҡта төҙәтмәне Хеҙмәт кодексына индерергә теләйҙәр. Бығаса Бөтә Рәсәй йәмәғәт фекерен өйрәнеү үҙәге ошо темаға һорау алыуҙы баҫып сығарҙы. Рәсәйҙәрҙең 62 проценты 14 йәшкәсә үсмерҙәр өсөн социаль селтәрҙәр менән ҡулланыуҙы тыйыу башланғысын хупланы. Шул уҡ ваҡытта респонденттарҙың 52 проценты социаль селтәрҙәрҙә паспорт буйынса теркәлеүгә ҡаршы сыҡты.

## БАЛЫҠТАРҘЫ ХӘСТӘРЛӘП...

**Балыҡтар ыуылдырыҡ сәскән осорҙа, йәғни 15 апрелдән 15 июнгә тиклем, Башҡортостанда сәнәғәт балыҡсылығына сикләү индерелә.**

1 майҙан 10 июнгә тиклем һәүәҫкәр һәм спорт балыҡсылығы сикләнә. Һәүәҫкәр балыҡсыларға ярҙан тороп бер ҡалҡыуыслы йәки батырғыслы ҡармаҡ һалырға ғына рөхсәт ителә. Шул уҡ ваҡытта ҡармаҡҡа икеүҙән артыҡ ырғаҡ тағыу тыйыла. Бынан тыш, спиннингтарҙы ла файҙаланырға ярамай. Балыҡ тотоу ҡағиҙәләрен боҙған өсөн административ һәм енәйәти яза ҡаралған, тип иҫкә төшөрҙәләр төбәктең тәбиғәтте һаҡлау ведомствоһында. Йылым менән балыҡ тотҡан өсөн закон боҙоусыға ике меңдән биш мең һумға тиклем штраф һалына. Ыуылдырыҡлы балыҡты тотҡан өсөн зыяндың ҡаплау күләме икеләтә арта. Һыу-биологик ресурстарына ҙур зыян килтергән осраҡта материалдар ғәйепләләрҙе енәйәт яуаплылығына тарттырыу өсөн тәфтиш органдарына тапшырыла. "Балыҡтар ыуылдырыҡ сәскән осорҙа уңайлы шарттар булдырыу һәм һыу ятҡылыҡтарында балыҡ запасын тулыландырыу өсөн бындай сикләү йыл һайын индерелә, - тип асыҡлыҡ индерҙе Башҡортостан Тәбиғәттән файҙаланыу һәм экология министрлығының йәнлектәр донъяһын һаҡлау бүлеге белгесе Рәлим Хажиев. - Был ваҡытта шулай уҡ йылға-күлдәрҙә, һыуһаҡлағыстарҙа моторлы кәмәлә йөрөү тыйыла". Республиканың һыу ятҡылыҡтарында браконьерлыҡ осраҡтары тураһында (347) 246-07-08 телефоны буйынса хәбәр итеү һорала.

БАЛАЛАР ДОНЪЯҺЫ

# ЙӘШ БЫУЫНДЫ...

## йолаларыбыҙ аша тәрбиәләйек



Йәйге йәмле иртә. Ҡояштың сағыу нурҙары ерҙе, ундағы барлыҡ йән эйәләрен ихлас сәләмләй. Умартаһарҙа эш ҡайнай. Уңған бал ҡорттары, билдәрен биштән быуып, күс айырырға әҙерләнә. Айырылаһы күс күптән инде үҙаллы йәшәргә әҙер. Шуға күрә айыра ла инде уларҙы бал ҡорттары. Умартасыға ла тынғылыҡ юҡ был көндәрҙә. Ул да ҡорттары ситкә китмәһен, тип, ал-ял белмәй. Был умартасы ла күптән әҙерләнеп көтөп йөрөй был көндө. Хатта ейәне лә ҡартатаһына ярҙам итергә йыйынып йөрөй. Ай-һай, бик шәп малай күренә. Әле ул йәштә умарта тирәһенә бик яҡынлап бармай бит ул балалар. Ояһында ни күрһә, осҡанында шуны күрер, тигәндәй, олатаһының уң ҡулы булырға оҡшай был бала. Бына уларҙың күсе айырылып, күршеләренең алмағасына ҡуна. Ул арала бер бал ҡорто күршенең сәбәләнеп йөрөгән малайына ҡаяуын ҡаҙап та өлгөрә. Йола буйынса, умартасы олатай был малайға бер һауыт бал, ә уның әсәһенә күсте ҡайтарғаны өсөн яулыҡ бирә. Айырылған күсте әҙерләнгән яңы умартаға урынлаштыралар...

Был ваҡиға ҡайҙа бара тип уйлайһығыҙ? Баймаҡ ҡалаһының "Айыуҡай" башҡорт балалар баҡсаһында. Ундағы "Кәрәҙ" төркөмөндә "Күс айырыу" тигән ошо матур йола сәхнәләштерелде. Байрам артабан шулайырак дауам итте: яңы умартаға ҡускән "бал ҡорттары" ҡыуанышып йырланылар, бейенеләр, шиғыр һөйләнеләр, балдың төрҙәре менән таныштылар, өләсәй менән халыҡ уйындары уйнанылар. Балалар һәм уларҙың ата-әсәләре был тамашаны тормоштағыса ҡабул итеп, мауығып китеп ҡараны. Йоланың маҡсаты - кескәйҙәргә мөғжизәле башҡорт балының шифаһы тураһында мәғлүмәт еткереү һәм уларҙы бал ҡортондай егәрле, тырыш итеп тәрбиәләү ине. Маҡсатҡа өлгәшелде һымаҡ, сөнки тап ошо байрам оҙаҡ ҡына балалар һәм ата-әсәләр теленән төшмәне.

Ҡөрьән-Кәримдә "Бал ҡорто" сүрәһе бар. Унда Аллаһы Тәғәлә кешеләргә шул хаҡта әйтергә теләй: Мин был донъяға бал ҡорттарын яралттым. Улар кешеләргә шифалы ризыҡ булһын тип, ағастарға, таш ярыҡтарына ҡунып бал йыйһындар. Кешеләр ҙә ошо бал ҡорттары кеүек тырыш, егәрле булһалар, матур донъя көтөрҙәр, балалар үҫтереп, уларҙы лайыҡлы кеше итеп, тормош юлына аяҡ баҫтырырҙар, күс кеүек айырырҙар... Балалар баҡсаһында, мәктәптәрҙә, башҡа уҡыу йорттарында балаларыбыҙға халҡыбыҙ йолалары аша бына ошондай йәшәйеш ҡағиҙәләре, иман төшөнсәләре, хеҙмәт һабаҡтары еткерелһә, йәмғиәтебеҙ йәшәреп, һауыҡып ҡалыр ине, тип кенә әйтке килгәйне был яҙмаларымда...

**Әминә БУРАНБАЕВА, Баймаҡ ҡалаһы "Айыуҡай" балалар баҡсаһы тәрбиәсеһе.**

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, анығ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Атерома

❖ Атерома - тиреләге май биҙҙәренең май сығарыу юлы тығылыуынан барлыҡҡа килгән зарарһыҙ шеш. Ул сәс үҫкән тән өлөштәрендә осрай. Дегәнәк тамырын ит турағыстан үткәреп, шул уҡ күләмдәге сусҡа майы ҡушып, өс көн тәнәтергә, марля аша һығырға, көн һайын компресс яһарға.

### Тамаҡ шешеүенән

❖ Йәш кесерткәнде эҫе һыу менән бешекләп, бер ус самаһы күләмендә ваҡлап, йәшел һуған, бешкән йомортҡа, ҡаймаҡ йәки үҫемлек майы өҫтәп, йоҡлар алдынан ашарға. Дауаланыу курсы - ике аҙна.

### Күҙ ҡабағындағы арпа

❖ 10 грамм еҙ төймә үләне сәскәләренә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, ҡайнау хәленә еткерергә, 10 минут талғын утта ҡайнатырға, һөҙөргә. Көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан ярты сәғәт алда 50-шәр мл эсергә.

### Баш әйләнеүе

❖ Баш әйләнеүенән ҡотолоу өсөн 100 грамм кипкән диңгеҙ кәбеҫтәһен порошок хәленә еткәнсе ыуаларға, төшкө аш алдынан 1-әр балғалаҡ ашарға.

❖ 1 балғалаҡ туғай клеверы сәскәләренә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, 45 минут төнәтергә, һөҙөргә. Көнөнә 3-4 тапҡыр ашарҙан ярты сәғәт алда 1-әр ҡалаҡ эсергә. Дауаланыу курсы - 21 көн. 1 аҙна ял иткәс, дауаланыу курсын тағы ҡабатларға. Бөтәһе 3 курс дауаланырға.

❖ 1 ҡалаҡ кесерткәнгә 150 мл ҡайнар һыу ҡойорға, 4 сәғәт төнәтергә, һөҙөргә, ошондай уҡ күләмдә яңы һығылған алма һуты өҫтәргә. Көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан 15 минут алда 50-шәр мл эсергә. Дауаланыу курсы - 2 аҙна.

### Бешеү

❖ Бешкән тиреле ҡалған эҙҙе түбәндәгеcә дауалайҙар. 3 кишер һабағына кистән 1 литр ҡайнар һыу ҡойорға, иртән һөҙөргә һәм көнөнә 3 тапҡыр яртышар стакан эсергә. Дауаланыу курсы - 10 көн. Бынан тыш, йәрәхәтләнгән урындарға ошо уҡ төнәтмә менән компресс эшләргә.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

✓ Нимәһе ҡыҙыҡ - таштар ҙурлығы менән бер иш түгел, диаметры буйынса 10 сантиметрҙан 50 сантиметрға тиклем етә. Аҡ һәм ҡара төҫтәге таштарҙың ҡайһылары шыма ғына, ҡытыршы булғандары ла осрай.



ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# МӨХӘММӘТ БӘЙҒӘМБӘР

## Боронғо ғәрәптәр тураһында ҡыҫҡаса белешмә

Ғәрәптәрҙең тағы бер изге бурысы тураһында әйтеп үтергә кәрәк. Ул - ҡарымта бурысы. Йәберләнгән йәки һәләк булған һәр кешенең ҡоно ҡайтарыла барған өсөн, ул замандағы кешеләр үҙҙәрен хәүефһеҙ тойған. Шуға ла сауҙагәрҙәрҙең каруандарына һөжүм иткән саҡта ла ҡан ҡоймаҫҡа тырышҡандар. Йылғыр һәм етеҙ рәүештә һөжүм итеү - ысын егетлек һаналған.

Ырыуҙағы һәр ир яугир булған. Көтөүлектәр һәм ҡоҙоҡтар, көтөү, ҡатындар һәм балалар именлеге фәҡәт ҡорал ярҙамында ғына тәьмин ителгән.

Ырыуҙың тулы хоҡуҡлы ағзаһы һәр ваҡыт ирекле һаналған, бер кем дә, хатта шәйех йәки үҙ ырыуының башлығы ла уға бойора алмаған. Ул бер кемгә лә яһаҡ түләмәгән, һалым түләү тигән төшөнсә үҙе генә лә уға сәйер һәм рәнйетеү кеүек тойолор ине, сөнки һалымды фәҡәт еңелгәндәр генә үҙ ғүмерен ҡотҡарыу йә ҡурҡаҡлығы өсөн түләй. Ә тулы хоҡуҡлы ағза ирекле һәм, ҡулына ҡорал алып, үҙ азатлығын ҡурсаларға әҙер. Шулай булғас, ул ҡыйыулыҡта береһе алдында ла һынатмай һәм дан алған ниндәй булһа ла батыр менән алышҡа сығырға ла әҙер. Ул ҡайһы Аллаға булһа ла табына ала, сөнки ул азат. Ул үҙ яҙмышын хәл итеүҙә теләгән юлын һайлай ала, хатта яуға бармай ҡалыуы ла ихтимал. Шул уҡ ваҡытта ул үҙ ырыуының ҡанундарына буйһона. Әгәр ырыуы уны ҡыуа икән, ул ырыу ҡанундарынан ситтә ҡалған кешегә - халиға әйләнә. Ә халиҙы таларға ла, йәрәхәтләргә лә, ҡоллоҡҡа һатырға ла, үлтерергә лә мөмкин. Ул бер кемдеке лә түгел.

Быуаттар һәм меңъйыллыҡтар барышында ошондай әхлаҡ кодексы бар ителгән: камил ғәрәп кешеһе изге күңелле, яуҙа ҡыйыу, ҡарымта башҡарыуҙа ихтыярлы, һүҙенә тоғро, ҡунаҡсыл, йомарт, кеселекле, ололарҙы ололай белгән кеше булырға тейеш. Ул яҙмыш һынауын хафаланмай тыныс үткәрергә, үҙенең һәм ырыуының намыҫын һаҡларға, көслөләр алдында ҡуштанланмаҫҡа, көсһөҙҙәрҙе ҡурсаларға, ырыуы хаҡына ниндәй булһа ла алышҡа, ҡорбанға әҙер булырға тейеш. Ырыуҙаштарынан ихтирам ҡаҙанырға теләгән һәр ғәрәп ире ошондай идеалға ынтылырға тейеш булған һәм балаларға ла ошондай егет булыу маҡсаты һеңдерелгән.

Ғәрәптәрҙә мөлкәт кенә түгел, ә яҡшылыҡ та, хурлыҡ та нәҫелдән-нәҫелгә ҡала, тип һаналған. Шуның өсөн дә ғәрәптәр үҙ шәжәрәһенә генә түгел, ә никахлашырға тейеш булған кешеһенең нәҫел шәжәрәһенә лә бик етди ҡараған, алты-һигеҙ ырыуының исемдәрен белгән.

Ҡатындар буйһоноу хәлендә булған. Кейәүгә сыҡҡанға тиклем уның яҙмышы атаһы ҡарамағында булһа, аҙаҡ ире буйһоноуында ҡалған. Ире үлеп киткән осраҡта уның яҙмышы иренең иң яҡын туғандары ҡарамағына күскән. Ир кеше, ҡатын яғынан бер сәбәп булмаһа ла, уны айыра алған.

**(Дауамы бар).**

ТӘБИҒӘТ МӨҒЖИЗӘЛӘРЕ

# ЕР-ҺЫУ ҠӘҘЕРЕН БЕЛЕП ЙӘШӘҮҘӘЛЕР...

**Белеүебеҙсә, быйыл Рәсәй Федерацияһында - Экология, Башҡортостан Республикаһы буйынса - Экология һәм айырым һаҡлауға алынған тәбиғәт биләмәләре йылы тип нарыҡланды. Ошоға бағышлап, ауыл китапханаларының имиджын күтәреү маҡсатында Хәйбулла районында "Эко - мин! Эко - һин! Эко - донъя!" әҙәби-экологик конкурсы иғлан ителде.**

Һәр кемдең күңеленә иң яҡыны, иң ҡәҙерлеһе - уның тыуып-үҫкән ере. Һәр кем Тыуған иленә булған һөйөүен үҙенсә күрһәтә. Берәүҙәр быны үҙенең эше менән иҫбатлай. Икенселәр илен данлап йырҙар сығара. "Мөғжизәле тыуған яғым" тип атаныҡ байрам сараһын һәм тыуған ауылыбыҙҙағы мөғжизәле урындар менән хөрмәтле ҡунаҡтарыбыҙҙы таныштырып үттек.

Юлбарыҫ ауылынан биш саҡрым алыҫлыҡтағы меңйәшәр ҡарағас - ауылыбыҙҙың йөҙөк ҡашы. Ә кем ултыртҡан ул ҡарағасты? Был һорау буйынса бер нисә фаразлау бар. Беренсенән, был ҡарағасты немец әсирҙәре ултыртҡан, тип әйтәләр. Баҡтиһәң, беҙҙең республикала ҡарағастар бик күп ултыртылған. Мәҫәлән, Хәйбулла, Йылайыр һәм Баймаҡ райондарында бер үк йылғы ҡарағастар үҫә. Уларҙы ниндәй маҡсат менән ултыртҡандар һуң? Бәлки, шул ҡарағастарҙы ултыртып, немец әсирҙәре карта яһағандыр? Ә быныһы икенсе фаразлау: 1769 йылда Екатерина II указы буйынса немец ғалимы Петр Симон Паллас экспедиция менән Башҡортостанға ебәрелә. Уның төп маҡсаты - Башҡортостанды тасуирлау, файҙалы ҡаҙылмаларын, тәбиғәтен өйрәнеү. Экспедиция ваҡытында ер аҫтындағы файҙалы ҡаҙылмаларҙың ятҡылыҡтарын ҡоролоҡҡа бирешмәгән, күп йыл йәшәгән бер ағас менән билдәләгәндәр. Ағасты тәрбиәләп үҫтереү өсөн Паллас кеше яллаған. Өсөнсө фаразлау ҙа бар - элек юлсыларға ылыҫлы ағастар маяҡ булып торған. Шул ағастарға ҡарап юл тотҡандар. Ләкин был фаразлауҙар сиселеп бөтөлмәгән сер булып ҡала.

Нисек кенә булмаһын, меңйәшәр ҡарағасҡа кеше күп килә, уның янында туҡталып, теләк теләйҙәр. Ауырыуҙарға - дауаһын, аҙашҡандарға юл күрһәтеүсе маяҡ, шанлы һәм данлы тарихыбыҙҙың тере хәтере, рухи көс биреүсе илаһи бер мөғжизәгә тиң меңйәшәр ҡарағас янында барыһы ла нисектер таҙарынып, яман уйҙарҙан арынып, үҙҙәренә көс һәм рух алғандай тойола...

Беҙҙең уйыбыҙса, уникаль тип иҫәпләнеүсе тағы ла бер тәбиғәт объекты бар Юлбарыҫ ауылында. Ни өсөн уникаль? Сөнки бындай түңәрәк таштарҙың ҡайҙан килеп сығышын әлегә бер кем дә аңлата алмай. Берәүҙәр, динозаврҙың йомортҡаһы, тиһә, икенселәр боронғо диңгеҙ үҫемлектәренең емеше тип уйлай, НЛО - билдәһеҙ осоусы объекттар ҡалдығы, тип фаразлаусылар ҙа бар. Бындай түңәрәк таштар тағы ла Ҡытайҙа, Израилдә, Үҙәк Америкала, АҠШ-та, Яңы Зеландия, Румыния, Ҡаҙағстан, Бразилия илдәрендә табылған. Нимәһе ҡыҙыҡ - таштар ҙурлығы менән бер иш түгел, диаметры буйынса 10 сантиметрҙан 50 сантиметрға тиклем етә. Аҡ һәм ҡара төҫтәге таштарҙың ҡайһылары шыма ғына, ҡытыршы булғандары ла осрай. Бына шундай тәбиғәт мөғжизәһе менән таныштырҙыҡ ҡунаҡтарыбыҙҙы. Йәшел урмандар шауы, шишмәләрҙең сылтырап ағышы, йылға-күлдәренең сихри сафлығы күңелдәргә йән тыныслығы бирә. Улар беҙҙе туйындыра, йәшәү өсөн дәрт-дарман, көс-ҡеүәт өҫтәй, сафландыра, илһамландыра. Ер-әсәбеҙгә аҙ ғына һаҡһыҙ ҡағылһаң, емерелергә, ыуалырға ғына тора. Шуға ла ул ярҙамға мохтаж. Абдулхаҡ Игебаевтың "Ергә мәңгелеккә килмәгәнбеҙ" шиғыры барыбыҙ өсөн дә оран булып яңғыраһын ине...

*Ергә мәңгелеккә килмәгәнбеҙ,*
*Күркен беләйек беҙ тормоштоң!*
*Һалҡын ҡырауҙарҙан һулытмайыҡ*
*Аҫыл сәскәләрен ырыҫтың!*

*Ергә мәңгелеккә килмәгәнбеҙ,*
*Ҡәҙерен беләйек беҙ ер-һыуҙың!*
*Ер-һыу ҡәҙерен белеп йәшәүҙәлер*
*Бар мәғәнәһе Кеше булыуҙың!*

**Гөлсинә МӘҒӘФҮРОВА.**



*Ҡара морон ҡаяһы.*



*Ҡара төҫтәге таштар.*



*Ҡайһы бер таштарҙың диаметры 1,5 метрға тиклем етә.*



*Меңйәшәр ҡарағас - ауылыбыҙҙың йөҙөк ҡашы.*

✓ *Тағы, ябай, ауыл һунарсыларының һунарсылыҡты спорт итеп ҡараған кешеләрҙән айырмалы бер яҡтары бар. Улар тәбиғәтте ярата белә. Шөғөлдәрен ҡырыуға, ҡоротоуға нигеҙләмәй, ә үҙҙәрендәге ҡомарҙы баҫыуға ғына арнай улар.*



ЙӘШӘЙЕШ ФӘЛСӘФӘҺЕ

**Һунарсылыҡ һәм балыҡсылыҡ башҡорттарҙың иң боронғо кәсептәре булып иҫәпләнгәнен беләбеҙ. Был кәсептәрҙең баш алыуы, әлбиттә, халҡыбыҙҙың боронғо көнитмешенә, тәүтормош-йәмғиәт ҡоролошо замандарына барып тоташа. Ә инде башҡорттарҙың кейем-һалымының башлыса тиреләрҙән, болғар ханлығына, аҙағыраҡ татар-монгол урҙаһына, йәнә килеп Мәскәү батшалығына яһаҡты ҡиммәтле йәнлек тиреләре менән түләүен иҫкә алһаҡ, халҡыбыҙҙың һунарсылыҡ кәсебе ни тиклем үҫешкән булыуын күҙ алдына килтереп була.**

# ҺУНАРСЫЛЫҠ - ТӨП КӘСЕБЕБЕҘ



Тире өсөн башҡорттар ҡондоҙ, ҡама, һыуһар, төлкө, кеш, аҫ, шәшке, йәтсә, тейен, һеләүһен, бүре, айыу, ҡуян кеүек йәнлектәргә һунар иткән. Уларҙың бәләкәйерәктәрен (ҡуян, төлкө, шәшке, кеш һ.б.) башлыса тоҙаҡ, ҡапҡан менән тотҡандар, айыу, бүре кеүек оло йәштәгеләрен махсус соҡорҙар ҡаҙып, тәпкеләр ҡороп аулағандар. Вағыраҡ йәнлектәрҙе махсус өйрәтелгән йыртҡыс ҡоштар (бөркөт, ҡарсыға) менән алғандар. Ит өсөн ҡыр кәзәһенә, ҡоралайға, мышыға һунар иткәндәр. Ҡыр ҡаҙы, ҡыр өйрәге, һуйыр, ҡор, ағуна, сел кеүек ҡыр ҡоштары ла табын йәме булған.

Теге йәки был йәнлекте аулау ысулдары ла төрлөсә булған. Мәҫәлән, башҡорттарҙың япма (әүен) ауы тураһында И. Казанцев XIX быуатта бына нимә тип яҙып ҡалдырған: "Иногда устраивают в лесу большую корзину с закрышкой на вертеле, на которую кладут прикорм. Прельщенная этою приманкою птица лишь только спустится, тотчас проваливается в корзину".

Һунарсылыҡ беҙҙә бөгөн дә бар, тик ул инде туҡланыу һәм тереклек итеү сараһы түгел, ә - ҡомар. Ысынында, ниндәй ул һунарсы ҡомары? Мин был хаҡта бер бәләкәй генә ҡыҙыҡ күренештән сығып уйландым. Атайым һунарсы булды, тик улдары уның был оҫталығын дауам иттерерҙәй түгел һымаҡ ине. Бер ағайым бишенсе тиҫтәһен ваҡлай башлағас, һунарға әүрәне лә китте. Һунар менән балыҡ уның "ауырыуына" әйләнде. Был уның малайҙарына ла "йоҡто". Ике бәләкәй малай, ат артынан йәйәү йүгерерҙәренә лә, көрт йырып саҡрымдар урарға тура килеренә лә, төн йоҡоһон ҡалдырып, һыу кисеп йөрөрҙәренә лә ҡарамай, "Мин дә барам!" ти ҙә торалар. Ул көндө лә иртәнсәктән буранлай бирел торғанды күргән ағайым улдарына: "Һунарға сығабыҙ",- тип әйтеп һалды. Ҡапыл буран баҫылғайны, кәйефе төштө: "Ай, Алла, йөрәк уйнағайны бит әле. Эх, ярһып алынғайны..."- тип ыуаланып ишекле-түрле йөрөй үҙе. Ә малайҙары саңғыларын, муҡсаларын әҙерләп, инде урамға сығып баҫҡан, эттәрен дә ымһындырып өлгөргән. Улары урманға ҡарап саңҡылдай, малайҙарҙы тарҡылай, төрткөләп йыға... "Бындай хәлдә мин хәҙер башҡа бер эшкә лә тотона алмайым, миңә ҡырҙа йөрөп килер кәрәк", - тип өҙгөләнә ағайым үҙе лә. Ярай, бәхеткә күрәме инде, буран тағы көсәйҙе һәм һунарсылар тиҙ генә йыйынып сығып китте... Шунда ысынлап та ир-егеттә һунарсы ҡомары була икәнен күреп ышандым.

Һунарсылыҡты боронғо халыҡта аҙыҡ табыу сараһы ғына булған, тип әйтеү ҙә хаталы ул. Эйе, аҙыҡ табыу сараһы ла. Тик ул ғына түгел. Һунар итеү ир-егеттең тәбиғи асылындағы иң боронғо хәтер. Был хәтер шулай бик һирәктәрҙә генә йәшәүҙе дауам итә. Һунарсылыҡ тәбиғәте - ул эҙләү, эҙәрлекләү, күҙәтеү, өйрәнеү, һағалау, аңдыу, ҡыуыу, тотоу. Быларҙан тыш, арымау, ялҡмау, һаҡ була белеү, ишетеү, күреү, тойоу, һиҙеү, аңлау сифаттары ла. Тағы ла һунарсы асылына тәбиғәтте белеү, эҙҙәрҙе аңлау, ер-һыуҙы таныу, һауа торошон күҙәтеү, һынамыштарҙы һынау, миҙгелдәргә бәйле үҙенсәлектәрҙе төшөнөү, йондоҙҙар һәм башҡа күренештәргә ҡарап хәрәкәт итеүгә һәләтле булыу, йәнлек-ҡошҡорттоң холоҡ-фиғелен белеү хас. Унан ҡалһа, ҡыйыулыҡ, саялыҡ, еңмешлек, сабырлыҡ та төп сифаттар.

Һунарсылыҡ, балыҡсылыҡ ир-егетте агрессив халәттән ҡотҡара икән. Психологтар шулай тип яҙа. Эшендә йәки өйөндә ниндәйҙер көсөргәнеш кисергән ваҡытта һунарға сығып килеү йәки һыу буйында балыҡ ҡармаҡлап йөрөп килеү көслө заттың мейеһендәге негатив уйҙарҙы икенсе юҫыҡҡа алып китә.

Тағы: ябай ауыл һунарсыларының һунарсылыҡты спорт итеп ҡараған кешеләрҙән айырмалы бер яҡтары бар. Улар тәбиғәтте ярата белә. Шөғөлдәрен ҡырыуға, ҡоротоуға нигеҙләмәй, ә үҙҙәрендәге ҡомарҙы баҫыуға ғына арнай улар. Уйлап ҡараһаң, халҡыбыҙҙағы борондан килгән бар йола, кәсеп, ҡағиҙә ниндәйҙер бер фәлсәфәгә ҡоролған, бер нәмә лә буш урында юҡтан бар булмаған.

**Лилиә ИСМӘҒИЛЕВА.**

ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ

# ӘЛМИСАҠТАН...



➔ 1762 йыл - Сенат тарафынан Ырымбур губернияһының картаһы төҙөлә һәм раҫлана.

➔ 1763 йыл - Юлай Аҙналин Ете йыллыҡ һуғыштан миҙал менән наградланып ҡайта. Ошо уҡ һуғышта Емельян Пугачев та ҡатнаша.

Ете йыллыҡ һуғышта 12 башҡорт полкы ҡатнаша. Башҡорт ғәскәре менән билдәле башҡорт эшмәкәре Ҡолой Балтасов етәкселек итә.

➔ 1763 йыл - Азия сауҙагәрҙәре ситтән килтерелгән тауарҙар һәм аҫыл таштар менән Ырымбурҙа сауҙа итергә рөхсәт ала.

➔ 1761-1849 йылдар - Шағир Мәнди Ҡотош Ҡыпсаҡи йәшәгән йылдар.

➔ 1764-1768 йылдар - Ырымбурҙа кенәз Авраам Артамонович Путятин губернаторлыҡ иткән .

➔ 1765 йылдың 19 сентябре - Башҡорт ерҙәренең сиктәрен билдәләп сығыу (межалау) хаҡында Указ баҫыла. Был эш 1832 йылда тамамлана.

➔ 1766 йылдың 7 июле - "Ырымбур һәм Троицкий таможнялары булдырыу тураһында"Сенат Указы сыға.

➔ 1766 йылдың 12 декабре - Ырымбурҙа билдәле тарихсы, "Рус дәүләте тарихы"ның авторы Н.М. Карамзин донъяға килә.

➔ 1766 йыл - Стәрлетамаҡ пристане төҙөлә. Башҡорттар бында аттарҙа Соль-Илецкиҙан тоҙ ташый. 1781 йылда Стәрлетамаҡ ҡала статусы ала.

➔ 1767 йыл - Закондар ҡабул итеү депутаттары Баҙарғол Юнаев менән Туҡтамыш Ишбулатов башҡорттарҙың наказдарын төҙөп, Петербургҡа ебәрә. Улар башҡорт йәмғиәте мәнфәғәттәрен яҡлап, бер нисә тапҡыр комиссия йыйылыштарында сығыш яһай.

➔ 1767 йыл - И. Твердышев менән И. Мясниковтың Белорет домна заводы төҙөлә.

➔ 1768-1838 йылдар - Яҙыусы һәм ғалим Тажетдин ибн Ялсығол ибн Мәмәтҡол әл Башҡорти йәшәгән.

**Дәүләт МӘҺӘҘИЕВ төҙөгән.**
**(Дауамы бар).**

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



*Йәдкәр БӘШИРОВ*

# БӨЙӨК БАШҠОРТ ИЛЕ

## IV бүлек

Башҡорттар ул заманда яҡын һәм алыҫ күршеләре араһында оҫта мәғдәнселәр, ҡорал яһаусылар булараҡ дан алған, уларҙың тауары донъя баҙарында ҙур ихтыяж менән файҙаланған. Әл Иҙриси төҙөгән картала сауҙа-иҡтисады ныҡ үҫешкән "тышҡы" башҡорттар "Ҡумания" тип күрһәтелгән. И.Г. Коноваловаға ярашлы, Иҙриси картаһында Табуни тигән ҡалаһы булған Бәшәнәк иле Вятка йылғаһы буйында көн иткән. Уларҙы вятчандар тип йөрөткәндәр. Көнбайыш Европа сығанаҡтарында Ҡумания - половецтар (һары ҡыпсаҡтар) иле тип билдәләнгән.




Рыбаков үҙенең "Иҙрисиҙең 1154 йылғы картаһында урыҫ ерҙәре" тигән хеҙмәтендә Рустың, Ҡуманияның һәм Болғарҙың төньяҡ өлкәләренә иғтибар бүлгән. Ҡумания Бөйөк Башҡорт иле составына ингән. Ҡайһы бер авторҙар 1260-1400 йылдарҙа "Балыҡ" кенәзлеге барлыҡҡа килгән тип иҫәпләй. Унда Румынияла һәм Сербияла йәшәүсе ҡундар тип аталған венгр ҡәбиләләре хаҡында һүҙ бара.

Ҡыпсаҡ дәүләтенең тышҡы тарихы көнбайыш һәм көньяҡ күршеләр менән тәхет өсөн туҡтауһыҙ һуғыштар менән бәйле булған, был тарихтың бер өлөшө Рәсәй тарихы менән бәйле. Дәүләттең мәҙәни баш ҡалаһы булып борондан Византия һәм көньяҡ Европа менән бәйләнештә йәшәгән, сәскә атыусы, бихисап ҡалаларҙы хасил итеүсе Ҡырым ҡалаһы торған.

Бәшәнәктәр Византия империяһына ҙур хәүеф менән янаған. Император Алексей ғәскәре уларҙан бер тапҡыр еңелә. Икенсе тапҡыр бәрелешкәндә ул икенсе төрки телле ҡомандарҙың (половецтарҙың, венгрса - куноктар) йоғонтоһон һатып алыу арҡаһында ҡыйратылыуҙан ҡотолоп ҡала.

Византияның халҡы ҡатнаш була. Йыл һайын октябрҙә үткән йәрминкәгә Ҡырымға Бағдадтан, Месопотамиянан, Египеттан, Фәләстандан, Рәсәйҙән, Венгриянан, Бәшәнәктәр иленән, Италиянан һәм Испаниянан сауҙагәрҙәр ағылған.

568 йылда Юстиниана батшалыҡ итә башлағас, Византия менән төрки донъя яҡынлаша. Төрки ҡәүемдәр Византия баҙарына ебәк сығарыуҙы яйға һалыр өсөн илселәр ебәрә. Төньяҡ ебәк юлы уғыр-башҡорттар биләмәһе аша үткән. Данлыҡлы ебәк юлы варягтарҙан алып гректарға тиклем Дәште Ҡыпсаҡ дәүләте аша үтеп, Византияға тиклем һуҙыла.

Тарихи аренанан ҡыпсаҡ-ҡоман хандары китеү менән Дәште Ҡыпсаҡ империяһы бер нисә кенәзлеккә тарҡала. Был халыҡтар башҡа ҡәбиләләргә ҡушыла. 1423 йылда Рим империяһы бәләкәй дәүләт булып ҡала. Төрөктәргә ҡаршы һуғышта Византияның һуңғы императоры Константин XI (1405-1453) һәләк була. Төрөктәр Византия империяһының вариҫы булып китә.

**(Дауамы бар).**

*✓ Атай-әсәйебеҙҙең спортсы булмышы беҙгә лә күскән, әлбиттә. 4-5 йәшлек сағымда уҡ атайҙың миңә, халыҡса әйткәндә, "отжимание"нан башлап, "шпагатҡа ултырыуға" тиклем хәрәкәттәр күрһәтеүе хәтеремдә.*



**2016 йылдың ноябрендә Францияла үткән грэпплинг, йәғни донъялағы бөтөн көрәш төрҙәре алымдарын бергә туплауҙан барлыҡҡа килгән спорт төрө буйынса Европа чемпионатында башҡорт егете Динар АҠМЫРҘИН көмөш миҙал яулағайны. Ул Башҡортостанда ADCC грэпплингы федерацияһына нигеҙ һалыусы, "Тархан" клубы етәксеһе, баш тренеры. Был юлы уның менән спорт донъяһы серҙәре һәм закондары тураһында әңгәмәләшәбеҙ.**

# СПОРТ ДОНЪЯҺЫ

## миңә атайым менән

**Динар Ривал улы, тәрбиә орлоҡтары ғаиләлә һалына, донъяға ҡараш та атай-әсәй тәрбиәһе аша формалаша, тигән традицион ҡағиҙә һеҙгә лә ҡағыламы?**

- Әлбиттә, ҡағыла. Учалы районында йәшәүсе атайым да, инәйем дә йәш саҡтарында спорт (инәйем - саңғы, ә атайым - еңел атлетика һәм дзюдо) менән шөғөлләнгән. Ғаиләлә ике бала үҫтек. Һеңлем дә спортсы - яңыраҡ йөҙөү буйынса республика чемпионатында үҙен иң оҫта, иң етеҙ ҡатнашыусы итеп танытты. Шулай итеп, беҙҙең ғаиләлә барыбыҙ ҙа спортсылар, тип, ғорурлыҡ менән әйтәм. Ошоғаса спортта ниндәй генә уңыштарға өлгәшһәм дә, барыһы өсөн дә атайым менән инәйемә рәхмәтлемен. Ген йоғонтоһо арҡаһындамы, беҙгә спорт ят нәмә түгел икәнен аңлағанлығыҙҙыр. Спортҡа ылығыуым тураһында һүҙ алып барған саҡта ғаиләбеҙ йолалары факторын да иҫәпкә алмай булмай - атай-әсәйебеҙҙең спортсы булмышы, сәләмәт йәшәү рәүеше беҙгә, балаларына ла, күскән, әлбиттә. 4-5 йәшлек сағымда уҡ атайҙың миңә, халыҡса әйткәндә, "отжимание"нан башлап, "шпагатҡа ултырыуға" тиклем хәрәкәттәр күрһәтеп, төшөндөрөп биреүе әлегеләй хәтеремдә. Спорт донъяһы ишеген миңә атайым асты.

**Тимәк, спорт донъяһына шулай атайығыҙ етәкләүендә еңел генә инеп киттегеҙ булдымы?**

- Юҡ, әлбиттә. Мәктәпкә барыр алдынан, еңел атлетика секцияһына яҙылдым. Шул осорҙа футбол уйнарға өйрәнеп алдым. Тәүҙә футболсы булырмын тигән маҡсатым да булманы - секцияға йөрөргә кәрәк булған өсөн генә уйнаным был туп тибеү уйынын. Әкренләп ылығыу барлыҡҡа килде. Футбол булһа, бүтәне кәрәкмәй ине миңә ул ваҡытта. Бала саҡта башлыса һәүәҫкәрҙәр рәтендә уйнаһам, 18-19 йәшемдә үҙемде профессионалдар рәтендә һынап ҡараным. Баш ҡаланың "Өфө" футбол клубында (алыштырыу составында) һәм Учалының "Горняк" клубында уйнаным.

"Генерал булырға теләмәгән һалдат - йүнһеҙ һалдат", тип юҡҡа ғына әйтмәйҙәр. Мин дә билдәле футболсы булырға хыялландым. Ғүмеремдең тәүге 20 йылы, профессиональ футболсы булам, тигән уй-хыялдар, маҡсат-ынтылыштар менән үтте. Киләсәктә футболсы булараҡ перспективам юҡ икәнен иң ҡәҙерле йылдарымды - ваҡытымды сарыф итә-итә аңланым. Беҙҙең илдә футболдың хәлгенәһе шулайыраҡ шул, ҡалайтаһың. Ваҡыт туҡтамай үтте, бер мәл мин 20 йәшкә аяҡ баҫтым. Футбол өсөн был оло ғына йәш икәнен һеҙ ҙә беләһегеҙ. Ниңәлер, был спортта һөҙөмтә булманы. Тырышам да һымаҡ, тик нимәһелер килеп сыҡманы. Бәлки, яҡшы тренер ҡулы аҫтында шөғөлләнеү етмәгәндер? Хәйер, был турала уйлана, һөйләй башлаһаң, ваҡыт етмәҫ. Шул ғына факт: һәүәҫкәрҙәр рәтендә уйнаған сағымда яҡшы ғына килеп сыға ине, ә профессиональ футболсылар рәтенә күскәйнем, ниндәйҙер тотҡарлыҡ барлыҡҡа килде лә ҡуйҙы. Нимәләр ҡамасауланы...

**Ләкин һеҙ артҡа сигенмәгәнһегеҙ, бары тик спорт төрөн генә алыштырып, юлығыҙҙы дауам иткәнһегеҙ, шулаймы?**

- Әлбиттә, бала саҡта футбол менән бер рәттән, һәр ваҡыт көрәш алымдары менән дә таныша йөрөнөм. Төп йүнәлешем көрәш булмаһа ла, ул һәр ваҡыт миңә яҡын булды. Беҙҙең ауылда еңел атлетика, баскетбол, футбол ише спорт уйындары яҡшы үҫешкәйне. Шуға күп балалар ошо секцияларҙан ҡайтышманы. Унан һуң, көрәш түңәрәгә асылғас, мин шунда уҡ көрәшкә, бокс асылғас - боксҡа барҙым. Ауылыбыҙҙа күнекмәләр үтеү мөмкинлеге яҡшы уйлап ойошторолғайны. Спорт майҙансыҡтары, спорт залдары, көрәш залдары, тренажер бүлмәләре - барыһы ла бар. Спортҡа шул залдарҙа, секцияларҙа "көс йыйып" аяҡ баҫҡанмындар ҙа инде...

Футболдағы карьерам барып сыҡмаҫын аңлаған бер мәлдә дуҫтарым мине лә көрәшкә яҙылырға саҡырҙы. Ул ваҡытта Бразилия джиу-джитсуһы секцияһы асылған ғына саҡ ине. Зәңгәр экрандар аша ғына белгән был спорт төрөнә икеләнмәйенсә яҙылдым. Сөнки ҡатнаш алыш төрҙәрен яратып ҡарай торғайным. Джиу-джитсу ҡатнаш алышта киң ҡулланылған көрәш. ММА көрәшселәренең барыһы ла джиу-джитсуҙы өйрәнә. Был - ММА нигеҙен тәшкил иткән төп төрҙәрҙең береһе. Дуҫтарым ошо секцияға яҙылған саҡта минең футбол сезоным да ябылып ҡына тора ине, бик уңай булды. Унан ярыш артынан ярыш китте. Шулай итеп башланды ла инде минең көрәшсе юлым. Бер аҙ ваҡыт шөғөлләнгәндән һуң: "Был бит тап мин эҙләгән юл!", - тигән аңлауға килдем.

Футболда һин бер үҙең түгел - һинән тыш майҙанда ун иптәшең, тағы тренерың бар. Ул теләһә, һине, объектив сәбәбе булмаһа ла, уйынға сығармаҫҡа мөмкин. Нимәң менәндер оҡшамаһаң - сығармай ҙа ҡуя. Командала яңы кеше булһаң, бигерәк тә һинең менән бер кем дә "сөсөләнмәйәсәк". Көрәштә миңә шуныһы айырыуса оҡшаны - бында һин яңғыҙһың. Дәғүәсеңдән еңелгән хәлдә лә, һин барыһы өсөн дә үҙеңде генә ғәйепләйһең. Футболда зарланыр, кемделер ғәйепләр өсөн сәбәбе табылып ҡына тора: пасты ҡыйыш биреүҙәре, майҙанға сығармай ҡалдырыуҙары, һин яҡшы уйнаһаң да, командаңдың һин көткәнсә яҡшы уйнай алмауы һәм башҡа сәбәптәр. Бында - һин һәм һинең дәғүәсең генә.

**Спорт өлкәһе ир-егет өсөн оло һынау икәнен беләбеҙ. Ә шулай ҙа ауыр һынылыш мәлендә кемгә, нимәгә таянаһығыҙ?**

- Иң тәүҙә миңә ысын ир-егет тәрбиәһе биреп үҫтергән, мине тәрбиәләүгә бар көсөн, түҙемлеген, ваҡытын йәлләмәгән атайым Ривал Ғарифулла улына һәм әсәйем Гөлсара Талха ҡыҙына таянам. Миңә дин һабаҡтары биреүсе хәҙрәт Айнур Арыҫлановты ла таянысым тип иҫәпләйем. Ул: "Һин, ҡустым, тырышһаң, чемпион буласаҡһың", - тип, гел дәртләндерә торҙо. Айнур хәҙрәттең ҡыйыу һүҙҙәре тормошҡа ашмаҫ һымаҡ ине миңә, ҙур еңеүҙәр Ҡаф тау артында һымаҡ ине... Үҙемдең барлыҡ дуҫтарыма кәрәк саҡта терәк булғандары өсөн сикһеҙ рәхмәтлемен. Минең спорт карьерама ғаиләм дә, үҙ өҫтөмдә эшләү ҙә йоғонто яһағандыр, тип уйлайым. Бөгөнгө ысынбарлыҡта һәр кем үҙ өҫтөндә эшләргә, оҫталығын камиллаштырырға тырышырға бурыслы.

Ауыр, һынылышлы мәлдәремдә һәр ваҡыт дин ярҙамға килә. Бөтөн бәрәкәт, бөтөн көс Алланан килә, тип уйланыла. Беҙ, башҡорттар, күңелебеҙ менән барыбер ҙә ныҡлыбыҙ. Беҙ тәбиғәтебеҙ менән ҡырыҫ, артҡа сигенә белмәҫ яугирҙар. Ошо милли һыҙатыбыҙ ҙа минең холҡомдо билдәләгәндә ситтә ҡалмағандыр. Әйткәндәй, был һүҙем менән үҙемде кемдәндер айырып ҡуйырға йыйынмайым - был һыҙат һәр кемдә бар. Кемдер уны үҙендә асып еткерә генә алмайҙыр.

Ахыр сиктә, спорт үҙе лә рухты сыныҡтыра: бала саҡтан төрлө тән йәрәхәттәре алынды, еңеү-еңелеүҙәр кисерелде. Уларҙы лайыҡлы үтергә өйрәнелде. Ҡыҫҡаса әйткәндә, ошо һынауҙар мине үҫтерҙе.

**Белеүебеҙсә, һеҙ "Тархан" клубында шөғөлләнәһегеҙ, ул клубты үҙегеҙ етәкләйһегеҙ. "Тархан" спорт клубы, унда шөғөлләнгән команда ҡасан, нисек, ниндәй шарттарҙа барлыҡҡа килде?**

- Беҙ күпмелер ваҡыт дуҫтарыбыҙ менән бер тренерҙа шөғөлләндек тә, ҡайһы бер сәбәптәр арҡаһында, тренерыбыҙ икенсе эшкә күсте. Шуға ҡарамаҫтан, күнекмәләребеҙҙе

***ДИНАР АҠМЫРҘИН:***

*Ошо 3-4 йыл эсендә грэпплинг, хәрби самбо, кикбоксинг, панкратион, ҡатнаш алыш кеүек спорт төрҙәре буйынса тиҫтәләгән республика чемпионы тәрбиәләнек. Шулай уҡ Волга буйы федераль округы кимәлендәге ярыштар еңеүселәре һәм халыҡ-ара турнирҙар призерҙарыбыҙ ҙа бар.*



**✓ Райондан Өфөгә барырға мөмкинлектәре булмаған ауыл егеттәренә чемпионат ойоштороҙоҡ. Ғәҙәттә, барлыҡ спорт ярыштары ла ҙур ҡалаларҙа уҙғарыла. Ә беҙ үҙебеҙҙең сараларҙы төпкөлдәрҙә үткәрергә тырышабыҙ.**

# ИШЕГЕН...

## әсәйем асты

дауам иттек. Быға тиклем алған белемдәребеҙгә, төрлө семинарҙарҙа тәжрибәле спортсыларҙан өйрәнгән һабаҡтарға таянып, залда үҙаллы шөғөлләндек. Төркөмөбөҙ үҫә барҙы, үҫә барҙы, мин, үҙем дә һиҙмәҫтән, ошо төркөмдөң лидерына әйләнгәнмен. Был командабыҙға хәҙер 4 йыл самаһы. Оҙайлы ғына ваҡыт команданың исеме лә булманы. Исем һайлау тураһында уйламағанбыҙ ҙа - күнекмәләр, ярыштар донъяһында ғына ҡайнап йәшәгәнбеҙ. Яңы кешеләр килә торҙо, беҙгә өҫтәлә торҙо, үҙ оҫталыҡтарын арттыра торҙо. Шулай бер осор командабыҙға исем ҡушып, уға рәсми төҫ бирергә кәрәк, тигән тәҡдимдәр күбәйҙе. Йәшермәйем, тәүҙәрәк үҙемә, әлеге спорт төрө менән 2 йыл ғына шөғөлләнгән кешегә, тренер вазифаһын, ярлығын элеү сәйерерәк тә, уңайһыҙыраҡ та тойола ине. Мин йыш ҡына: "Мин ниндәй тренер булайым, ти. Кешеләр тренерлыҡҡа спорт менән утыҙар йыл шөғөлләнгәндән һуң ғына килә", - тип, ҡаршылаша килдем. Миңә яуап итеп, дуҫтарым: "Һинән өйрәнергә килгән кешеләр үҙҙәренә яңы ғилемдәр ала бит, шул еткән", - тип, мине өгөтләүен белде. Һәм, уйлаштыҡ-уйлаштыҡ та, егеттәр менән командабыҙға "Тархан" исеме бирҙек. 1,5 йыл беҙҙе ошо исем менән беләһегеҙ.

**Командағыҙ тураһында ла бер аҙ һөйләп үтһәгеҙсе...**

- Командабыҙҙа барыбыҙ ҙа бик йылы, дуҫтарса, туғандарса мөнәсәбәттәбеҙ. Быны беҙгә әле генә килгән яңы кешеләр әленән-әле әйтеп кенә тора. Милли состав буйынса ҡарағанда, күпселекте башҡорттар тәшкил итә. Шулай уҡ бүтән милләт вәкилдәре лә күп. Барыбыҙ ҙа дуҫ, татыубыҙ. Хатта ки, яңы кеше килһә, уның тәүге мәлдәрҙә була торған хаталарынан, уңышһыҙлыҡтарынан бер кем дә көлмәй. Киреһенсә, һәр кем уға хәленән килгәнсә ярҙам итергә ынтыла. Әгәр кемдер ауыр тормош һынауы кисерҙе икән, команда ярҙамға килергә әҙер тора. Ошондай команда туплауға өлгәшеүебеҙ өсөн мин ифрат та шатмын. Ә был аҫыл егеттәрҙең уҡытыусыһы булыуым менән ысын мәғәнәһендә ғорурланам. Командабыҙ Өфөлә генә түгел, республиканың башҡа ҡалаларында һәм ауылдарында шөғөлләнеүсе кешеләрҙән тора. Һәм беҙгә ҡушылырға теләүселәр күп. Өс йыл эсендә беҙҙә бөтәһе 200-ләгән кеше шөғөлләнеп өлгөрҙө. Был иҫәпкә балаларҙан алып, профессионалдарға тиклемге кешеләрҙе индерәбеҙ. Быларҙан тыш, беҙҙең райондарҙа ла филиалдарыбыҙ бар. Райондарҙа шөғөлләнеүселәрҙе лә ҡушып һанаһаҡ, әлеге көндә, сама менән әйткәндә, 300 кеше әүҙем күнекмәләр үтә, тип әйтергә була. Учалы, Бөрйән, Әбйәлил, Баймаҡ райондарында үҙ вәкиллектәребеҙ бар. Әлеге көндә тағы бер нисә район беҙҙе үҙҙәренә саҡыра, уларҙың тәҡдимен тормошҡа ашырыу буйынса эшләйбеҙ. Миҫал өсөн, февраль айы баштарында бер аҙналыҡ сәфәр менән Әбйәлил районында булдыҡ. Урындағы йәштәр өсөн оҫталыҡ дәрестәре, күнекмәләр ойоштороҙоҡ. Слеттың аҙағында "Урал аръяғы чемпионаты" уҙғарҙыҡ. Шулай итеп, райондан Өфөгә барырға ваҡыттары, мөмкинлектәре булмаған ауыл егеттәренә чемпионат ойоштороҙоҡ. Ғәҙәттә, барлыҡ спорт ярыштары ла ҙур ҡалаларҙа уҙғарыла. Ә беҙ үҙебеҙҙең сараларҙы төпкөлдәрҙә үткәрергә тырышабыҙ. Спорт ул яҡтарҙа ла үҫһен, тибеҙ. Мин дә ауылда тыуҙым, шунлыҡтан, баш ҡалаға ғына түгел, айырым осраҡтарҙа район үҙәгенә барып әйләнеүҙең ни тиклем ҡыйын эш икәнен аңлап торам.

Өс йыл эсендә беҙҙең йыйылма командабыҙ ҙа барлыҡҡа килде. Йыйылма командаға ингән егеттәрҙе хәҙер теләһә ҡайһы кимәлдәге ярышҡа ебәр - береһе өсөн дә йөҙ ҡыҙартырға тура килмәйәсәк. Улар көн һайын килеп, оҫталығын камиллаштыра. Ошо 3-4 йыл эсендә грэпплинг, хәрби самбо, кикбоксинг, панкратион, ҡатнаш алыш кеүек спорт төрҙәре буйынса тиҫтәләгән республика чемпионы тәрбиәләнек. Шулай уҡ Волга буйы федераль округы кимәлендәге ярыштар еңеүселәре һәм халыҡ-ара турнирҙар призерҙарыбыҙ ҙа бар.

**Ә шулай ҙа бындай ҙур команданы туплау өсөн ниндәйерәк механизмдар ҡулландығыҙ? Әйтәйек, күнекмә урындарын табыуҙы ғына алайыҡ, ул бит ҡыйбат ҡына тора?**

- Эйе, ҡайһы бер ҡыйынлыҡтар ҙа бар, әлбиттә. Беҙҙә, Дағстан, Чечня менән сағыштырғанда, спортҡа ҡараш һүлпәнерәк. Барыһы ла: бинаны, ҡоролмаларҙы ҡуртымға алыу хәстәре үҙебеҙҙең иңгә төшә. Шунлыҡтан мин спортсы ғына түгел, тренер, менеджер, функционер вазифаларын да башҡарам. Ярыштарға үҙ иҫәбебеҙгә барып ҡайтабыҙ. Рәсәй ярыштарына үҙ аҡсабыҙға йөрөйбөҙ, Францияға ла үҙ аҡсама юлландым. Бындай мәсьәләләрҙе сисеүҙә башлыса беҙҙә шөғөлләнгән эшҡыуар егеттәр ярҙам итә. Әммә ундайҙар һирәк. "Тархан"ға ғына түгел, башҡа командаларға ла ярҙам итеүсе меценаттар булһа, республикала спорт тағы ла нығыраҡ таралыу табыр ине. Сөнки ҙур ярыштар, чемпионаттарға барыу тураһында һүҙ сыҡһа, барыһы ла аҡса мәсьәләһенә килә лә төртөлә.

**Тренерлыҡ менән шөғөлләнеүҙән үҙегеҙгә ниндәй ҙә булһа матди файҙа алаһығыҙмы һуң?**

- Эйе, беҙҙең күнекмәләр түләүһеҙ була алмай, сөнки беҙгә, әйткәнемсә, бинаны ҡуртымға алған өсөн түләргә, тренерҙарға эш хаҡы бирергә тура килә. Әлеге көндә ике тренер: көрәш буйынса тренер - мин һәм һуғыу, тибеү техникаһы буйынса - Азамат Смаҡаев эшләй. Һеҙҙең һорауығыҙға ҡыҫҡа ғына итеп яуап биргәндә, минең фекеремсә, кеше йәмғиәткә файҙа килтерә икән, ас, ярлы була алмайҙыр. Йәмғиәткә, туғандарыма, яҡындарыма файҙам тейә икән, мин дә астан үлмәйәсәкмен. Әле яңғыраған һүҙҙәрем зар ауазы булып ишетелмәһен ине. Ә ысынбарлыҡ сағылышы булып ҡына аңлашылһын ине. Кеше бит һинең уңыштарыңды, еңеүҙәреңде генә күрә. Ә мин "миҙалдың" һул яғын аса биреп ҡуйҙым. Был хәл беҙҙе һис кенә лә туҡтатмай. Уларға ҡарап ҡына танауҙы төшөрмәйбеҙ. Һәр ваҡыт ниндәйҙер сараһы сығып тора. Тағы, әйтергә кәрәк, әгәр ярҙам ҡулы һуҙыусылар булһа, уларҙың ярҙамынан да баш тартмаҫ инек. Республикала йәштәргә ярҙам иткән кешеләр күберәк булһын. Йәш егеттәрҙе беҙ спорт ярҙамында тәрбиәләйбеҙ, спорт менән уларҙы алама ғәҙәттәрҙән, хәтәр уйҙарҙан йолоп алабыҙ. Спорт ярҙамында ирҙәр физик һәм рухи көсөн арттыра, холоҡ-фиғелен нығыта.

**Спорттан башҡа мауығыуҙарығыҙ бармы, буш ваҡытығыҙҙы нисек үткәрәһегеҙ?**

- Ялымда әүҙеммен: тәбиғәткә сығып китәм, туғандарым, дуҫтарым менән аралашам. Атай-әсәйем алыҫта булғанлыҡтан, ауылға йыш ҡайтып йөрөп булмай, шулай ҙа форсаты сығыу менән ҡайтырға тырышам. Ял ваҡыттарында тарихи китаптар, биографик хроникалар уҡырға әүәҫмен. Әҙәби китаптарҙы ла әҙ-әҙләп уҡыйым. Тағы, дәртләндерә, илһамландыра торған (русса уларҙы мотивация бирә торған тибеҙ) китаптарҙы ла яратам. Йөкмәткеле, бер тында уҡыла торғандарын үҙ итәм. Шундайҙарҙың береһе - Пауло Коэльоҙың "Алхимигы". Йәнә әҙәҙләп йәмәғәт эшмәкәрлеге менән дә шөғөлләнәм. ADCC грэпплингының Башҡортостандағы Федерацияһын ойоштороҙоҡ, әле уны үҫтереү буйынса эшләйбеҙ. Шулай уҡ Башҡортостан мосолмандары Диниә назаратының спорт секторы етәксеһе лә булып торам. Яңыраҡ Бөтә Рәсәй башҡорт йәштәре ҡоролтайында мине Спорт бүлеге мөдире итеп һайланылар. Ялымда ла үҙебеҙҙең спортты үҫтереү тураһында ҡайғыртыла инде ул. Был өлкәлә ниндәйҙер кимәлдә тәжрибәм бар икән, уны ватандаштарға еткереүҙе лә бурысым итеп һанайым.

**Һеҙ алып барған хәрби самбо, грэпплинг, панкратион һымаҡ көрәш спорт төрҙәре беҙҙең халыҡ өсөн ҡайһы яғы менән уңайлы?**

- Көрәш, көс һынашыу беҙҙең халыҡҡа танһыҡ та, яҡын да спорт төрө ул. Ата-бабаларыбыҙҙы алып ҡараһаҡ, барыһы ла бала саҡтан спорт менән шөғөлләнгән. Таҫыллы, тос булғандар. Атта сабып барышлай уҡтан атып, сәпкә тейгеҙә алғандар. Һабантуйҙы ғына алып ҡараһаҡ, был байрамда бөгөнгәсә үткәрелгән ярыштар, уйындар борондан килә. Улар етеҙлекте, көслө булыуҙы, сос булыуҙы талап итә. Теләһә ҡайһы халыҡта сәм, көнләшеү уятырлыҡ батырҙарыбыҙ ҙа юҡтан ғына барлыҡҡа килмәгән. Һәр быуында даны башҡорт иленән сит яҡтарға ла таралған үҙ батыры булған. Батырҙарыбыҙ бөгөн да бар. Мин районлар буйлап йыш йөрөйөм, унда балалар, үҫмерҙәр, йәштәр менән аралашам. Балаларыбыҙ физик яҡтан бик һәләтле, тип ныҡлы ышаныс менән әйтә алам. Ул балаларҙы әҙ генә дәртләндереп, спорт төрҙәренә өйрәтеп ебәрер кешеләр генә кәрәк. Әгәр беҙ эшебеҙҙе артабан да ошо йүнәлештә дауам итһәк, беҙҙең төбәк тә Рәсәйҙә көрәш спорты буйынса иң алда барған Төньяҡ Кавказдан ҡалышмаҫ. Мин әлегә Дағстанда булғаным юҡ, киләсәктә унда барып, көс һынашып ҡарарға хыялланам ғына. Уның ҡарауы, был республикала тыуып үҫкән таныштарым, дуҫтарым бар. Уларҙың һөйләүе буйынса, Дағстанда 5 йәш тулыу менән ир баланы көрәш түңәрәгенә бирәләр. Ниндәйҙер сәбәп менән һине көрәшкә бирмәгәндәр икән, тимәк, йә һин ҡыҙ, йә - инвалид. Был - ғәҙәти хәл. Был ғәҙәт ниндәйҙер бер ауылға ғына түгел, бөтөн республикаға хас. Бер көндө статистика мәғлүмәттәрен ҡарап ултырғайным. Унда күренеүенсә, маталар һатып алыу буйынса Дағстан Рәсәй төбәктәре араһында иң алда килә. Ә беҙҙә районда ғына түгел, Өфөлә лә ҡайһы саҡта залды маталар менән йыһазландырыу ҡыйынға төшә. Дағстанда һәр ауылда көрәш залы бар. Беҙҙең ир-егеттәребеҙ өсөн дә көрәш менән шөғөлләнеү ғәҙәти хәл булған, ошо йоланы әле лә кире ҡайтарыу мөмкин. Иманға ҡайтырға кәрәк беҙгә. Иманға ҡайтып ҡына мәҙәниәтебеҙҙе үҫтерә алабыҙ. Ә спорт тәрбиәһе - мәҙәниәттең айырылғыһыҙ бер өлөшө лә инде.

**Һеҙҙең хыялдарығыҙҙың барыһы ла тормошҡа ашып бөттөмө, әллә улар тағы бармы, буласаҡмы?**

- Хыялдар бөтһә, тормош та бөттө, тигән һүҙ бит инде ул. Бәләкәй саҡтан алыштар, көрәштәр, һуғыштар тураһында бәйән иткән "Рокки" һымаҡ фильмдарҙы ҡарарға яраттым, уларҙан дәрт, илһам ала торғайным. Минең дә кино геройҙары һымаҡ рингҡа, келәмгә сығып баҫып, үҙ көсөмдө һынап ҡарағым килде. Шулай ҙа мин ундай оҫталығым юҡ икәнен һәр саҡ хәтерҙә тоттом. Ул саҡтағы үҙем өсөн тип кенә шөғөлләнеүем һөҙөмтә бирмәй ине шул. Шунлыҡтан, профессионалдар рәтенә сығыу маҡсатым хыялға тартымыраҡ ине. Уның ҡарауы, ҡатнаш алыш төрҙәре, ММА, грэпплинг, панкратион менән ныҡлап шөғөлләнә башлағас, үрҙәрәк әйткән хыялдарымдың тормошҡа аша барыуын аңлағандай булам. Дөрөҫ, көндәлек мәшәҡәттәр шауҡымында был турала уйлай һалып бармайһың. Ә уйлай башлаһаң, әлеге тормошоң - хыялдағы тормошондоң үҙе икәнлеген аңлап, бәхет кисерәһең. Миңә лә бындай тойғо ят түгел: хыялдарыңдың тормошҡа ашыуы тойғоһо. Әйткәндәй, һеҙҙең һүҙ ыңғайында биргән һорауығыҙға яуап бирәйем, күңелем түрендә йөрөткән артабанғы хыялым менән уртаҡлашайым. Мин күптән түгел грэпплингтың нага төрө буйынса Францияла уҙғарылған Европа чемпионатында еңеп ҡайттым. Эске һиҙемләүем, Европа чемпионатында еңеүем иң юғары уңышым түгелдер әле, тип әйтергә нигеҙ бирә.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Динар Ривал улының әңгәмәбеҙ аҙағындағы һүҙҙәрен айырып ишеттерергә булдым. Бына улар: "Спортҡа килеүҙең бик шәп ыңғай яғы барлығы тураһында һүҙ күптән йөрөһә лә, күптәр был факторға әһәмиәт биреп еткермәй. Миңә күнекмәгә йөрөгән зыялы ағайҙарҙан: "Залда шөғөлләнә башлағандан бирле эшкә барымым, сыҙамлығым, мейе эшмәкәрлегем яҡшырҙы", - тип, ҡыуанып һөйләүен йыш ишетәм. Шуға ошо майҙандан, "Киске Өфө" трибунаһынан йәштәштәргә, ҡусты-һеңлеләргә өндәшкем килә. Заманыбыҙҙың алдынғы кешеләре булайыҡ! Шундайҙарға уңыш йылмая. Әйҙәгеҙ, үҙ-үҙебеҙҙе табайыҡ. Тормошта үҙ урыныбыҙҙы табып, ижад итәйек, бөйөк эштәр атҡарайыҡ, сәләмәт булайыҡ! Мин барыһын да спортҡа саҡырам. Һис юғы физкультура менән шөғөлләнәйек!"**

**Илгиз ИШБУЛАТОВ**
**әңгәмәләште.**

## Һарайҙа булған хәл
## (һарайҙа ғынамы икән?)

Берҙән-бер көн шулай һарайҙағылар араһында ҡаты бәхәс ҡупҡан. Улар үҙ-ара кем һарайҙа иң кәрәкле хайуан, кем уларҙың хужаһы - кешене ашата икәнлеген асыҡларға керешеп киткәндәр, ти. Мөһимлекте иҫбатлау өсөн бәхәс көсәйгәндән-көсәйгән. Бер мөйөштән ҡыйыуһыҙ ғына тауыш менән һыйырҙың:

- М-у-у-ун. М-и-ин генә иң кәрәк һәм файҙалы хайуан бында. Мин быҙаулайым. Быҙауым үҫкәс, һуғым була. Мин һөт һауҙырам, унан ҡаймаҡ, май, ҡатыҡ, эремсек, ҡорот эшләп ашай хужалары-быҙ, - тип мөңрәүенә, икенсе мөйөштән ат әсе кешнәп ебәргән:

- И-һо-һо-һо, шулай булмаһа ярар ине. Артыҡ мөңрәмәй тыыр-р-р! Бында иң кәрәкле хайуан мин. Бөтә эшен кеше минең менән башҡара: утынын да ташый, бесән, һалам, емде лә минең менән алып килеп ашата һеҙ эшлекһеҙ булдыҡһыҙҙарға, и-һи-һо!

Уңарса һарыҡтар кемуҙарҙан бәхәсләшергә керешкән:

- Бә-ә-ә, бә-ә-ә, бә-ә-әй! Беҙ йөн бирмәһәк, кеше яланғас ҡалып, ҡышҡы һалҡындарҙа әллә ҡасан туңып үлер ине, бә-ә-рә-бә-әр! Беҙ кешенең өҫтө бөтөн, тамағы туҡ булһын, ул Аллаһы Тәғәләһенең алдында ғүмерендә ҡылған гонаһтарын йыуһын өсөн хатта үҙебеҙҙе ҡорбан итәбеҙ. Шулай булғас, беҙ иң кәрәкле хайуан кеше өсөн, бә-ә-әт, бә-ә-әт!

Кәзәләр ҙә был иң кәрәктәрҙән ситтә тороп ҡалмаҫ өсөн:

- Мө-гөҙ ҙә-ә кә-рә-ә-ә-әк, кем-гә кәрәк, мә-ә-ә! - тип йыбаныс ҡына тауыш бирәләр икән иң төптәге мөйөштән.

Был мөһимлекте танытыуҙағы һатыулашыуҙан ятып ҡалмайыҡ, тип, хатта ҡаҙҙар менән тауыҡтар ҙа ҡаҡайышып ҡаңҡылдашырға, кеткелдәшергә тотонғандар, ти.

- Ҡа-ҡа-ҡанатһыҙ ҡала кешеләр беҙһеҙ! Ҡыт-ҡыт-ҡытлыҡ янай кешеләргә йоморҡаһыҙ!

Һарайҙағы хайуандар мөһимлеккә дәғүәләшкән арала, уларға бесән төшөрәм тип һарай башына менгән хужа, әүеҫлек башында сосайып торған һайғау осона яҙа баҫҡан да, ҡолап төшөп, аяғын һындырған. Аяғы гипсҡа уралғас, хужа ҡымшана ла алмай ултырған да ҡуйған. Хужабикә ҡышҡа әҙерләнгән бесән, һалам, ем менән ҡош-ҡорттарын йәшел үләнгә баҫтырған. Яҙ еткән. Һарайҙа интеккән мал-тыуар йәй буйына сәхрәлә иркен йөрөп көрәйгән. Бәхәстәр онотолған. Йәй үткән. Барыһы ла ғәмһеҙлектә көн иткән. Көҙ еткән. Ҡош-ҡорт һарайға ингән. Һарайҙа бесән дә, һалам да, ем дә юҡ. Шул саҡта бөтәһенә лә бер ниндәй дәғүә, бәхәсһеҙ, кем бында кемде ашатҡаны, кемдең бында иң кәрәк, иң мөһим икәне үҙенән-үҙе асыҡланған да ҡуйған. Үә-ә-әт!

## Күбәләктәр
## (тормошта булыуы шикһеҙ)

Хәҙер заман икенсе. Хәҙер нимә ҡыланһаң да ярай. Хәҙер бөтәһе лә башҡаларҙан сағыуыраҡ төҫлә, һығылмалыраҡ һынлы, сәйерәк холҡло булып күренергә тырыша. Эйе, эйе! Булырға түгел, фәҡәт булып күренергә! Сөнки тормошта яһалмалыҡҡа иғтибар күп, яһалмалыҡҡа өҫтөнлөк бирелә, яһалмалыҡ дәрәжәлә, шуға ла тормош рәүешен, йәшәү сифатын, кеше холҡон баһалауҙа яһалмалыҡ көслө дәлилгә әйләнде.

Кешеләрҙең яһалмалыҡтан ләззәт табыуына көнләшкән күбәләктәр ҙә берҙән-бер көн үҙҙәрен үҙгәртергә булып киткәндәр. Ә ниңә шулайтмаҫҡа? Ялҡытты был борон-борондан тәбиғәттән бирелгән уларҙың тоҡомдарына ғына хас бер үк төҫтәр, бер үк кәүҙә, килбәт, бүйһындар. Анау тиклем аҡыллы тип иҫәпләнгән кешеләргә яраған беҙгә ярамаймы? Заманаһы шулай, бер кемдән рөхсәт һорап, оялып тораһы юҡ.

Уйлағандар. Эшләгәндәр. Үҙгәрергә теләп, яңы төҫтәргә буяна, яңы ҡиәфәттәргә инә башлағандар, ти, былар. Аҡ төҫтәрен ҡараға, ҡараларын ҡыҙыл, йәшел, күк, көрән һ.б. һоро-һарығусҡыл төҫтәргә әйләндереп буяна торғас, тәбиғи ҡанат, кәүҙә төҫтәрен онотоп, төрҙәренең үҙ йөҙөн юғалтып бөткәндәр. Икенсе, өсөнсө быуындарында, өлкәндәрҙән күреп, яңы ғына ҡорттан күбәләккә әүерелә башлаған балалары ла хәтәр зәһәр төҫтәргә буянырға күнегеп киткәндәр. Шулай итеп, тыуыр-тыумаҫтан буяна башлаған балалары тоҡом төҫтәрен бөтөнләй белмәй үҫкәндәр.

Күпмелер ваҡыт үтеүгә, бөтәһе лә бер төрлө ала-сыбар төҫтәге күбәләктәр күпләп ҡырыла башлаған. Буялған ҡанаттары ҡороған, һығылған кәүҙәләре ҡорошҡан. Һалған йомортҡаларынан күбәләккә әүерелә торған ҡорттар урынына, албаҫты кеүек, сатай-ботай сәнскеле мөгөҙлө ямаҡай ҡарышлауыҡтар яралып сыҡҡан. Улар күбәләктәрҙе тотоп ашай башлаған. Үҙҙәрен элегерәк уларға бөтөнләй иғтибар итмәгән ҡош, ҡорт, бөжәк аулап, сүпләгән...

Афәттәренең сәбәбен һиҙгән ҡайһы бер күбәләктәр тоҡомдарын һаҡлар өсөн буяныуҙы тыйырға теләгән. Үҙҙәре яман холоҡтарынан тыйылып, башҡаларҙы буяныуҙан биҙҙереп, яңы тыуғандарын үҙ төҫтәрен һаҡларға өйрәтергә тырышҡан. Ләкин тыумыштан шул өлкәндәрҙән буяныуҙы-һыланырға өйрәнеп үҫкән йәш быуын уларҙың өгөтөнә ҡолаҡ һалыу түгел, әһәмиәт тә бирмәгән...

Кешеләр араһында ла шулай. Улар ҙа үҙҙәренең яман ҡылыҡтары арҡаһында әленән-әле үлемесле афәт алдына баҫа һәм шунан ҡотолоу сараһын эҙләй башлай. Ә ул сара һәр ваҡыт бар. Уның өсөн бер быуындың алама холоҡтарынан тыйылып, киләһе быуынын насар ғәҙәттәрҙән аралауы зарур. Төп талап - яҙыҡ ғәҙәттәрҙә, насар ҡылыҡтарҙа яңы быуынға үрнәк күрһәтмәү! Шул талап мотлаҡ үтәлгән хәлдә генә һәр төр үҙен һаҡлай ала...




## Маймылдар менән йомрандар
## (булыуы ихтимал хәл)

Сиктәр иркен асылып, донъя гиҙергә уңайлы шарттар тыуғас, маймылдар йомрандар йәшәгән ерҙәргә сәйәхәткә килгәндәр ҙә, уларҙың йәшәгән шарттарын күреп:

- Фу-у-у, ҡайһылай ҡараңғы, ҡырағай шарттарҙа йәшәйһегеҙ. Землянкаларҙан да сыҡмағанһығыҙ һаман. Һыу үткәргестәрегеҙ ҙә, һыуағыҙғыстарығыҙ ҙа юҡ, ҡайһылай донъянан артта ҡалғанһығыҙ, йөнтәҫ ҡәрҙәштәр. Һеҙ беҙгә шул хәтлем йәл. Шуға ла беҙ һеҙҙе ғәмһеҙ, ғәрһеҙ, бәғерһеҙ йәшәргә өйрәтергә килдек, - тип маймыллаланалар икән.

- Беҙ бит һеҙҙең өсөн тырышабыҙ, беҙҙән үрнәк алығыҙ: ағас баштарында, иркендә рәхәтләнеп, ҡайҙа теләйбеҙ, шунда барабыҙ, нимә теләйбеҙ, шуны ҡыланабыҙ, йәшәгән урындарыбыҙ яҡты, еләҫ. Ризыҡ күп, һыу тамсылары өҫтән ҡойолоп ҡына тора, көн дә душ, көн дә хуш. Ямғыр бөтә сүп-сар, хатта кәкәйҙәребеҙҙе йыуып алып китә - хөрриәт!

Икенсе йылда килгәндәрендә лә шул уҡ бер көйҙө көйләп, теңкәләренә тейеп, оялтҡандар тегеләр быларҙы. Бер-береһенә көнләштереп, башҡаларҙың да йәнен ҡуҙғытыр өсөн, бер нисә йомранды үҙҙәре янына ағас башына мендереп, бер нисә көн ашатып, эсереп һыйлағандар ҙа ти хатта.

Был анһат тормош хәтәр ныҡ килешкән баяғы йомрандарға, ағастан төшкөләре лә килмәгән. Ләкин ҡулдан ашатыусылары ҡайтып киткәс, ҙур ризаһыҙлыҡ менән башҡалар янына төшергә тура килгән. Шул ваҡыттан һуң, ерҙә йәшәгән ҡәрҙәштәренең эргәһендә, бер ояла йәшәп, улар әҙерләгән ризыҡ менән туҡланып көн итһәләр ҙә, мөйөш һайын үҙҙәренең борондан күнеккән тормошон хурлап, яттарса йәшәү рәүешен хуплап, уларҙан үрнәк алырға өндәп, ҡотҡо тарата башлағандар.

Өсөнсө йылына маймылдар килеп, бындағы ҡуштандары менән бергә ныҡышыша торғас, башҡа йомрандарҙы ла ағас башына менергә күндергәндәр барыбер. Күҙҙе ҡыҙҙырырлыҡ маймылланыуҙары, йәнде ҡуҙғытырлыҡ өмөтләндереүҙәре, нәфсене ҡоторторлоҡ өгөттәре ҡаршы торорлоҡ та булмағандыр шул. Етмәһә, үҙҙәренең бер иш йөндәштәре ҡасанан бирле шул хәтлем шапырынып маҡтай бит яттарҙың тормошон, ҡайһылайтып ҡыҙыҡһынмай түҙәһең? Исмаһам, бер тапҡыр ғына улар эргәһенә менеп, бер көн генә уларса йәшәп ҡарайым да... тип, ризалашҡандарҙыр инде, тотанаҡһыҙҙары.

Эй, рәхәт тормош! Кемгә оҡшамаһын был бер ниндәй ғәмһеҙ, хәстәрлекһеҙ ашап-эсеп ятыуҙар. Әйҙә сабышҡан, әйҙә һикерешкәндәр. Уйнап-йырлап арығастары, ботаҡтарҙа теҙелешеп ятып, наҙлы ҡояш нурҙарында туҡ ҡорһаҡтарын ҡыҙҙырып, ял иткәндәр, яттарса "матур" йәшәргә өйрәнеүсе йомрандар. Шундай шәп тормошҡа ылыҡтырғандары өсөн маймылдарҙы кемуҙарҙан шапырындырып маҡтайҙар икән. Ғәмһеҙ тормошҡа иҫ-аҡылдары китеп, нәфсәләре аҙып йөрөгәндә, үҙ ояларына төшөп, үҙ мөхиттәрендә, үҙҙәренсә йәшәүҙе бөтөнләй онотҡандар. Шул арала быйыл тыуған балалары үҙҙәре ерҙән ризыҡ сүпләп ашауҙан, ғөмүмән, ерҙән бөтөнләй биҙгәндәр, ти.

Әсе елдәр өрөп, епшек ҡар-ямғырлы көҙ еткәс, маймылдар йылы яҡтарына ҡайтып киткәндәр. Үҙ йүндәрен үҙҙәре хәстәрләүгә мәжбүр булып ҡалған йомрандар, өшөп-туңып, асығып, төңөләшеп, бер-береһен әткеләп, төрткөләп, кемде гәйепләргә, кемдән үс алырға белмәй йөрөйҙәр, ти. Сөнки уларға көн дә кәйеф-сафа ҡороп, ҡулдан ашатыусылар юҡ. Ә үҙҙәре ергә төшөп ем сүпләп ашауҙы ҙур хурлыҡ күргән булып, бөтөнләй биҙгәндәр. Был аслыҡ-яланғаслыҡтан бәләкәй балалары бик ныҡ йонсоған, ти.

Тәүге һалҡындар төшөп, ағастарҙың япраҡ, емештәре ҡойолоп бөткән. Ҡар ҡатыш ямғырҙар яуа башлағас, һалҡын үҙәктәренә үткән йомрандар ҡайҙа йәшенергә белмәй сабышалар, һәр ышыҡ урын өсөн талашалар, һәр емеш өсөн ыҙғышалар икән. Ас балалары ризыҡ таптырып, ата-әсәләрен үлтереп апаралар, ти.

Бер көндө ҡалын ғына итеп ҡар яуып һалып ҡуя. Йомрандар, сараһыҙҙан, ергә йүгерешеп төшөп, элекке ояларын эҙләргә керешәләр. Ә ул оялар ҡарауһыҙлыҡтан ишелеп, емерелеп, таш, ҡом менән ҡапланып бөткәндәр. Ҡайһыларына йылан, терпеләр ояланған. Шул йылда күп йомрандар ҡырылған. Йәйгеһен тыуған балалары бигерәк күпләп үлгән, ти. Сөнки элекке тормош рәүешен иҫләгән өлкән йомрандар әҙ-мәҙ үҙҙәрен туйындыра алһа, ерҙә йәшәү тәжрибәһе булмаған балалары, ҡайҙан, нимә табып ашарға ла белмәгән...

Баҡтиһәң, теге маймылдар үҙҙәренең илендә лә шулай хәйлә ҡороп, ерҙә йәшәгән ғәмһеҙ яҡташтарын күптән ағас баштарына күсереп бөткәндәр икән. Ул хәйләкәр, хатта мәкерле ысул улар тарафынан электән үҙләштерелгән булған, имеш. Емештәр ағас башында сағында ерҙәге йөнлектәр ҡойолоп төшкәндәре менән генә туҡланып, көн иткәндәр. Ынтыла, һикерә алғандары үрелеп алып та ашағандар. Ә, мәле етеп, емештәр ботаҡтарынан өҙөлөп төшә башлаһа, ас маймылдар йүгерешеп төшкәнсә, ерҙәге өлгөрөмдәр бөтә емде ашап бөтә лә ҡуя икән. Ана шул кемуҙарлыҡ, кемалдыҡты бөтөрөр өсөн маймылдар үҙҙәренең яғында йылан, кесәртке, хатта баҡаларҙы өгөтләп, алдап, юхалап, ҡурҡытып, ағас баштарында йәшәргә күндергәндәр, ти. Өлкәндәре ыңғайына шундай йәшәү рәүешенә күнеккән балалары, ерҙә йәшәү һәләттәренән яҙып, башҡаса ергә төшөп йәшәй ҙә белмәгәндәр, үҙҙәренең балаларын да өйрәтә алмағандар. Ағас ботаҡтарында етеҙ маймылдарҙан ҡалған барлы-юҡлы ризыҡ менән туҡланып, аслы-туҡлы йәшәгән йөнлектәрҙең ҡайһылары тоҡомдарын да дауам итә алмағанлыҡтан, элегерәк ерҙә йәшәп, үрсеп өйрәнгән күп йөнлек төрҙәренең һаны ҡырҡа кәмегән, ҡайһы төрҙәр бөтөнләйгә юҡҡа сыҡҡан. Ошондай мәкерле ысул менән хәйләкәр маймылдар байтаҡтан бирле яттар, хатта йөнтәҫ ҡәрҙәштәре иҫәбенә үҙҙәренең йәшәү, туҡланыу даирәләрен киңәйтәләр икән...

Хәҙерге донъяла барған хәлдәрҙе хәтерләтмәйме һеҙгә ошо әкиәт? Әкиәт кенә булһасы... Был бит бөгөнгө көндә ҡайһы бер үҙҙәрен "донъя хужалары" итеп һанаған тәкәбберҙәр тормошҡа ашырырға тырышҡан сәйәсәт! Хикәйәләге хәлдәр кеүек, ата-олаталарының йәшәү рәүешен инҡар итеп, яттарса ғәмһеҙ, ғәрһеҙ йәшәргә ниәтләнгән быуын ярыҡ кәритә эргәһендә ултырып ҡалды түгелме? Хәҙер күптәр, кеше көнлө булып, ҡайҙан тапһа табып, донъя көтөр хәлдә. Ҡайҙан килтереп, нимә һаталар, шуны айырмай ауыҙына ҡаба. Яһалма ҡатнашмалар ҡушылып етештерелгән ризыҡ менән туҡланып, ағыулана. Сит ерҙәрҙә яттарҙың ҡый-ғыпырҙан тегеп, яһап килтергән кейем-һалымдарын затлы күреп кейә, тауарҙарын ҡуллана. Ят бауырҙың холоҡ-ҡылыҡтарына ҡыҙығып, уларҙы үҙләштереп, балаларын уларса тәрбиәләүҙе алдынғылыҡ күрә. Теләктәрҙә тотанаҡһыҙлыҡ, ғәҙәттәрҙә аҙғынлыҡ ғаиләләрҙе ҡаҡшата. Нәҫел, зат ҡиммәттәренең, аҫыл ғөрөф-ғәҙәттәрҙең бәҫе юғала. Яттар ҡотҡоһона уйһыҙ бирелеп, ят тормош рәүешен, ят холоҡ-ҡылыҡтарҙы үҙләштерергә тырышҡанда, кешеләр үҙҙәренең тәбиғи асылынан яҙыуы менән бер рәттән, кешелеклек сифаттарын да юғалтыуы ихтимал бит... Йөҙөн юғалтып, үҙ ҡәҙерен белмәгәндәр киләсәктә быуынын дауам итә аламы икән?

ЗАУЫҠ

Таңһылыу ҠАРАМЫШЕВА

# ЙӘНЬЕҘГӘ ЙӘН БИРГӘНДӘРҘЕҢ



## Тоҡомо беҙ икәнбеҙ...

### Сығанаҡ

Тәү атабыҙ, тәү әсәбеҙ -
Йәнбирҙе, Йәнбикәбеҙ.
Йәнһеҙгә йән биргәндәрҙең
Тоҡомо беҙ икәнбеҙ.
Баш бабабыҙ, баш әсәбеҙ -
Туфанда батмаусылар,
Ҡоро ерҙә иҫәнлектә
Тормошто башлаусылар.
Ҡаныбыҙҙы тапшырыусы
Нәҫел тыуҙырыусылар,
Үрсем башлап, һәләкәткә
Нөктә ҡуйҙырыусылар.
Йәнебеҙҙең сығанағын
Ҡоротмаусы затыбыҙ -
Йәнбирҙебеҙ, Йәнбикәбеҙ!
Йәшәй беҙҙең халҡыбыҙ.

### Утрау

"Дүрт ягын диңгеҙ ураҡкан
Булған икән бер урын".
Йәнбикә менән Йәнбирҙе
Йәшәгән унда борон.
Улар булған - ошо икәү
Ҡоро ер табыусылар,
Мөхәббәттең утрауында
Балалар бағыусылар.
Урал булған улар улы,
Үлемде үлтереүсе,
Йәшәһен ер, тиеп үҙен
Ҡорбанға килтереүсе.
Булат ҡылысы ҡулында,
Аҡбуҙаты аҫтында,
Һомай ҡошо - ҡояш ҡыҙы
Булғандыр ҡосағында.
Улар батыр ярҙамсыһы,
Улар батыр терәге.
Уралым, тип ярһып тибә
Һаман башҡорт йөрәге.
Беҙ түгелбеҙ, юҡ, түгелбеҙ
Яманлыҡтың тауында.
Йәшәп ятабыҙ һаман да
Мөхәббәт утрауында.

### Илһамтау

Донъяны һыу ҡаплағандыр,
Һыуҙан иҫән ҡалғанбыҙ.
Донъяны ут ялмағандыр,
Уттан ҡала алғанбыҙ.
Булған, бар һәм буласаҡбыҙ!
Йәшәйбеҙ беҙ һаман да.
Һыуҙан ҡалған, уттан ҡалған
Тоҡомобоҙ Уралда.
Һыу яралткан ерҙә, күктә,
Бөйөк ғаләм тауында
Ҡон итәбеҙ, ҡаныбыҙҙа
Йәшәткес көс барында.
Йәнбирҙебеҙ, Йәнбикәбеҙ
Булған мәлдән беҙ барбыҙ.
Ергә, күккә, һыу, һауаға
Айырылған донъябыҙ.
Тәүге, һуңғы төйәгебеҙ -
Ҡәҙерлебеҙ Уралтау.
Һаҡлай беҙҙе, беҙ һаҡланһаҡ
Уттан, һыуҙан ҡалған тау -
Илһамтау!

### Онотҡанбыҙ

Онотҡанбыҙ, онотҡанбыҙ
Ҡай туфандан ҡалғанды.
Иҫләйбеҙ тик ҡоро ерҙе
Ҡарға табып алғанды.
Онотҡанбыҙ, онотҡанбыҙ
Ҡайҙарҙан юл тотҡанды.
Иҫләйбеҙ тик һыу ураткан
Ергә килеп сыҡҡанды.
Онотҡанбыҙ, онотҡанбыҙ
Иң тәүге боронғоно.
Иҫләйбеҙ тик, беләбеҙ тик
Һыу һарҡкандан һуңғыны.
Киң диңгеҙҙең өҫтәрендә
Тау барлыҡҡа килгәндәй,
Ҡалҡып сыҡҡанбыҙ үткәндән
Уралдай, Ирәмәлдәй.
Онотманыҡ, онотманыҡ
Ҡайҙан төйәк алғанды.
Аңлайһылар ҡалды бары
Ҡайҙа китеп барғанды.

### Йәһәннәм

Диңгеҙҙәрҙең төптәренән
Ҡоро ер ҡалҡҡан саҡта,
Йәннәт кеүек был донъябыҙ
Йәйерәп яткан саҡта,
Ерҙә әле бер төрлө лә
Һуғыш булмаған саҡта,
Кеше әле яу сапмаған,
Ҡандар ҡоймаған саҡта,
Барымталар, ҡарымталар
Әле тыумаған саҡта,
Юлбаҫарҙар, илбаҫарҙар
Баштар ҡыймаған саҡта,
Әҙәм заты был донъяны
Һөйөп туймаған саҡта,
Мөхәббәттә йәшәргә тип
Ихлас уйлаған саҡта,
Яуызлыҡты бер кеше лә
Әле ҡылмаған саҡта,
Ҡайғы йәше яңаҡтарҙы
Әле йыумаған саҡта,
Донъябыҙҙың күктәрендә
Туптар осмаған саҡта,
Ҡалаларҙы, ауылдарҙы
Һөрөм йотмаған саҡта,
Балаларҙы, ҡарт-ҡороно
Бер кем ҡырмаған саҡта,
Кешелектең баш осонда
Ҡорал тормаған саҡта
Булды микән ер ожмахы,
Булды микән ул баҡса?
Ер тамуғы тағы күпме
Дауам итер, йә, ҡанса?
Ҡасҡым килә ерҙәге был
Йәһәннәмдән йыраҡҡа,
Дүрт ягын диңгеҙ ураҡкан
Алыҫ-алыҫ бер яҡҡа...

### Үҫеш

*"Донъя ул бер баҡ икән"*
*"Урал батыр" эпосынан*

Донъя ул бер баҡса икән!
Был һүҙ юҡҡа тыумаған.
Кеше ерҙең ожмахтарын
Баҡса тиеп уйлаған.
Урман тиеп уйламаған,
Түтәл тиеп уйлаған.
Һутлы, татлы емештәрҙең
Уңыштарын туйлаған.
Кеше йөндөн эйәһен дә
Үҫемлек тип уйлаған.
Көнө бөткән үҫмерҙәрҙе
Баҡсаны тик ҡыйлаған.
Йәлләмәгән бер ҙә донъя
Тыҙған бер үҫемлеген.
Бағты сүптән бушаткан да
Башлаған яңы көнөн.
Донъяларҙың баҡсаһында
Йәшәй ҙә йәшәй кеше.
Йәшәү-йәшәмәү мәсьәләһе
Баш ҡорттарҙың баш эше.
Баш януарҙың, баш кейектең
Барһынан өҫтөнлөгө
Бирә, бирә емештәрен
Тик кеше өҫтөнлөгө.

### Торатау

Диңгеҙ төбөнән ҡалҡҡандан
Бөгөнгәсә торған ул.
Ҡоро ер тапҡан кешегә
Изге төйәк булған ул.
Таш өйөмө генә түгел,
Тик тау ғына түгел ул.
Тәбиғәттең ҡомартҡыһы
Һыуҙан сыҡҡан бирле ул.
Тыумаҡ булғас, тормаҡ барын
Раҫлаусы тауыбыҙ ул.
Тыумаҡ башлаған донъяны
Аңлаусы аңыбыҙ ул.
Башҡорт өсөн шундай урын:
Йәнененең бер өлөшө,
Күңеленең бөтөнлөгө,
Йөрәк ҡаны тибеше.
Ябырылды тауҙарға ла
Күҙе тонған ҡара дау.
Тағы ла яу халҡыбыҙға...
Һауала тора шандау -
Ау!

### Ҡаҙанмыш

Диңгеҙҙәрҙән ҡоро ерҙе
Астырыусы мин түгел.
Тупраҡтарҙа сәскәләрҙе
Аттырыусы мин түгел.
Донъялыҡта кешелекте
Үҫтереүсе мин түгел.
Эҙләп табып, үлемде лә
Үлтереүсе мин түгел.
Мин түгел ул күк таштарын
Кире күккә бырғаусы,
Ҡоткарыусы, ер ғүмерен
Мәңгелеккә ялғаусы.
Мин түгел ул тәбиғәткә
Йәшәрткес көс бөркөүсе.
Мин бары тик йәншишмәнән
Терек һыуын эсеүсе.
Үҙемә ғүмер биреүсе лә,
Алыусы ла мин түгел.
Быларҙы мин хәл итмәйем,
Бойороусы мин түгел.
Ер хужаһы - күк эйәһе,
Йыһандың яһаусыһы.
Яһаусының мин түгелмен
Хатта ки ярҙамсыһы.
Мин барыһы Ижадсының
Яһалмышы ғынамын,
Уйлап тапҡан бер уңышы,
Ҡаҙанмышы ғынамын.

### Милләт

Быуаттарҙан быуаттарға
Һуҙылып килгән сылбыр,
Ваҡыт аты дуғаһында
Сыңғырап килгән ҡыңғыр!
Уттан ҡалған, һыуҙан ҡалған -
Төшмәгән уға ҡырғын.
Туктамаған бер ағым ул,
Теймәгән уға торғон.
Өҙөлмәгән нәҫелебеҙ,
Юғалмаған ҡаныбыҙ,
Киҫелмәгән телебеҙ ул,
Мәртәбәле даныбыҙ!
Осорҙарҙан осорҙарға
Һаҡланған ҡотобоҙ ул.
Йәнебеҙҙең сығанағы -
Терелткес рухыбыҙ ул.
Беҙҙе һаман бар итеүсе
Мәңгелек моңобоҙ ул.
Сылбырҙарҙы һуҙып килгән
Лайыҡлы юлыбыҙ ул.

## АЛДАР МЕНӘН ЕРӘНСӘ ҠОРО



# ЕЙӘНСУРА МӘҘӘКТӘРЕ

### Советский черт

Был хәл Сирғол ауылында булған. Бер көн кис бабайы әбейенә гәзиттә баҫылған "Советский черт" тигән мәҡәләне уҡып ишеттергән. Унда ошондай ваҡиға яҙылған була.Һәр айҙың пенсия алған көнөндә бер әбейгә битенә маска кейгән берәү инеп, унан аҡса таптыра икән. Әбейҙең:

"Һин кем?" - тигән һорауына, ул: "Советский черт", - тип яуаплай икән. Аҙаҡ әбей милицияға хәбәр иткәс, төнөн аңдып тороп, теге "Советский черт"ты тоталар. Ул әбейҙең күршеһе булып сыға. "Шайтан" ер аҫтынан әбейҙең баҙына тиклем юл ҡаҙған икән...

Шундай әкәмәтте уҡып, әбей менән бабай йоҡларға ята. Ҡурҡыштарынан хатта ҡунаҡҡа килгән кейәүҙәре тураһында ла оноталар. Был ваҡытта Ырымбур өлкәһенең Гай ҡалаһынан килгән кейәүҙәре ошо ауылда йәшәгән бажаһы менән ҡырға сығып, тәбиғәт ҡосағында байрам итеп йөрөгән була. Ҡараңғы төшкәс, был икәү усаҡ яға. Бажаһы тире йыйыусы булып эшләгәс, арбала кәзә тиреләре була. Ике бажа тиреләрҙе аҫтарына түшәп, усаҡ янында ихлас байрам итәләр. Бер мәл ямғыр яуа башлағас, кейенергә тип арба янына килһәләр, егеүле ат та, арбала яткан кейемдәр ҙә юҡ икән. Улай-былай йүгереп эҙләп ҡарайҙар ҙа, атты таба алмағас, ҡайтырға булалар. Гайҙан килгән кейәү, йылыраҡ булһын, тип, өҫтөнә кәзә тиреһен ябына.

Ауылға ҡайтып еткәс, бажаһы - үҙ өйөнә, ҡунаҡ ҡәйнәләренә юллана. Ҡараңғы төндә кейәү ишек шаҡый. "Советский черт" тураһында уйлап, ҡото осоп йоҡлай алмай яткан ҡәйнә ишек янына килеп:

- Һин ҡайҙан? - тип һорай.

- Мин Гайҙан, мин Гайҙан, - тип һикерәнләй өшөгән кейәү.

Кәзә тиреһе ябынған яланғас ирҙе күреп ҡото осҡан әбей келәне шарт элә лә, ҡалтырана-ҡалтырана бабайын уята башлай.

- Бабай, тор, советский черт килгән. "Һин ҡайҙан?" тиһәм, "Мин ҡайҙан", тип һикерәнләп тик йөрөй. Ишшу, мин - советский черт, тип әйтә...

### Үәт һыйланы!

Сәлихйән ҡарт Шәфиғулла олатайға ҡунаҡҡа барған. Уныһы ҡунағын ит, ҡаҙы менән һыйлаған, һурпаһын, сәйен эсергән. Ҡайтышлай Сәлихйән ҡарт Нәүрийән ҡартҡа һуғылған. Уныһы бабайҙы әсегән бал менән һыйлаған.

Бер төрлө булып алған Сәлихйән ҡарт өйөнә ҡайтышлай осраған кешеләргә һөйләй икән:

- Шәфиғулланың һыйы һыймы ни ул, үәт, Нәүрийән һыйланы!..

### Борҡой икән

Яңы ғына шофер булып эшләй башлаған М. ағай машинала ҡайтып килә икән. Ҡаршыға осраған машиналар саң борҡотоп үтеп китә, ти. "Йөрөйҙәр саң борҡотоп!" тип, был һәр үткән машинаны әрләп килә.

Енләнеп бара торғас, бының үҙенең башына бер уй килә һәм ул уйын тикшермәксе булып, машинаһын кинәт кенә туктата ла, кабинанан һикереп төшөп, артҡа ҡарай йүгерә.

Кире машинаһына ултырғас, төшөнкө тауыш менән эргәһендә ултырған кешегә әйтә:

- Минең машинаның артынан да борҡой икән дә...

**Земфира АҠБУТИНА.**
**Ейәнсура районы**
**Ибрай ауылы.**

✓ *Даими рәүештә йоҡо туймау ҙа ғүмерҙе ҡыҫҡарта. Һәр кеше тәүлегенә ете сәғәт ял итергә тейеш. Шулай уҡ ултырып эшләүселәр ҙә хәүеф төркөмөнә инә. Бер сәғәт ултырып телевизор ҡарау ғүмерҙе 22 минутҡа ҡыҫҡарта.*



ИНТЕРНЕТТАН



# ТУҢДЫРМА...

## кәйефте күтәрә

■ Икмәк, маргарин, тәм-том һәм башҡа аҙыҡтарға өҫтәлгән киң билдәле өҫтәмәләр эсәк яман шешенә килтереүе бар, тип иҫкәртә ғалимдар. Эшкәртелгән күпселек ризыҡтың һаҡлау ваҡытын оҙайтыу өсөн тәғәйенләнгән был эмульгаторҙар эсәк микрофлораһын үҙгәртә. Һөҙөмтәлә ялҡынһыныу барлыҡҡа килә, был иһә яман шеш үҫеүенә шарттар тыуҙыра. Джорджия университеты ғалимдары лаборатор сысҡандарға ике төр эмульгатор ашата. Уларға полисорбат 80 йәки карбоксиметилцеллюлоза биргәндәр. Был микрофлораның үҙгәрткән, шешеү барлыҡҡа килгән һәм һөҙөмтәлә ямаш шеш күҙәнәктәре күберәк булғнгән.

■ Йоҡоһоҙлоҡ - организм һәм психика өсөн етди һынау. Йоҡоноң сифатына күп факторҙар, мәҫәлән, стрестан башлап генетик ауырыуҙарға тиклем тәьҫир итә. Туҡланыуға ла иғтибар итергә кәрәк, ти ғалимдар. Йоҡоһоҙлоҡ менән интегеүселәрҙең рационына банан өҫтәргә кәрәк. Уның составында калий менән магний бар. Триптофан тигән аминокислота серотонин синтезында ҡатнаша. Серотонин иһә "йоҡо гормоны" мелатонинға әйләнә. Шуға ла йоҡларға ятыр алдынан банан ашағыҙ. Шулай уҡ аҡһымға бай йомортҡа, эремсек, тауыҡ ите йоҡлап китергә ярҙам итер. Аҡһым матдәләр алышыныу процесын да әүҙемләштерә. Бер стакан йылы һөт тә тик файҙаға буласаҡ.

■ Күҙгөләге сағылышығыҙ үҙегеҙгә оҡшамай башлаһа, йәшәү рәүешен үҙгәртергә ваҡыт еткән, ти белгестәр. Мәҫәлән, бер юлы бер нисә эште башҡарыу стресҡа алып килә. Сөнки был осраҡта үҙең менән ҡәнәғәтһеҙлек тойғоһо арта, ә ул иркеле радикалдар барлыҡҡа килеүенә йоғонто яһай. Тәм-том ятатыу ҙа насар ғәҙәт. Артыҡ килограмдарҙан тыш, ул тышҡы ҡиәфәттә сағылыш табасаҡ. Шәкәр молекулалары протеин һәм майҙарҙы үҙенә тарта. Был процесс тиренең тәбиғи ялтырауын, тонусын юғалтыуға, шулай уҡ һырҙарға алып килә. Матур булып ҡалырға теләүселәр шәкәрҙе йәшелсә-емеш, бал менән алыштырырға тейеш. Даими рәүештә йоҡо туймау ҙа ғүмерҙе ҡыҫҡарта. Һәр кеше тәүлегенә ете сәғәт ял итергә тейеш. Британия ғалимдары шулай уҡ ултырып эшләүселәрҙе лә хәүеф төркөмөнә индерә. Бер сәғәт ултырып телевизор ҡарау ғүмерҙе 22 минутҡа ҡыҫҡарта, ти улар. Компьютер артында ярты сәғәттән күберәк ултырырға тура килһә, 30 минут һайын тороп, хәрәкәтләнеп алырға кәрәк.

■ Британия ғалимдары кәйеф булмағанда туңдырма ашағыҙ, тип кәңәш итә. Улар туңдырманың мөғжизәле сифатына ғилми аңлатма ла тапҡан. Лондон тикшеренеү институты хеҙмәткәрҙәре был татлы ризыҡты ашағандан һуң кешенең баш мейеһендә барған процестарҙы МРТ ярҙамында күҙәткән. Баҡтиһәң, туңдырма баш мейеһенең шатлыҡ тойғолары барлыҡҡа килә торған өлөшөнә йоғонто яһай икән. Был зонаны әүҙемләштереү өсөн бер балғалаҡ туңдырма ашау ҙа етә. Ғалимдарҙың иҫәпләүе буйынса, һәр кеше йылына уртаса 12 кг туңдырма ашай.

ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!

# ДИМСЕЛЕК...

## буйҙаҡлыҡтан ҡотҡарыр бер сара

**Бөгөн егеттәрҙең буйҙаҡлығы көнүҙәк мәсьәләләрҙең береһе, хатта ғаиләләрҙең баш бәләһе булып тора. Уның сәбәптәрен төпсөнә башлаһаң, һыныҡҡа һылтау табыла инде ул. Күптәр ата-әсәләренең елкәһендә икәүләп йәшәүҙе хуплап еткермәй, йәиһә, йәшәргә йорт, ҡулға эш юҡ, һәм башҡа шуның кеүек сәбәптәрҙән ары үтмәйҙәр. Минең фекеремсә, хәҙерге егеттәргә етеп-төртөп йөрөтөүсе еңгә-еҙнәләр мәктәбе һәм тәүәккәллек, ныҡышмаллыҡ етмәй.**



Ошоға бәйле йәш саҡтағы хәтирәләрҙе яңыртмаҡсымын. 1972 йылда Сибай педучилищеһын тамамлағас, мин үҙемдең районыма эшкә ҡайттым. Мине Сораман ауылы мәктәбенә эшкә тәғәйенләнеләр. Ошо хаҡта ишетҡәс, атай, ул ауылдың ҡыҙҙар урлау менән даны сыҡҡан, тип, күңелемә шик-шөбһә һалды. Ләкин нишләйһең инде, ҡулға бойороҡ алынғас, минең өсөн артҡа юл юҡ. Иҫән-аман бер йыл уҡытҡас та, был ауылдан китермен, тигән уй менән эшкә тотондом. Тәүге ярты йыл самаһы ваҡыт фатир менән мәктәп араһындағы юлды тапап үтте. Тиҙҙән йәмәғәт эштәре уртаһына ҡайнау, асыҡ йөҙлө халыҡтың уҡытыусыларҙы хөрмәт итеп тороуҙары, айырыуса уҡымышлы кешеләргә ҡарата булған йылы мөғәмәләләре күңелгә оялап өлгөргән шиктәрҙе елгә осорҙо. Шулай ҙа уяулыҡты юғалтмайым: "Каран" фермаһында "Боевой листок" сығарыу өсөн аҙна һайын иптәш ҡыҙ менән бергә генә барабыҙ. Киноға ла хужабикә оҙатыуында ғына барып ҡайтам. Үҙемсә, һаҡланғандың - һағы ятыр, тигән фекерҙәмен.

Шулай бер саҡ кис фатирҙа хужабикәм менән икебеҙ генә ултырабыҙ. Мин иртәнге дәрескә әҙерләнәм. Тынлайһыңмы, юҡмы, апайҙың унда эше юҡ, ул хәбәрен сурыта бирә. Иғтибар йөҙөнән ара-тирә уға һорауҙар ҙа биргеләйем. Һүҙ йомғағы кәләш алыу темаһына барып терәлгәс, һүҙҙе үҙемә күптән тынғы бирмәгән ҡыҙ урлау тураһындағы темаға борам. Хужабикәм, артыҡ иҫе китмәй, илтифатһыҙ ғына һөйләй башланы:

- Ике йәш йөрәктең ризалығы менән ғаилә ҡорғанда "Ҡыҙ урлау" йолаһы беҙҙең тарафтарҙа борон-борондан атҡарыла килә. Ундай-бындай яуаплылыҡҡа тарттырыу кеүек ваҡиғалар булғаны юҡ. Бала-сағалы булып, барыһы ла гөлдәй итеп йәшәйҙәр. Уйлап ҡараһаң, һәр ата-әсә, буй еткереп килгән ҡыҙын кейәүгә биреү, йәиһә, армиянан ҡайтҡан улын башлы-күҙле итеү яйын ҡарай. Был мөһим мәсьәләне, йәш кеше үтә аҡылланып китмәҫтән алда, йәғни, 20-25 йәшкә етмәҫ борон, аҙыптуҙып, тәрлә һылтауҙар тапмаҫтан алда эшләргә тырышалар. Шул йәһәттән, был яуаплы эштәрҙе үҙҙәренең араһындағы, йә шул төбәктәге абруйлы, һүҙе үткән димсе килене йә кейәүенә йөкмәтәләр. Ә еңгә-еҙнәләр балдыҙҙары, тәнәйҙәре менән туранан-тура һөйләшергә әүәҫ. Ике яҡтың тел төбөн тартҡыслағас, димсе еңгәләр әүҙемләшә, хатта дөбөрө батмаған тәнәйенә ярҙамсы булып үҙе лә ҡыҙ яғына бара. Һөҙөмтәлә, егет һөйгәнен етәкләп, йортона ала ла ҡайта.

Егеттәрҙең тәүәккәлдәре бындай эште үҙҙәре лә атҡарып ҡуя: ауылға медпунктҡа, мәктәпкә эшкә килгән ҡыҙҙар менән тәүҙә танышалар. Әгәр йәш йөрәктәр бер-беренә битараф түгел икән, ләкин ҡыҙ әлегә кейәүгә сығырға ризалыҡ бирмәһә, оҙаҡ уйлап тороу юҡ, хәтәр аҙымға ла баралар. Ғәҙәттә, медик ҡыҙҙарҙы, берәйһе ауырый, тип, алдапйолдап, фатирынан саҡырып сығаралар. Электән яратышып йөрөгәндәргә был бик тә ҡулай: улар йәшәп ала ла китәләр. Ләкин яңғыҙаҡ егеттәр ара-

КИНӘЙӘНЕ КИҢӘЙТЕП

**Гәзитебеҙҙең үткән һанында "Ғалим һәм дөйә ҡыуыусы" кинәйәһе баҫылғайны. Рубриканың шарты буйынса, был кинәйәләргә интерпретацияны гәзит уҡыусы үҙе яҙырға тейеш ине. Һеҙҙән хат алыуыбыҙға өмөттө өҙмәйенсә, "Тутыйғош һәм сауҙагәр" китабының авторы Носсрат ПЕЗЕШКИАНдың ошо кинәйәгә ҡарата булған фекерен баҫтырабыҙ. Һеҙ, гәзит уҡыусылар, фекер алышыуҙы дауам итеп, үҙ ҡарашығыҙҙы яҙып ебәрһәгеҙ, бик тә шат булыр инек. Ни тиһәң дә, күмәк фекер, ғөмүмән, битараф булмау үҙе үк теләктәшлек билдәһе, берҙәмлек сығанағы бит.**

# ДОҒА ҠЫЛҒАНДА

## бала кеүек бул!



"Диндәр үҫеш процесында яңы үҙенсәлектәргә эйә була. Мәҫәлән, раввиндар Ветхий Завет тәғлимәттәрен тарата, рим-католик папалары - Яңы Заветты. Исламда дини тәғлимәт имамдар, муллалар аша тарала. Әммә изге китаптарҙа яҙылғанса, дини тәғлимәттәр айырым хоҡуҡ менән файҙаланғандар өсөн яҙылмаған, улар аңларға теләгән һәр кем өсөн аңлайышлы, бер кем дә үҙен башҡаларҙан өҫтөн ҡуйырға тейеш түгел. Христос әйткән: "Доға ҡылғанда бала кеүек булмаһағыҙ, ожмахҡа инә алмаҫһығыҙ, сөнки бала аҡылы ғына хәйләһеҙ һәм дини хәҡиҡәтте аңлауға яҡын" (Евангелие от Матфея, 18:3). Ғалим менән дөйә ҡыуыусы араһындағы һөйләшеү үҙҙәрен дорфа тотоусы "белем эйәләренә", тәғлимәтте фанатҡарса ҡабул итеп, тәрлә догмаларҙы, бер ҡасан да үҙгәрмәй торған, бәхәсһеҙ ҡабул ителгән ҡағиҙәләрҙе башҡаларға ярлыҡ итеп көсләп тағыусыларға кинәйә яһай".

Балалар баҡсаһында эксперимент үткәргәндәр. Төркөмдәге балаларҙан йәшел төҫтәге шарҙың төҫөн һорағандар. Әлбиттә, улар бер тауыштан "Йәшел!" тип ҡысҡырған. Эксперимент үткәреүселәр: "Юҡ, был ҡыҙыл шар", - тип иҫбатлап маташҡан. Әммә хәйләһеҙ бала аҡылын еңеп буламы ни, улар үҙ һүҙендә торған.

Бала уйын ярата - уларға хәйләле уйын тәкдим иткәндәр. "Хәҙер беҙ һеҙҙең төркөмгә икенсе төркөмдән бер бала алып киләбеҙ, һеҙ уның алдында йәшел төҫтө ҡыҙыл тип әйтегеҙ", - тигән улар. Алып ингәндәр икенсе төркөмдән бер нәмә лә һиҙмәгән хәйләһеҙ баланы. Тағы шарҙың төҫөн һорағандар. Уйын шарты буйынса, балалар: "Ҡыҙыл!" тип ҡысҡырған. Икенсе төркөмдән килгән бала ғына дөрөҫ төҫтө әйткән. Һо-

һында ла төрлөләр бар. Хәйбулла районынан килеп, беҙҙә эшләгән ҡыҙҙы шулай урланылар. Үҙен яратмағанды бәлә тороп, егет кеше көслөк менән ҡыҙҙы үҙенеке итергә теләй. Сая ҡыҙ, өйҙөң тәҙрәһен ярып, шунан сығып ҡаса. Ни хәл итәһең, көсләп аҫҡан күҙҙең нуры юҡ. Күрше ауылдарҙан да, мәҫәлән, ҡыҙ урлап килтереү осраҡтары булғыланы. Урланыуҙы үҙ башынан кисергән еңгәбеҙ миңә үҙе бәйән итте. Сираттағы отпускыһын алғас, ул әсәһе яғынан зат-зәүерен күреү теләге менән юлға сыға. Һәм юлда Сораман ауылы егете менән танышалар. Бер күреүҙә һылыуҙы оҡшатҡан егет уға шунда уҡ үҙенә кейәүгә сығырға тәҡдим яһай. Ләкин һылыуҙың әлегә кейәүгә сығыу тураһындағы һүҙҙе ишеткеһе лә килмәй. Унан һуң, ниндәй генә ҡыҙ белмәгән-күрмәгән егеткә шунда уҡ кейәүгә сығырға ризалығын бирһен. Ауылдаш егеттәрҙән күрмәксе, егеткә ҡыҙ урлау йолаһын үтәүҙән башҡа сара ҡалмай. Йөрәгендә ғишыҡ уты дөрләп ҡабынған егет эште оҙаҡҡа һуҙырға теләмәй. Күршеләр генә йәшәгән еңгәһе менән бер төптән килешеп, ҡыҙ йәшәгән Көҙөй ауылына ат ҡыуалар. Был ваҡытта сибәркәй клубта концерт ҡарап ултырған була. Әлбиттә, еңгәһе ярҙамында егеткә ҡыҙҙы саҡырып сығарыу ҡыйын булмай. Ә теге, уны-быны аңғармай, хәйләкәр юлаусыларҙы йортона алып ҡайтып, хатта уларға сәй ҙә эсереп сығара. Рәхмәт әйтеп, хужабикә менән хушлашҡас, бер ни һиҙмәгән ҡыҙ саҡырылмаған ҡунаҡтарын оҙатырға сыға. Бына ошо уңайлы форсатты егет ҡулдан ысҡындырмай: буласаҡ кәләше аңғармай ҙа ҡала - тегене толопҡа төрөп, санаға ултырта һала... Был ҡырағай йола менән кәләш алыу 1964 йылдың 24 февралендә була. Ундай-бында ауылылыҡҡа тарттырыу кеүек нәмәләр булмай. Бала-сағалы булып, ҡәҙер-хөрмәткә төрөнөп, гөлдәй итеп йәшәп яталар...

Ошо көндән башлап хужабикәм, Ғәлиә апай, ҡыҙ үҙе риза булмаһа ла егеттәр тарафынан бөгөнгө көндәрҙә лә урланыу ихтималлығы хаҡында һүҙҙе йыш сурыта башланы. "Уҡытыусы ҡыҙҙарҙы ла урлайҙар беҙҙә", тип, мәғәнәле генә йылмайып та ҡуя. Ә мин уның хәбәрен тыныс ҡабул итәм. Уның өсөн закон бар, тип кенә ҡуям. Әмәлгә ҡалғандай, шул яҙғы төндәрҙең береһендә Сораман ауылы егетенең Муса ауылына барып, яратҡан ҡыҙы менән осрашҡандан аҙаҡ, уны арбанан төшөрмәй, үҙе менән алып ҡайтыуы тураһында хәбәр таралды. Ошо турала ишеткәс, шулай ҙа шикләнеңкерәнем. Һаҡланыу, ысынлап та, ярҙам итте. Бер төндә ишек шаҡып, ҡыҙҙар урлатыуҙа даны сыҡҡан егет тейешле кеше аша бөрәү мине урамға сығарыуҙы һораған. Хужабикә апай ҡырт киҫкән: тигенгә түгел был, тип, үҙалдына һөйләнгәнен йоҡо аралаш ҡына ишетә биреп ҡалдым. Һуңынан беленеүенсә, ул төндө ысынлап тороп мине саҡырып сығарып, урламаҡсы булғандар. Ләкин әлеге еңгә ролен башҡарыусыға ире, уҡытыусы ҡыҙға йөгөноп ҡына ҡара, башың китәр, тип йөҙрөҡ күрһәткәне хаҡында аҙаҡ үҙемә һөйләнеләр ...

Түҙгәнгә - түш ите, тип халыҡ бушҡа әйтмәгән икән. Ниһайәт, мин дә буласаҡ ғүмерлек ишемде осраттым. 23 февраль көндө, клубта Совет Армияһы көнө тантанаһын билдәләгәс, иптәш ҡыҙым ҡунаҡҡа саҡырҙы. Унда ике егет, әхирәтемдең класташтары ла саҡырылғайны. Йәштәштәрә араһында арыуҙарҙан һаналған егеттәр икәнен белә инем уларҙың. Береһен йыш ҡына гармунда уйнауын үтенеп, мәктәптәге кластан тыш сараларға, концерттарға саҡыра инек. Быңа шул егеттәр менән байрамды билдәләнек. Ул заманда эске-фәлән юҡ тиерлек. Егеттәр ҙә сама беләләр ине. Шул табындан аҙаҡ егеттәрҙең береһе мине башлап оҙата килде. Уның менән теүәл 2 ай ҙа 18 көн дуҫлашып өлгөрҙөк. Был ваҡытта икенсе ауыл мәктәбенә күсереүҙәрен һорап, роноға ғариза биреүем барыһына ла мәғлүм ине. Ләкин әҙәм балаһы уйлаһа ла, Аллаһы Тәғәлә нимә тип бойора бит әле. 11 май, йәғни шәмбе көнө, Иҫтамғолға ҡайтып килергә тейеш инем. Дәрестән һуң фатирға ҡайтыуыма бер аҙ ҡыҙып алған апай хәтәр яңылыҡ-хәбәр һала: "Һине бөгөн юлда урлаясаҡтар... Мин һине электәндән иҫкәртеп килдем бит. Тик дуҫлашып йөрөгән егетең түгел, ә үҙендә оҡшатып йөрөгәне..."

Иҫем-һушым китеп, ултыра төштөм. Хужабикәмде һыйлағастар, хәбәр хаҡ булырға оҡшай. Ахырҙа, юлға сыҡмаҫҡа ҡарар иттем. Аңҡы-тиңке хәлдә, әхирәтем йәшәгән фатирға йүгөрҙем. Хәлде ҡыҫҡаса ғына аңғарттым. Шул мәл, ҡара яныл, дуҫлашып йөрөгән егетем килеп инде. Һөйгәнен урлаясаҡтары хаҡында уны еҙнәһе иҫкәртеп өлгөргән икән. Буласаҡ ирем, киҫкен тауыш менән, өҙә һуҡты: йыйын, һине өйөбөҙгә алып ҡайтам. Ғәҙәттәге ҡырыҫлығыма баш була алмай: "Нимә улай ҡапыл, уйларға ваҡыт бир", - тип ҡаршылашам. Күрше бүлмәлә беҙҙең һөйләшкәнгә ҡолаҡ һалып торған йорт хужабикәһе ярҙамға килде: "Тәүге тапҡыр һинең ҡулыңды һораған егет фәрештә кеүек була, тиgән әйтем бар. Яҡшы егеткә барырға риза бул", - тине. Бер аҙ уйлап алдым да... тәүәккәлләнем. Тыуған ауылыма барып, яҡындарымдың фатихаһын алыу шарты менән буласаҡ тормош иптәшемә кейәүгә сығырға ризалығымды бирҙем... Шул рәүешле, сит-яттар тарафынан урланыуҙан ҡотолоп ҡалдым...

Хәҙер үҙебеҙҙең малайҙарҙы нисек өйләндереү хаҡында бер нисә һүҙ. Оло малайҙы еҙнәһенә тапшырҙыҡ. Уның өгөт-нәсихәтенән һуң, малай өйләнергә ҡарар итте. Уртансы улыбыҙ - 23, кинйәһе 21 йәштә кәләш алдылар. Шөкөр, бөгөнгө көндәрҙә өс ейән, өс ейәнсәребеҙ үҫә. Йәнә үҙем, еңгә булараҡ, бер тәнәйемде кәләшле иттем. Бының өсөн тәүҙә ике рәкәғәт хәжәт намаҙы уҡыным. Шунан буйҙаҡ тәнәйгә көн һайын атака яһарға тотондом. Минән ҡаса башлағас, һәр көн иртәнсәк йоҡонан уянғаның көтөп тә ултырырға тура килде. Тәки тегене күндерҙем. Ике балалары үҫә.

Һүҙемде йомғаҡлап, шуны әйтмәксемен: боронғоларҙың еңгә-еҙнәләр, димселек мәктәбен тергеҙергә, буйҙаҡлыҡҡа ҡаршы шул юл менән көрәшергә кәрәк беҙгә. Һәҙөмтәһе булмай ҡалмаҫ.

**Зөбәйҙә ҠӘЛӘМОВА.**
**Учалы районы**
**Сораман ауылы.**

рауҙы бер нисә тапҡыр ҡабатлағандар. Бала барыбер дөрөҫ яуап биргән. Шулай күпмелер дауам иткән. Ахыр сиктә, икенсе төркөмдән килгән бала илай башлаған. Илауын-илаған, әммә үҙ һүҙендә торған: "Йәшел", - тип яуап биреүен дауам иткән.

Үҙенән-үҙе шундай һорау тыуа: беҙ ҙә күп осраҡта балаҡыҙы кеүек саф быжданлыбыҙға ҡаршы барып, үҙебеҙ белгән, һиҙгән, күргән "төҫтө" үҙгәртеп әйтмәйбеҙме икән? Һеҙҙең фекерҙе көтәбеҙ, хөрмәтле уҡыусылар. Ә хәҙер яңы кинәйәне ҡабул итегеҙ:

### Табип бәйғәмбәрҙән айырыламы?

Бер көн Әбүғәлисинаға уҡыусыһы ошондай һорау биргән:

- Бөйөк әфәндем! Һин бөтөн ғалимдарҙан да бөйөкһөң. Фәйләсуф, табип, шағир, астролог булараҡ, ғилем талап иткәндән күберәк беләһең. Нимә һин бәйғәмбәр булырға ынтылмайһың? Иманым камил, меңәрләгән кеше һинең артыңдан эйәрәсәк һәм һәр һүҙеңә ҡолаҡ һаласаҡ. Уйлап ҡара, Мөхәммәт бәйғәмбәр ябай дөйә ҡыуыусы ғына булған, белеме, ғилеме булмаған, әммә уның һүҙҙәре һәр кемдең йөрәгенә үтеп ингән һәм миллионлаған кеше уға эйәргән.

- Осрағы тура килгәндә, мин һиңә был турала аңлатырмын, сыҙам бул, - тигән Әбүғәлисина.

Был һөйләшеү йәй көнө булған. Ҡыш еткән. Бындай һыуыҡ ҡышты хатта оло кешеләр ҙә хәтерләмәгән. Әбүғәлисина һыуыҡ үткәреп, ауырып киткән. Уның янында уҡытыусыһын бәйғәмбәр итеп күрергә теләгән уҡыусыһы булған. Биҙгәк тотоп, һыуға сарсаған ғалим бер тамсы булһа ла һалҡын һыу эсеү тураһында хыялланған. "Уҡыусым, мин һыуға сарсайым, - тигән ул. - Зинһар өсөн, урамдан бер тустаҡ һалҡын һыу алып ин әле".

Сатлама һыуыҡта бер туҫтаҡ һыу өсөн төн уртаһында ҡараңғы урамға сығыуҙы күҙ алдына килтергән уҡыусыһы юрғаныңа нығыраҡ төрөнгән. "Юҡ, әфәндем, - тигән ул. - Табиптар һиңә һыу эсергә ҡушмай. Тапма тотҡанда уның бер тамсыһы ла ағыуға бәрәбәр". Әбүғәлисинаның оторо һыу эскеһе килгән. "Зинһар, бер тамсы булһа ла алып ин, һалҡын һыуҙан да һәйбәт дарыу юҡ", - тип үтенгән ул. Уҡытыусыһының теләген үтәр өсөн йылғала мәке уйырға кәрәклеге тураһында уйлауҙан ғына ла уҡыусының тәне ҡалтырай башлаған. Шуға ла ул табиптар ҡушҡанды мотлаҡ үтәргә кәрәклеге тураһында тағы бер тапҡыр иҫкәрткән. Әбүғәлисина - бөйөк табип үҙ һүҙен иҫбатларға тырышҡан. Уҡытыусы менән уҡыусы төнө буйы догмалар тураһында бәхәсләшкән.

Таң атыу менән мәсет манараһынан мәзиндең аҙан ҡысҡырғаны ишетелгән. Дин ҡушыуы буйынса мосолмандарҙы тәһәрәт алып, иртәнге намаҙға баҫырға саҡырған ул. Әбүғәлисинаның уҡыусыһы аҙан тауышын ишетеү менән юрғанын атып бәргән, һикереп торған да, урамға сығып, һалҡын һыу алып ингән, тәһәрәт ҡылған һәм намаҙға баҫҡан.

Намаҙ уҡып бөткән уҡыусыһына Әбүғәлисина былай тип өндәшкән: "Ҡәҙерле дуҫым, иҫләйһеңме, йәй көнө һин миңә бәйғәмбәр булырға ынтылмауым тураһында һорағайның. Бөгөн мин шул һорауыңа яуап бирәм. Ябай дөйә ҡыуыусы ғына булған Мөхәммәт бәйғәмбәр бынан өс йөҙ йыл элек үлгән, әммә уның һүҙе һине бөгөн дә юрған аҫтынан торғоҙоп, сатлама һыуыҡҡа сығарғандай көскә эйә. Мин төнө буйы үтенеп тә, быға ирешә алманым. Ә бит һин мине хөрмәт итәһең - быны мин яҡшы беләм. Ғалимдарҙың ғалимы була тороп та, бәйғәмбәр булырға ынтылмауымдың сәбәбе нәҡ шунда!".

**Исмәғзәм ИСМӘҒИЛЕВ әҙерләне.**

## УҢЫШ ҠАҘАН



# ЕҢЕЛ ЙӘШӘ!

### Һабаҡтарҙан бер ҡайҙа ла ҡасып булмай

Ҡайһы бер ғаиләләрҙә "аҡса" насар һүҙ тип ҡабул ителә. Мәҫәлән, кемдеңдер ата-әсәһе аҡсаға ҡытлыҡ кисермәй, әммә бала уларҙан аҡса һорауҙы уңайһыҙ тип уйлай. Ғаиләлә, нигеҙҙә, ата-әсә үҙҙәренең килеме менән бүлешергә теләмәй һәм һәр саҡ ошо арҡала ғауға ҡуба. Бындай ғаиләлә тәрбиә алған ҡыҙ бала һуңынан ҡайҙа ғына китеп кейәүгә сыҡмаһын, уға тәғәйен һабаҡтар һәр ерҙә лә көтөп торасаҡ: тормош иптәше бик бай булһа ла, ҡатынына аҡса бирмәйәсәк!

### Тибетҡа барһам, тормош асылын аңлар инем…

Бәғзеләребеҙ тормош асылын эҙләү өсөн алыҫ илдәргә сәйәхәт итеү тураһында хыялланала... Сит ерҙә бәхет эҙләү - романтика, әммә ундағы бәхет шундағы халыҡ өсөн генә хас. Ә күпселеккә тормош асылын үҙ ерендә, яҡынтирәлә эҙләргә кәрәктер, моғайын.

### Хәүеф тыуҙырған һабаҡтар

Ҡурҡыуҙы нисек еңергә? Әлбиттә, уға йөҙ менән боролоп ҡына. Тормошта һәр ваҡыт үҙебеҙгә кәрәкле һабаҡтар тартып килтергәндән тыш, бик йыш нимәнән ҡурҡабыҙ - алдыбыҙға шул килә. Ҡыҫҡаһы, бөтөн нәмәнең сәбәбе - үҙебеҙ. Уй-фекерҙәребеҙ тормошобоҙҙоң айырым шарттарын тартып килтерә һәм тыуҙыра. Үҙгәреп, икенсе шарттарҙы һәм хәлторошто тарта башлайбыҙ. Бурыстар, эш йәки яратҡан кешебеҙгә бәйле һабаҡтар ятлап алмайынса, йә беҙ һәр ваҡыт бер үк тырмаға баҫаҫаҡбыҙ, йә һәр ваҡыт шул уҡ, әммә төрләсә тәҡдим ителгән вариантта шул уҡ һабаҡтарҙы тартып торасаҡбыҙ.

Тормош шулай ҡоролған. Тәүҙә, иҫкәртеү өсөн, беҙгә ваҡ ҡырсын ташлайҙар. Уларға иғтибар итмәһәк, кирбес оса. Уны ла иғтибарһыҙ ҡалдырһаҡ, ҙур таш аҫтында ҡалыуың да ихтимал. Әгәр үҙ-үҙебеҙгә ғәҙел булһаҡ, ҡайһы ваҡытта был иҫкәртеүҙәргә ҡолаҡ һалмағаныбыҙҙы әйтә алаҫаҡбыҙ. Ләкин ҡайһы саҡта: "Былар ни өсөн минең башҡа өйөлә?" - тигән һорау бирергә лә оялмайбыҙ.

Әгәр яңғыҙлыҡтан ҡурҡһағыҙ - яңғыҙлыҡты тартасаҡһығыҙ, оятҡа ҡалыуҙан ҡурҡһағыҙ - был да ҡасандыр тормошҡа ашасаҡ. Тормош шулай беҙгә үҫергә ярҙам итә.

### Ғүмер буйы һабаҡ ал

"Упҡынға төшөп кенә тормош ҡәҙерен аңлайһың. Абынып ҡолаған ереңдә һинең өсөн байлыҡ күмелгән. Инергә ҡурҡҡан мәмерйәлә эҙләгәнеңде табырһың", тигән Джозеф Кэмпбелл.

Тормошта ауыртыныуҙар мотлаҡ түгел, әммә ауыртыныу ғына үҙгәрештәргә стимул булып тора. Беҙгә ҡыйын булмаһа, ҡылана алабыҙ. Эгобыҙ: "Минең барыһы ла һәйбәт!" - тип тылҡыясаҡ. Әлбиттә, кемгәлер ҡыйын булғанда, был турала философияға бирелеү еңелерәк. Кемдер банкротҡа әйләнһә, уға киләсәккә шәп һабаҡ, тибеҙ. Кемдер айырылһа, айырылышыу аяҡтарында ныҡ баҫып торорға ярҙам итте, тибеҙ. Ауырлыҡтар беҙҙе сыныҡтыра ғына, тип тылҡыйбыҙ. Тик ҡыйынлыҡтар үҙебеҙҙең елкәгә төшһә, был энтузиазм ҡайҙалыр юғала, "Эй, Хоҙайым, ни өсөн?" тип һорайбыҙ. Үкенескә күрә, ысын ауырлыҡтар уңайлы булмай...

**Эндрю МЭТЬЮЗ.**
**(Дауамы бар).**

✓ Әлфиә Мырҙабаева Гран-при яуланы. Ул - 100 мең һумлыҡ сертификат менән бүләкләнде. "Мин ауылда йәшәйем, хужабикә, бер ҡайҙа ла эшләмәйем. Вокаль белемем дә юҡ, бөтә йырҙарҙы үҙем өйрәнәм. Әҙерләндем дә килдем, - ти Әлфиә.



*БАШ ЭШЛӘТМӘК*

# БӨРЙӘН РАЙОНЫНЫҢ ТӘБИҒӘТ ҠОМАРТҠЫЛАРЫ




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**13-сө һандағы сканворд яуаптары. Горизонталь буйынса:** Ҡалъя. Мауыҙҙы. Нуҡта. Муфта. Ҡаһым. Ҡыйрата. Салауат. Ҡыҙыл. Үтәбай. Таҡта. Һил. Сарыҡ. Ылау. Яҙыҡ. Йәбер. Далан. Тары. Аҡтамыр. Ноҡот. Ҡарағас. Ырғаҡ.

**Вертикаль буйынса:** Суртанды. Мулдаҡкүл. Урта. Яна. Мәрт. Ҡырҡты. Аҡтүш. Ҡауын. Һаҡла. Манара. Ҡарабалыҡты. Аттта. Ябыла. Суҡ. Ҡаҡ. Суйын. Ыҙма. Ынйы. Мул. Ҡорот.

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1438 һижри йыл.*

| Апрель (Рәжәб) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 17 (20) дүшәмбе | 4:41 | 6:11 | 13:30 | 18:51 | 20:21 | 21:51 |
| 18 (21) шишәмбе | 4:38 | 6:08 | 13:30 | 18:53 | 20:23 | 21:53 |
| 19 (22) шаршамбы | 4:36 | 6:06 | 13:30 | 18:55 | 20:25 | 21:55 |
| 20 (23) кесе йома | 4:34 | 6:04 | 13:30 | 18:57 | 20:27 | 21:57 |
| 21 (24) йома | 4:31 | 6:01 | 13:30 | 18:59 | 20:29 | 21:59 |
| 22 (25) шәмбе | 4:29 | 5:59 | 13:30 | 19:01 | 20:31 | 22:01 |
| 23 (26) йәкшәмбе | 4:27 | 5:57 | 13:30 | 19:03 | 20:33 | 22:03 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

*МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ*

# ДОНЪЯ - ӘХИРӘТ БАҪЫУЫ

Иген баҫыуына юғары сифатлы бойҙай сәсһәң, шундай уҡ юғары сифатлы бойҙай алырыңа өмөт-ләнәһең. Шул уҡ баҫыуға бойҙай урынына алабута орлоғо сәсһәң, алабута күкрәп үҫәсәген аңлап тораһың.

Бәйғәмбәребеҙ мөбәрәк бер хәҙисендә шулай тигән: "Донъя - әхирәт баҫыуы. Шул баҫыуға нимә сәсһәң, әхирәттә шуны урырһың".

Ислам ғалимдарының береһе шулай тигән: "Донъялағы кешеләр ике төргә ҡарай. Бер төрөн донъя алдай. Сөнки ул донъя ғәмен ҡыуып, Аллаһты ла, әхирәтте лә онотҡан.

Икенсе төркөмдәгеләр донъяны алдай. Сөнки улар донъялыҡтағы тормош өсөн дә, әхирәт ғәме өсөн дә тырыша. Был ике эште бергә тиң алып бара улар".

Бына шул икенсе төркөмдәге кешеләр араһында булыу хәйерле. Донъя беҙҙе түгел, ә беҙгә донъяны алдарға насип итһен Аллаһ сүбхәнәһү үә Тәғәлә!

Донъялыҡта бәхетле булыу өсөн, әхирәтте онотмайынса, тырышлыҡ менән йәшәргә кәрәк. Донъялағы тормош фани ғына. Ул ваҡытлыса бирелгән Әҙәм балаһына. Бик тиҙ үтеп китә ул. Әхирәт тормошо ғына мәңгелек.

*СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ*

# КИТАПХАНАҒА - ТӨНӨН!

**2017 йылда "Библиотөн" социаль-мәҙәни акцияһы "Ҡыҙыл китап" биттәренән" тигән девиз менән үтә. Акция 22 апрелдә Әхмәтзәки Вәлиди исемендәге Милли китапхананың төп корпусында, шулай уҡ Үҫмерҙәр һәм балалар уҡыуы үҙәктәрендә, "МЕГА" сауҙа үҙәгендә, "Ватан" паркында киске 18.00 сәғәттә башланасаҡ.**

Экология һәм айырым ҡурсыуға алынған тәбиғәт биләмәләре йылында Милли китапхана тематик кисәләр ойоштороуға иғтибар йүнәлтәсәк. Башҡорт әҙәбиәте һәм төбәкте өйрәнеү бүлеге билдәле яҙыусы һәм журналист Азамат Юлдашбаев менән осрашыуға саҡыра. "Этноауыл"да яҙыусы һәм сәйәхәтсе Камил Йыһаншин видеопрезентация үткәрәсәк. Баҫма матбуғат бүлеге "Экологик мәҙәниәт һәм мәғариф" тип аталған түңәрәк өҫтәл ойоштора, унда экологик хәүефһеҙлек, тәбиғәтте кире тәьҫирҙәрҙән һаҡлау мәсьәләләре тикшереләсәк. Ғалимә Гүзәл Вилданова "Аҡ тирмә" милли-мәҙәни үҙәге менән берлектә "Бәхет орлоҡтары" тигән түңәрәк өҫтәлгә йыя. БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай эргәһендәге Йәштәр йәмәғәт палатаһы экологик тәрбиә тураһында дискуссия планлаштыра.

Был кистә Милли китапханаға Мәскәүҙән ҡунаҡтар - бестселлерҙар авторы, М. Горкий исемендәге Әҙәбиәт институты доценты Анна Берсенева менән билдәле прозаик, сценарист Владимир Сотниковтың килеүе көтөлә.

"Ватан" этнопаркында Тормош хәүефһеҙлеге ғилми-тикшеренеү институты яңы экологик проекттар һәм торлаҡ экологияһы буйынса конструктор эштәре тәҡдим итәсәк. "Экологик штурм" Республика социаль проекттар конкурсы сиктәрендә студенттарҙың проекттары күрһәтеләсәк.

Бөтөн майҙансыҡтарҙа ла интеллектуаль уйындар, викториналар, конкурстар, квестар буласаҡ. Кино яратыусылар өсөн "Башҡортостан" киностудияһы фильмдар күрһәтә. Үҫмерҙәр уҡыуы үҙәгендә ВГИК студенттарының диплом эштәре тәҡдим ителәсәк. Шулай уҡ билдәле рәссамдарҙың күргәҙмәләре ойошторола.

# "ДУҪЛЫҠ МОҢО"



**Фәриҙә Ҡудашева исемендәге "Дуҫлыҡ моңо" башҡорт һәм татар йырҙарын башҡарыусыларҙың халыҡ-ара фестивале Нефтекамала 16-сы тапҡыр уҙҙы. Унда Рәсәйҙең төрлө төбәктәренән һәм сит илдәрҙән 52 йырсы ҡатнашты.**

Быйыл сарала Белоруссия, Ҡаҙағстан һәм Ҡырғыҙстан вәкилдәре ҡатнашты. Рәсәйҙән Удмуртия, Кемерово, Ырымбур, Ульяновск, Ҡурған, Силәбе өлкәләре, Пермь крайы, Мәскәү һәм Санкт-Петербург йырсылары булды. Бәйгеселәрҙе Заһир Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт институтының вокал сәнғәте кафедраһы мөдире, профессор, Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре Фәрзәнә Сәғитова рәйеслегендәге жюри баһаланы. Фестивалде ябыу тантанаһында республиканың мәҙәниәт министры Әминә Шафиҡова һәм Нефтекама хакимиәте башлығы Рәшит Дәүләтов сығыш яһаны. Ейәнсура районынан Әлфиә Мырҙабаева Гран-при яуланы. Ул - 100 мең һумлыҡ сертификат менән бүләкләнде. "Мин ауылда йәшәйем, хужабикә, бер ҡайҙа ла эшләмәйем. Вокаль белемем дә юҡ, бөтә йырҙарҙы үҙем өйрәнәм. Әҙерләндем дә килдем, - ти Әлфиә. - Ғаиләмдә йырсылар юҡ. Әсәйем әйтеүенсә, мин ике йәшемдән йырлай башлағанмын", - тине ул.

Шулай уҡ конкурс лауреаттары һәм дипломанттары, "Фестиваль ышанысы" номинацияһында еңеүсе асыҡланды.

*ИҒТИБАР: АКЦИЯ!*

# ҺӘР КЕМ УҠЫРҒА ТЕЙЕШЛЕ...

## йөҙ башҡорт китабы

**"Башҡорт китабы топ-100+" акцияһына килгән хаттарҙы барлауҙы дауам итәбеҙ. Һеҙ ҙә башҡорт әҙәбиәтендә һәр быуын кешеһенең иғтибарына лайыҡ әҫәрҙәрҙе/китаптарҙы тәҡдим итеүҙән туҡтамағыҙ, хөрмәтле гәзит уҡыусылар!**

**51. Йыһат Солтанов "Ҡояшлы ҡая" китабы.** "Социализм төҙөү осоронда яҙылған әҫәрҙәр булһа ла, унда бәйән ителгән ваҡиғалар, күренештәр бөгөн дә актуаллеген юғалтмаған. Был китап 1978 йылда донъя күргән. Китап уҡыусыға бигерәк тә "Алыҫ-алыҫҡа" һәм "Һыйыр тураһында йыр" хикәйәләрен мотлаҡ уҡырға кәңәш итәм. Был әҫәрҙәрҙе уҡыған һәр кеше тыуған еренә, тыуған йортона, ата-әсәһенә, өләсәй-олатаһына, туғандарына, етмеш йылдан артыҡ ваҡыт үтһә лә һаман да шаңдауы ишетелеп торған ҡәһәрле һуғышҡа икенсе күҙлектән ҡарар. Хатта үҙ тормошон башҡасараҡ ҡорорға теләге тыуыр, үкенестәрҙән генә тормаһын өсөн бөтә көсөн һалырға тырышыр, уйланыр", - тип яҙа хатында Ейәнсура районы Үтәғол ауылынан М. Г. Байбулатов.

**52. "Башҡорт халыҡ риүәйәттәре һәм легендалары" китабы.** "Был Фәнүзә Нәҙершина мөхәррирлегендә баҫылған йыйынтыҡ. Башҡорт халҡының ауыҙ-тел ижады ҡомартҡылары өс телдә - башҡортса, русса һәм инглизсә бирелгән. Ейәндәрем башҡорт телен бик яҡшы белмәһә лә китапты бик яратып уҡынылар. Үҙем дә һәр ваҡыт уны ҡул осонда ғына тотам. Легенда һәм риүәйәттәр бөтә Башҡортостан буйлап гәүһәр кеүек йыйылған, һәр уҡыған кешегә файҙалы, фәһемле, ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр еткерелә. Ер-һыу атамалары ҡайҙан килеп сығыуы тураһында ла күп яҙылған. Үҙем үҫмер саҡта "Заятүләк менән Һыуһылыу"ҙы уҡып, улар күрешкән урынды бер барып күрергә хыяллана инем. Шул төбәккә кейәүгә сығып, хәҙер тормош көтәм. Был "Башҡорт халҡының риүәйәттәре һәм легендалары" китабы ла балаларҙы башҡорт халҡының рухи байлығына, йолаларына, тарихына, көнкүрешенә ылыҡтырыр, хыялланырға өйрәтерлек", - тип яҙа Дәүләкән районы Сапай ауылынан Илдуса Лотфрахманова.

**53. Мәүлит Ямалетдинов "Һаумы, зәңгәр һауа!" шиғырҙар йыйынтығы.** "Был китап өҫтәлдә генә тора, сөнки шиғырҙар уҡырға бик яратам. Мәүлит Ямалетдиновтың ошо китабын асып, бер-ике бит уҡыным да, аҙаҡҡы битен асып ҡарап иҫем китте: автор Ҡөрьән сүрәләрен шул тиклем матур итеп шиғыр юлдарына һалған. Улар үҙенән-үҙе аңлашылып тора, унда бер ниндәй ҙә өҫтәү ҙә, кәметеү ҙә юҡ, шыма һәм оҫта ғына итеп яҙған да ҡуйған. Һәр кемдең күңеленә хуш килерлек шиғырҙар тип, бөтәһенә лә ошо китапты уҡырға тәҡдим итәм", - тип тә өҫтәгән хат юлдарында Илдуса Лотфрахманова.

**"Башҡорт китабы топ-100+"** акцияһына ҡушылығыҙ, үҙегеҙ уҡыған башҡорт китаптары/әҫәрҙәре араһынан иң-индәрен һайлап, шулар тураһында редакциябыҙға төбәп хаттар яҙығыҙ. Йәки "Бәйләнештә" социаль селтәрендәге "Киске Өфө" гәзите" төркөмөндә махсус булдырылған **"Башҡорт китабы топ-100+" акцияһы** тип аталған фекер алышыу битендә **"#башкитап"** хештегы ҡуйып, үҙ фекерегеҙҙе белдерегеҙ!

**Рубриканы Сәриә ҒАРИПОВА алып бара.**

*ӨФӨЛӘ БАР БЕР ЙОРТ*

# ХОҘАЙБИРҘИН МУЗЕЙЫ



**Бөгөнгө Өфө үҙенең заманса, Европа стиленә тартым архитектураһы менән генә түгел, ә тарихи ҡомартҡыларға бай булыуы менән дә үҙенсәлекле. Халыҡ телендә "Иҫке Өфө" тип аталған район территорияһының ниндәй генә урамынан үтмә - аҙым һайын үҙенә әллә күпме тарих һыйҙырған биналар урынлашҡан. Шундай урындарҙың береһе - билдәле партия һәм дәүләт эшмәкәре, Башҡортостанда Совет власы урынлаштырыуҙа әүҙем ҡатнашыусы, яҙыусы, публицист былтыр тыуыуына 120 тулған Шәһит Хоҙайбирҙиндың Яңы күпер урамы, 20-се йорттағы йорт-музейы.**

1923 йылда йәш Республика Хөкүмәте эске эштәр министры Шәһит Әхмәт улы Хоҙайбирҙиндың ғаиләһенә ошо йортто бүләк итә. Ул бында ни бары бер генә йыл йәшәй, ә ғаиләһе - 1960 йылға тиклем. Был - ысын мәғәнәһендә тарихи йорт, сөнки Хоҙайбирҙиндың тормошо Башҡортостан Республикаһының милли-дәүләт ҡоролошо менән тығыҙ үрелеп барғанлыҡтан, музей ошо осор ваҡиғаларын сағылдыра.

1921 йылдың декабрендә яңы алфавит буйынса әҙәби тел нигеҙҙәре тураһында мәсьәлә ҡарала, 1922 йылда алфавит һәм башҡорт әҙәби теленең орфографияһын төҙөү буйынса махсус комиссия ойошторола, уның составына Ш. Хоҙайбирҙин да инә. 1923 йылдың 18 февралендә БАССР Халыҡ Комиссарҙары Советы декретына ярашлы, Башҡорт телен ғәмәлләштереү буйынса үҙәк комиссия ойошторола, ул әҙәби телде булдырыу мәсьәләһе менән дә шөғөлләнә, Ш. Ә. Хоҙайбирҙин уның етәксеһе була. Ошо дата алдынан да был шәхесте хөрмәтләп иҫкә алыу зарур. Юҡһа, уның тыуған ауылы - Күгәрсен районының Хоҙайбирҙин ауылындағы музейы һәр саҡ иғтибар үҙәгендә, йыл һайын БР Хөкүмәтенең Ш. Хоҙайбирҙин исемендәге премияһы лауреаттары ошо ауылға барып, ҡәҙер-хөрмәт күрә. Ә шул көндәрҙә булһа ла уның Өфөләге йорт-музейе бер тапҡыр ҙа иҫкә алынғаны, лауреаттарҙың бер тапҡыр ҙа унда барыуы хаҡында ишетелгәне булманы. Бәлки, уларҙың күпселеге баш ҡалала ла бындай музей барлығы хаҡында белмәйҙер ҙә әле...

**Земфира ХӘБИРОВА әҙерләне.**

*АҒИНӘЙ ҺҮҘҘӘРЕ*

# ҺӘР ХАЛЫҠТЫҢ...

## үҙ теле

- Хужаһыҙ өй - мейеһеҙ баш.
- Ситтә алтын йомортҡалы тауыҡ булғансы, үҙ илеңдә ҡыйыш кикереклә әтәс бул.
- Китап уҡыу - тормош көҙгөһөнә ҡарау, бөтә хәлде күрәһең.
- Кеше керен күргәнсе, үҙ кереңде таҙала.
- Арттан-алдан ашатһаң да, һыйыр туймаҫ, минут һайын һыйлаһаң да, убыр ялҡмаҫ.
- Аш йәлләгән - аштан, көс йәлләгән эштән ҡалыр.
- Йәмһеҙ ҡарға - тоҡомон, көслө бөркөт ҡая тартыр.
- Һәр сәскәнең үҙ гөлө, һәр халыҡтың үҙ теле, һәр әҙәмдең үҙ шөғөлө, фиғеле.
- Балағың оҙон булһа ла, телең оҙон булмаһын.
- Иҙел ташҡанға талағың ташмаһын.
- Йәшлектә булдыра алмаһаң, ҡартлыҡта тәртипкә күн.
- Оронсоҡлағанға орсоҡ бир - йөн иләһен, ҡамасаулағанға ҡыл тоттор - ҡамсы үрһен.
- Эт яманы - буранда, кеше яманы байрамда ҡотора.
- Ҡыҫтау ергә ынтылма, аяҡһыҙы ла типкеләр.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

*АҠЫЛ-ҠАҘНА*



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# МИХНӘТ КҮРМӘГӘН...

## рәхәт тә күрмәҫ

Бер табышһыҙ ҡайтһаң да, донъя күреүең - үҙе бер табыш.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

"Тәүҙә уйла, шунан һөйлә" - был тәнҡитселәр девизы, "Тәүҙә һөйлә, шунан уйла" - был ижадсылар девизы.

**(Эдуард Форстер).**

Зинһар өсөн был "идеал" тигән сит ил һүҙен ҡулланып мәшәҡәтләнмәгеҙ, үҙебеҙсә генә "ялған" тиегеҙ ҙә ҡуйығыҙ.

**(Генрик Ибсен).**

Идеялар еңгәндән һуң мәйеттәр ятып ҡала.

**(Симона Вейль).**

Беҙҙең бөтөн уйлаған уйҙарыбыҙ ҙа маңлайыбыҙға яҙылһа, бөтөн ғаиләләр тарҡалып бөтөр ине.

**(Мария Эбнер-Эшенбах).**

Ихласлыҡ - бәләкәйерәк дозала булғанда ҡурҡыныс, ә ҙур дозала - үлемесле.

**(Оскар Уайльд).**

Әгәр ҙә һин берәй танышыңдың һинең турала ни уйлауын белгең килһә... уны асыуландыр.

**(Оливер Уэнделл).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Диңгеҙҙә хеҙмәт итеүсе бер моряк бер ваҡытта ла күрмәгән Роза исемле бер ҡыҙҙан хат ала башлай. Өс йыл хат алышалар былар. Егет был ҡыҙҙың хаттарынан башҡа йәшәй алмауын, үҙе лә аңламаҫтан, уға ғашиҡ булыуын аңлай. Хеҙмәтен тултырғас, улар осрашырға һүҙ ҡуйыша. Бына улар алдан билдәләнгән урында - вокзалда. Егет уйлана төшә: ул Розаның фотоһын да күргәне юҡ, уның нисә йәштә икәнен дә белмәй. Бөгөн ул уны таныр, әлбиттә, сөнки алдан һөйләшкәнсә, Роза түшенә роза сәскәһе ҡаҙарға тейеш була. Ә артабан нисек булыр? Шулай уйлап, тулҡынланып, егет вокзалды байҡай. Бына уның ҡаршыһына түшенә роза сәскәһе ҡаҙаған алтмыш йәштәр тирәһендәге ҡатын атлап килә. "Йә, Хоҙай, ҡасырға кәрәк. Әйләнергә лә китергә..." тип уйлап ала егет бер секунд эсендә. Әммә ул туҡтап ҡала. "Был ҡатын бит хаттары менән мине йыуатты, байрамдарға бүләктәр ебәрҙе, ул минең был ҡылыҡҡа лайыҡлы түгел". Шулай тип уйлай егет һәм ҡатындың алдына барып баҫа. Күрешергә ҡулын һуҙа. Шунда был өлкән ҡатын: "Мин Роза түгел, ул, ана, минең артымда", - ти. Егет ҡатындың артында йәшеренеберәк баҫып торған гүзәл ҡыҙҙы күрә һәм... Әгәр ҙә ул бая боролоп китеп барһа, был гүзәллекте күрмәҫ ине бит, тигән уйҙан тетрәнә... Ә бит күптәр үҙенең бәхетенә табан барған юлдағы бәләкәй генә ҡаршылыҡты ла аша атлап үтә алмай һәм борола ла китә..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Гөлназ МАНАПОВА,
Илгиз ИШБУЛАТОВ,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@mail.ru**

«Печатник» яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 14 апрель 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 5007
Заказ - 739/04